ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 май (һабанай) 2016

№21 (699)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Тик егеттәр генә уҡый ине... 5



Башҡорттарҙа ер биләүселек 7



Милли кейемдә - милли холоҡ 11



Һуғыш үткәнме ни!.. 12-13



ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***Йортоғоҙҙа аҙна һайын күңел байрамы, рух ҡуҙғыуы теләһәгеҙ, "Киске Өфө"лө булығыҙ. Ни өсөн "Киске Өфө" гәзитен уҡырға кәрәк? Беренсе сәбәп: "Мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә" тигән хәҡиҡәтте күҙҙә тотоп, бар өлкәлә - заман ағышында, сәйәсәттә, иҡтисадта, социаль һәм мәҙәни өлкәлә мәғлүмәтлелектә артта ҡалмаç өсөн. Икенсе сәбәп: бөгөн донъяны белем дилбегәһен ҡулда тотҡандар алға алып бара. Ә "Киске Өфө"- мәғлүмәт сығанағы ғына түгел, ә ғилем һәм мәғрифәт сығанағы ла. Гәзиттең индексы - 50665, 6 айға яҙылыу хаҡы - 574 һум 32 тин.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### 22 майҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһы РФ Дәүләт Думаһы депутатлығына кандидаттар тәҡдим итеү буйынса праймериз - алдан тауыш биреү үткәрә. Ә шулай ҙа кемдәрҙе халыҡ вәкиле булырға лайыҡ, тип уйлайһығыҙ?

***Мөхтәр МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Атайсал" йәмғиәте етәксеһе:*** Эйе, быйыл 18 сентябрҙә РФ Дәүләт Думаһына депутаттар һайланасаҡ, әле илдә Берҙәм тауыш биреү көнөнә әҙерлек эштәре бара икәнен беләбеҙ. Был юлы тауыш биреү ҡатнаш һайлау системаһына нигеҙләнәсәк, депутаттар сәйәси партиялар исемлеге буйынса ла, бер мандатлы округ буйынса ла һайланасаҡ, тип тә уҡығайным гәзиттәрҙән. 22 майҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһы башланғысы менән праймериз, йәғни алдан тауыш биреү сараһы үткәрелә икәнен дә ишеттек. Ошоға тиклем депутатлыҡҡа кандидаттарҙың һайлауҙар алдынан осрашыуҙарҙа булып, матур-матур вәғәҙәләр биреүенә, аҙаҡ иһә уның өсөн тауыш биргән халыҡ янына килеп тә урамауына өйрәнеп бөтөлгәйне инде. Ләкин был юлы "Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе секретары Константин Толкачев кандидаттар алдына "үҙҙәренең һүҙе менән дә, эштәре менән дә сәйәси өлгөргәнлектәрен, булдыҡлылығын раçларға тейештәр" тигән бурыс ҡуйҙы һәм үтәй алмаçтай вәғәҙәләр бирмәүҙе талап итте. Юғиһә, хәҙерге кандидаттар хатта халыҡ менән осрашып тороуҙы ла кәрәк тапмай башланы, район активын, хакимиәт башлыҡтарын йыйып һөйләшәләр ҙә - шуның менән хушһыналар. Бәлки, ябай һайлаусылар менән осрашыуҙан ҡурҡа торғандарҙыр. Ләкин халыҡ бит хәҙер уларҙан машина, трактор һорамай. Кеше күберәк һүҙ ярҙамына, рухи терәктәшлеккә мохтаж. Унан ҡала бөгөн иң ҡырҡыу мәсьәлә - ауылдың тормош хәлен күтәреү. Ә быны фәҡәт йәмғәтселеккә таянып ҡына хәл итергә мөмкин, тип уйлайым. Шуға күрә лә депутаттар төп иғтибарҙы ауыл йәмғәтселеге ролен үçтереүгә, уны ҡайһы бер вәкәләтлектәр менән тәьмин итеүгә йүнәлтһендәр ине. Бөгөн ауылдарыбыҙ хәле әллә ни маҡтанырлыҡ түгел: эшһеҙлек, юлһыҙлыҡ бәкәлгә һуға, эскелек тамыр йәйә... Эскелек, тигәндән, республикабыҙҙа "Айыҡ ауыл" хәрәкәте матур ғына башланып киткәйне. Үкенескә, ҡыуанысыбыҙ оҙаҡҡа барманы. 2014 йылғы "Айыҡ ауыл" конкурсына йомғаҡ яһалмайынса, эш туҡтап ҡалды. Матди дәртләндереү булмағанда ла, изге эштәрҙе ойоштороп, сәләмәт йәшәү рәүешен башлап йөрөгән йәмәғәтселек вәкилдәре тырышлығын "Маҡтау ҡағыҙы" менән билдәләү ҙә ҙур эш булыр ине бит. Йәмәғәтселек ролен һанға һуҡмау, халыҡ инициативаһын баçырып ҡалыуҙың бер миçалы булды был. Тап бына ошо юçыҡта беҙ депутаттарыбыҙ ярҙамына иçәп тота алырға тейешбеҙҙер. Кешеләр араһында ҡайнап, халыҡ, милләт мәнфәғәттәре өсөн тырышып йөрөгәндәр генә депутат булырға лайыҡ, тип уйлайым мин.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## *ЯҠШЫ ХӘБӘР*

## БАШҠОРТ БЕЙЕҮЕ - МЕХИКОЛА!



Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле менән "Арғымаҡ" этно-төркөмө Мексикала үтәсәк Бөтөн донъя Фольклориадаһында ҡатнашасаҡ.

Ул 27 июлдән 17 августҡа тиклем дауам итә. Беҙҙең артистар Сакатекас ҡалаһында һәм Мексиканың баш ҡалаһы Мехикола сығыш яһаясаҡ. Рәсәйҙән шулай уҡ Пермь крайы коллективы ҡатнаша. Ғәскәровсыларҙың бер сәғәтлек концерт программаһы коллективтың алтын фондын тәшкил иткән 10-ға яҡын башҡорт бейеүенән төҙөлгән. Шулай уҡ сараны асыу тантанаһында, халыҡ ижады фестивале сиктәрендә төрлө концерттарҙа ла башҡорт бейеүен күрергә, башҡорт мондарын ишетергә мөмкинлек буласаҡ.

Аҙаҡтан эстафета Башҡортостан Республикаһының рәсми делегацияһына тапшырыласаҡ - 2020 йылда Бөтөн донъя Фольклориадаһы беҙҙә үтәсәк. Мексикала сығыш яһаясаҡ программаны ансамбль тәүҙә Өфө тамашасыһына күрһәтмәксе. Концерттар 15, 16 июндә ансамблдең концерт залында була.

## *ЗАМАН БАШҠОРТО*

# СПОРТСЫНЫ

## һәр ғаилә үçтерә ала



**Асҡар һәм Эрик ХӘМЗИНДАР хаҡында ишеткәнем бар ине. Фехтованиеның рапира менән алышыу төрө буйынса Рәсәйҙең спорт мастерҙары, күп тапҡырҙар Башҡортостан, Рәсәй, Европа, донъя Кубоктары этаптары призерҙары, Рәсәй йыйылма командаһының төп төркөмө ағзалары булған был егеттәрҙең уңыштары хаҡында интернет селтәрҙәре аша хәбәрҙармын. Сираттағы ярыштарҙан һуң Өфөгә тыуған йортҡа ҡайтҡан егеттәрҙе атайҙары Хәлил Ғәббәс улы ХӘМЗИН менән бергә редакциябыҙға ҡорға саҡырҙыҡ.**

**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

12+

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УРМАН - ҮҘЕБЕҘҘЕКЕ!

***Әнүәр ШӘҢГӘРӘЕВ, Ишембай районы "Смаҡай" территориаль йәмәғәт үҙидаралығы етәксеһе:*** Хозур тәбиғәтле тыуған еребеҙҙең матурлығын киләсәк быуындар ҙа күрергә тейеш. Башҡорт халыҡ йырҙарында маҡтап йырланған Урал тауҙарының ҡуйы урмандарын һаҡлайыҡ. Урман - ул ағастар ғына түгел, ул ҡоштар, йәнлектәр, төрлө үҫемлектәр донъяһы ла. Уларҙың күбеһе Ҡыҙыл китапҡа индерелгән. Бөгөн беҙгә ошо байлыҡты әрәм-шәрәм итеүҙән туҡтарға кәрәк.

Элек һәр ҡырҡылған ағас урынына яңы үҫентеләр ултыртыла торғайны, хәҙер сит кешеләр, ҡуртымға алған урманды ҡырҡҡандан һуң, хатта территорияны тейешле кимәлдә таҙартып та китмәй. Урындағы халыҡ та урманға үҙенеке итеп ҡарамай, битарафлыҡҡа бирелгән. Сөнки уларға был урмандан бер ниндәй ҙә файҙа килмәй, ҡороп йығылған ағастарҙы йыйып алырға ла рөхсәт юҡ. Үҙ эшенә оло яуаплылыҡ менән ҡараған урмансылар булһа, бәлки, былдай борсолоуҙарға ла урын ҡалмаҫ ине.

Урман ҡарауылсылары боронғо тамғалар һалынған солоҡтарҙы тәртиптә тотоу тураһында ла уйларға тейеш. Сөнки беҙҙең Ишембай районында Үрек, Һәләүек, Шешенәк йылғалары буйында меңгә яҡын боронғо солоҡтар бар. Әлеге көндә уларҙың йөҙ иллеһен генә хужалары ҡарап тора. Ауыл йәштәрен дәртләндереп тә, сәмләндереп тә, ошо эшкә тотонорға күндереп киләбеҙ. Халыҡ, ауылда эш юҡ, тип ҡала еренә күсеү урынына ата-бабаларыбыҙ шөғөлләнгән эшкә тотонһа, бик яҡшы булыр ине. Ҡалала ла хәҙер эш табыуы ауыр. Ауылда егәрлене ер туйындыра, урман йәшәтә. Нисә быуынды туйҙырған тыуған еребеҙгә һаҡсыл, иғтибарлы булырға кәрәк. Тау-урмандарҙы янғындан ҡурсалау, йәш ағастар ултыртыу, сүп-сарҙан таҙартыу бөтәбеҙҙең дә изге бурысы.

**Камила ҒӘЛИЕВА
яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 22 майҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһы РФ Дәүләт Думаһы депутатлығына кандидаттар тәкдим итеү буйынса праймериз - алдан тауыш биреү уткәрә. Ә шулай ҙа кемдәрҙе халык вәкиле булырға лайык, тип уйлайһығыҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Хәбирйән ТАҺИРОВ, Кыйғы районы башкорттары королтайы башкарма комитеты рәйесе:*** Заманында район мәғариф хеҙмәтсәндәренең профсоюз ойошмаһы етәксеһе булып эшләргә тура килгәйне. Уҙған быуаттың 90-сы йылдары. Шул ваҡыттарҙа уҡ беҙҙән һайланған депутаттар халыҡ мәнфәғәттәрен яҡлауға бик насар ҡараны, һайлаусылары менән осрашыуҙарға килеп тә урамаңы. Әллә күпме ялыуҙар, протоколдар ебәрә инек, "Учительская газета", "Мой профсоюз" гәзиттәре аша ла сығып ҡарайбыҙ уларға. Ахырҙа, бер ниндәй реакция ла булмағас, депутат этикаһы мәсьәләләрен ҡараған махсус комиссия аша хат яҙырға мәжбүр булдыҡ. Шунан һуң ғына беҙҙең округ буйынса тауыш йыйып, тулы хоҡуҡлы "халыҡ вәкиле" булып киткән бер депутатыбыҙ һайлаусылары күҙенә салынмай ғына, һил мәлдә - шәмбе көн килеп, район хужалары менән осрашып киткән. Шул замандарҙан алып бөгөнгө көндәргәсә был йәһәттән мин бер үҙгәреш тә күрмәйем, тип әйтер инем дә, ҡайһы бер депутаттар күҙгә салына, бигерәк тә Сәлиә Мырҙабаева урындарҙа халыҡ араһында йыш була, һайлаусылары ниндәй һораүҙар менән менән мөрәжәғәт итһә лә, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер тора, һәр хәлдә, бер генә үтенесте лә яуапһыҙ ҡалдырмай. Беҙҙең районға ла ике тапҡыр килеп китте, үҙәк дауаханабыҙға ярҙам күрһәтте. Уның эшенән бик ҡәнәғәтбеҙ. Ваҡытында миңә билдәле журналист һәм йәмәғәт эшмәкәре, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты сағында Ризван Хажиевтың ышаныслыһы булырға тура килгәйне. Уның да тынғыһыҙ эшмәкәрлеген, халҡыбыҙ мәнфәғәте өсөн янып-көйөүҙәре хаҡында бик күпте һөйләй алыр инем. Тап бына шундай шәхестәр генә депутат булырға лайыҡ, тип уйлайым мин. Бөгөн, әлбиттә, һайлауҙарҙың бәҫе китте. "Халыҡ вәкилдәре" исемлегенә күбеһенсә халыҡ тормошонан, реаль ысынбарлыҡтан бик алыҫ торғандар эләгә, шуға ла теге йәки был законды сығарғанда мәсьәләгә нигеҙҙә үҙ "манараһынан" ҡарай. Һөҙөмтәлә халыҡ ҡатламы бер ниндәй яҡлауһыҙ тороп ҡала. Нисек кенә булмаһын, беҙ үҙебеҙҙең граждандыҡ бурысыбыҙҙы үтәргә, һайлауҙарҙа ҡатнашырға тейешбеҙҙер. Праймеризда ла ҡатнашырға, бюллетендәге кандидаттар буйынса үҙ мөнәсәбәтебеҙҙе белдерергә кәрәк. Һис юғы, ул исемлектә кемдәр барлығын күрәйек.

***Сабирйән ӘХМӘҘУЛЛИН, хеҙмәт ветераны:*** Хәтерләһәгеҙ, элгәрерәк һайлауҙар көнө байрамға торошло булды. Халыҡ таң һарыһынан тороп, һайлау участкаһына ағыла башлар ине, йыр-моң, шат тауыштар яңғырап торҙо. Халыҡты бераү ҙә кем өсөн дөр тауыш бирергә мәжбүрләмәне, сөнки һәр кем үҙе кандидатты эше, тормошо буйынса үтәнән-үтә күреп, белеп торҙо: ул йә маҡтаулы алдынғы эшсе, йә ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшкән һауынсы, йә уҡытыусы була ине. Халыҡ ышанысын ҡаҙанып, юғары вазифаға һайланғас та улар халыҡ араһында булды, тормоштоң бөтә ҡатмарлыҡтарын яҡшы белде, шуға ла улар сығарған закондарҙың йәмәғәтселек ризаһыҙлығына тап булғанын мин хәтерләмәйем. Әлеге көндә депутаттар палатаһы икенсерәк булып китте шул. Бөтәһе лә тип әйтмәйем, бар, әлбиттә, араларында халыҡ мәнфәғәте өсөн тырышып йөрөгәндәр ҙә. Айырыуса "Берҙәм Рәсәй" партияһынан депутаттар халыҡ араһында һәр төрлө изгелек акциялары, ойоштороу саралары менән билдәле. Мәҫәлән, күптән түгел ошо партия ағзалары "Изгелек кәрзине" проектына старт бирҙе. Уның буйынса мөмкинлеге, теләге булған һәр кеше, мәрхәмәтлек күрһәтеү маҡсатында, боҙолмай торған аҙыҡ-түлек һатып алып, ошо кәрзингә һала ала. Аҙаҡ ул мохтаждарға таратып биреләсәк. Депутаттарыбыҙ ошондай мәрхәмәтлек акцияларын һайлау мәлдәрендә генә түгел, ә даими ойоштороһон ине, тип теләге килә. Ябай халыҡ тормошонан айырылмаһындар, илдәге социаль хәлде яҡшыртыу буйынса кешелекле закондар ҡабул итһендәр. Кәрәк икән, принципиаль мәсьәләләрҙә популяр булмаған хөкүмәт ҡарарҙарын үҙгәртә алырлыҡ вәкәләттәре бар депутат корпусының, ләкин ҡыйыу, принципиаль депутаттар ғына аҙыраҡ. Депутатлыҡҡа йәмғиәттә танылыу алыу һәм шәхси тормош хәлен яҡшыртыу, аҡсалы булыу өсөн ынтылыусылар күп. Мин үҙем, мәҫәлән, ундайҙар өсөн тауыш бирергә йыйынмайым. Эштәре һәм кешелек сифаттары буйынса халыҡ араһында билдәлелек яулаған кешеләр генә үҙ кандидатураһын депутатлыҡҡа күрһәтә алалыр, тип уйлайым. Константин Толкачев: "Партия кемделер тәҡдим итәсәк йәки ҡурсалаясаҡ тип көтөргә ярамай. Һәр кандидат халыҡ ышанысын үҙе яуларға тейеш", - тип бик дөрөҫ әйтте.

**Фәүзиә
МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.**

КЕМ АЛЫҠ?

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торғаныбыҙҙы беләһегеҙ.**

Май айында гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер **"Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"; "400 башҡорт халыҡ йыры"; "Башҡорттарҙың хәрби тарихы"** китаптарын, шулай уҡ 10 уҡыусы **"Матурлыҡ календары"н** алып ҡыуанасаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

• Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Бәйләнештә: **vk.com/kiskeufa**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостандың баш ҡалаһында "ПРОФ-IT-2016" Бөтә Рәсәй төбәк мәғлүмәтләштереү проекттары конкурсы булып үтте. Рәсәй Президенты ярҙамсыһы Игорь Щёголев һәм Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "ПРОФ-IT-2016" Бөтә Рәсәй төбәк һәм муниципаль мәғлүмәтләштереү форумының пленар ултырышында сығыш яһаны. Башҡортостан - илдә йәмғиәт эшмәкәрлегенең бөтә өлкәләренә мәғлүмәт технологияларын индереү программаһын тырышып тормошҡа ашырған төбәктәрҙең береһе. Республика Башлығы Башҡортостандың ошо өлкәләге ҡаҙаныштары хаҡында һөйләне. Мәҫәлән, өс йыл эсендә электрон дәүләт хеҙмәттәре менән файҙаланыусылар 500 меңдән 2,5 миллион кешегә тиклем артты.

✓ Башҡортостан илдә файҙаланылған телекоммуникация ҡорамалдарының 50 процентҡа яҡынын етештерергә һәләтле. Был хаҡта "ПРОФ-IT-2016" төбәк һәм муниципаль мәғлүмәтләштереү Бөтә Рәсәй форумында республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Дмитрий Шаронов белдерҙе."Алдағы биш йылда компьютер, юғары тиҙлекле коммутатор, мәғлүмәт һаҡлау серверҙарының яҡынса 75-80 процентын етештерә алыр инек, - тине Дмитрий Шаронов. - Был - хәүефһеҙлек нигеҙе, беҙ уны контролдә тоторға, ил етештереүселәре уға идара итергә тейеш".

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Йыл инженеры-2015" Бөтә Рәсәй конкурсы лауреаттары һәм "Case-in" Халыҡ-ара инженерҙар чемпионатының төбәк һайлап алыу турында еңеүселәр менән осрашты. Осрашыу барышында конкурс лауреаттары - республиканың төп предприятиелары инженерҙары үҙҙәренең проекттары менән таныштырҙы, Өфө дәүләт нефть техник университеты командаһы вәкилдәре иһә инженерҙар чемпионатында ҡатнашыуҙары хаҡында һөйләне.

✓ 2015 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостанда "Иң яҡшы күп фатирлы йорт" республика конкурсына йомғаҡ яһалды. Төбәктәге 50 күп фатирлы йорт иң яҡшыһы тип танылды. Конкурс еңеүселәре Башҡортостан Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығының дипломдары һәм 100 мең һум аҡса менән бүләкләнә.

*✓ Бер туған өс ир юҡҡа сыҡҡан тыуған ауылдарын тергеҙгәндәр. Яланда бер ҙурлыҡтағы өс мөһабәт йорт ултыра. Иген игәләр, фермала һыйыр һауалар. Ауылға йән өрөүҙең башҡаса юлы юҡтыр. Ул да булһа - шәхси инициатива!*



*УЙЛЫҒА -УЙ*

# АУЫЛДАРЫБЫҘҘЫ...

## һаҡлап ҡалыу юлдары бар



### Кооперация килер ярҙамға

Бөгөн юғары даирәләрҙә ауыл хужалығы производство-ҡулланыу кооперацияларын киң йәйелдереү тураһында етди һүҙ алып барыла. Башҡорт ҡоролтайҙары фәҡәт ошо яңылыҡты электереп алырға һәм халыҡҡа сығырға тейеш. Производство-ҡулланыу кооперацияһының эшмәкәрлеген көйләгән махсус закон бар: "Ауыл хужалығы кооперацияһы тураһында" 1995 йылдың 8 декабрендә сыҡҡан 193-сө федераль закон. Унда барыһы ла аңлайышлы итеп, тәфсирләп яҙылған, урта белемле теләһә кем аңларлыҡ. Өҫтәп шуны әйтергә кәрәк: республикала 2015 йылдан ауыл хужалығы кооперацияһын үҫтереү буйынса Ауыл хужалығы министрлығы ҡабул иткән маҡсатлы программа эшләй, дәғүә итеүселәргә ҙур ғына гранттар бүленә.

Апрель башында Республика Йәмәғәт палатаһы ултырышында аҙыҡ-түлек баҙарын киңәйтеүҙә ауыл хужалығы кооперацияһының роле тураһында ҙур һөйләшеү булды. Ауыл хужалығының был йүнәлеше перспективалы булыуы хаҡында етди фекерҙәр әйтелде. Ғөмүмән алғанда, ауыл ерлегендә кооперация хәрәкәте киң ҡолас алырға тора бөгөн. Башҡалар ҡуҙғалғанда, дәүләт ярҙамынан киң файҙаланғанда ситтә ятып ҡалмаҫҡа, һуңламаҫҡа ине, милләттәштәр.

Кооперативҡа кәм тигәндә биш кеше, шул иҫәптән фермерҙар һәм крәстиән хужалыҡтары берләшә ала. Бөгөн күптәр үҙҙәре һөт-ҡаймағын, эремсек-майын, итен, йомортҡаһын ҡалаға алып барып, оҙон көн буйы урамда, йә махсус урындарҙа тороп һата. Әгәр берләшһәләр, транспорт сығымдары кәмер, байтаҡ ваҡыттары файҙалы эш өсөн ҡалыр ине. Хәҙер ҡалаларҙа, иҡтисади көрсөккә бәйле, бушап ҡалған сауҙа майҙандары байтаҡ. Кооперативҡа берләшеп, уны арзан хаҡҡа ҡуртымға алырға, дәүләт ярҙамынан файҙаланып, сауҙа майҙанын тейешенсә йыһазландырырға һәм ауыл ризыҡтарын һатыуҙы заманса ойоштороорға мөмкин.

Экологик яҡтан таҙа тәбиғи ризыҡ бөгөн ҙур һорау менән файҙаланғанын иҫтән сығармайыҡ. Пальма майы ҡушылған һөт ризыҡтары, ите булмаған колбаса, стимуляторҙар, антибиотиктар ҡаҙап үҫтерелгән тауыҡ һәм Менделеев таблицаһын тотошлай үҙ эсенә алған төрлө консерванттарҙың киң ҡулланылыуы, был турала телевизорҙан барған махсус тапшырыуҙар, йәғни ҙур магазиндарҙа һатылған ризыҡтарға ҡарата антиреклама - ауыл өсөн ҙур "плюс" ҡына. Беҙҙең илдә шулай уҡ составына ГМО - гены үҙгәртелгән организмдар, үҫемлектәр ҡушылған аҙыҡ-түлек етештереү һәм һатыу рөхсәт ителгән.

Был хәл дә һауылған һөткә, һуйылған иткә ылыҡтыра һатып алыусыны. Ҡайһы яҡтан ҡараһаң да, ауылды үҫтереү һәм күтәреү өсөн бик ҡулай мәл бөгөн.

Беҙҙекеләр икеләнгән, юлын таба алмай ыуаланған арала, башҡалар ҡуҙғалып ята. Сит бауыр кешеләре, бәләкәй ауылдарҙа магазиндар асып, тауарҙы натуралата түләү иҫәбенә бирә башланы. Ошо рәүешле май, йомортҡа, эремсек һәм башҡа йорт хужалығы продукцияһын йыялар. Арзанға алалар. Өҫтәүенә, алдашалар ҙа - үлсәп моҡсайға һалынған кәнфит-печенье йөҙ илле-ике йөҙ грамға кәмерәк булып сыға. Былайға китһә, мал үрсетә, иген сәсә башларҙар, ә урындағы халыҡ көнлөксө көнөнә ҡалыр.

### Ауылға хәрәкәт

Күңелгә йылы өргән тағы бер күренеш күҙәтелә: ҡалаларҙан, Себер тарафтарынан ҡайтып, ҡәрҙәштәребеҙ ауылда эш аса башланылар. Яңыраҡ эстрада йондоҙо Гөлдәр Ишҡыуатованың ("Башҡортостан" гәзите), яҙыусы Гөлсирә Ғиззәтуллинаның ("Ағиҙел" журналы), билдәле йәмәғәт эшмәкәре Риф Исәновтың ("Киске Өфө" гәзите) үҙ ауылдарында эш асыуҙары тураһында мәҡәләләр баҫылды. Ауылдарҙан Себерҙә эшләгән ҡәрҙәштәребеҙҙең мал үрсетеүе, ер эшкәртеүе тураһында хәбәрҙәр ишетелә. Милли матбуғаттың фәҡәт ошо теманы йыш күтәрә башлауы ла иғтибарға лайыҡ. Ун туғыҙынсы быуатта урыҫ йәштәре интеллигенцияһы ауылға хәрәкәт башлай. Әлбиттә, уларҙың маҡсаты крәҫтиәндәрҙе революцияға өндәү була. Беҙҙең осраҡта маҡсат бөтөнләй башҡа. Уртаҡлыҡ тик дөйөм күтәрелештә, ауылды уятырға ынтылыуҙа ғына булыуы ихтимал. Милли ойошмалар, милли интеллигенция тап ошо юҫыҡта берләшергә, ауылға хәрәкәт башларға тейеш бөгөн.

Күптән түгел Белгород өлкәһенән бер сюжет күрһәттеләр: бер туған өс ир юҡҡа сыҡҡан тыуған ауылдарын тергеҙгәндәр. Яланда бер төҫтәге (ҡыҙыл кирбестән) һәм ҙурлыҡтағы өс мөһабәт йорт ултыра. Иген игәләр, фермала һыйыр һауалар. "Беҙ бөтә эшкә лә үҙебеҙ тотонабыҙ. Эшселәребеҙ ҙә бар", - ти туғандарҙың береһе.

Ауылға йән өрөүҙең башҡаса юлы юҡтыр. Ул да булһа - шәхси инициатива!

Баймаҡ районында данлыҡлы "Йылайыр", "Баймаҡ", "Һәүәнәк", Йылайыр районында - "Башҡорт", "Юлдыбай", "Һүрәм", Хәйбулла районында "Таналыҡ", "Хәйбулла", "Матрай" совхоздары, эрелеваҡлы тиҫтәләгән колхоздар була торғайны. Ырҙын табаҡтарында буй-буй булып теҙелеп киткән иген бурттары, һыбайлы кеше саҡ күренгән кукуруз баҫыуҙары, фермаларҙағы меңәрләгән баш һыйыр малы, иҫәпһеҙ-һанһыҙ бесән-һалам эҫкерттәре - былар ғәҙәти күренеш ине элек. Хәҙер ул байлыҡтан бер ни ҙә ҡалмаған - уны булдырырҙай производство ҡеүәттәре лә, белгестәр ҙә, эшсе көстәр ҙә юҡ.

Хужалыҡтар бөтһә лә, ер ҡалды. Ауылда йәшәгән күптәрҙең пай ере бар. Улар, әлбиттә, буш ята, файҙаланылмай. 2013 йылдың июль айында ҡабул ителгән 435-се закон урындағы үҙидара органдарына өс йыл үҙ тәғәйенләнешендә файҙаланылмаған ерҙәрҙе суд аша тартып алыу хоҡуғын бирә. Артабан муниципалитет ерҙе башҡаларға һатырға ла, арендаға бирергә лә хоҡуҡлы.

Халыҡтың ҡулынан инде ер ҙә китһә, ауыл, милләтебеҙҙең бишеге, тамам юҡҡа сығыу сигенә килеп терәләсәк. Был инде ысынлап та оло һәләкәт буласаҡ.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**
**(Аҙағы. Башы 20-се һанда).**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ХӘҮЕФ БУЛҒАН ЕРҘӘ...

## мөмкинлек бар

**"Балаларға телде һәм динде уҡытмағыҙ, ә уларҙа телгә һәм дингә һөйөү тәрбиәләгеҙ", тигән бер аҡыллы фекер бар. Уйланырға урын бар бит.**

Башҡорт мәктәбе өсөн тәғәйенләнгән дәреслектәр күптән инде замана балаларында телгә һөйөү уятыуҙан йыраҡ. Бөгөнгө көн зыялыларының аҡыллы фекерҙәре барып етмәй балаларыбыҙға. Революцияға тиклемге байҙарҙы яманлаған әҫәрҙәр уҡып үҫкән бала бөгөнгө баҙар шарттарына ауыр яраҡлаша. Берҙәм дәүләт имтихандарына әҙерләнеүҙәр ҙә башҡорт теле дәрестәре иҫәбенә алып барыла һәм был туған телебеҙҙең дәрәжәһен тағы ла түбәнәйтә. Шундай иҫәпкә бар, һанға юҡ мәктәптәр урынына, яңы, заманса программалар төҙөп, ысын башҡорт мәктәптәре асырға кәрәк. Ә бит закондар беҙгә шул тиклем күп мөмкинлектәр аса, уларҙы ҡуллана белергә генә кәрәк.

Ҡытай телендә "көрсөк" ике һүҙ менән билдәләнә.Тәүгеһе - Хәүефте, икенсеһе Мөмкинлекте аңлата. Бөгөнгө оптималләштереү, глобалләштереү кеүек Хәүефтәрҙән беҙ ҙә Мөмкинлектәр эҙләйек. Аптырап, ҡул ҡаушырып ултырмайыҡ, милләттәштәрем!

**Әминә ӘҘЕЛҒУЖИНА,**
**Күгәрсен районы "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығында фермерҙарға - "Ғаилә малсылыҡ фермалары" һәм "Яңы эш башлаған фермер" программалары буйынса һайлап алыуҙа еңеүселәргә сертификаттар тапшырылды. Ике программа сиктәрендә 302 миллион һум 114 яңы эш башлаған фермерҙар һәм 34 ғаилә малсылыҡ фермалары башлыҡтары араһында бүленде. Ауыл хужалығының төп йүнәлештәренән тыш, балыҡсылыҡ, eләк үҫтереү һәм үҫемлекселек буйынса проекттар ҙа грант алды. Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 2012 йылдан алып яңы эш башлаған фермерҙар һәм ғаилә малсылыҡ фермаларын үҫтереү өсөн 1,2 миллиард һум аҡса бүленгән, 653 фермер хужалығы грант алған.

✓Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа парламенттың сираттағы ултырышы Башҡортостан Хөкүмәтенең 2015 йылда дәүләт милкен хосусилаштырыу һөҙөмтәләре тураһында отчеты менән башланды. Закон сығарыусылар 60-тан ашыу мәсьәлә ҡараны. Социаль йүнәлешле коммерцияға ҡарамаған ойошмаларға дәүләт ярҙамы, мәҙәни мираҫ объекттары, бушлай юридик ярҙам тураһындағы закондарға төҙәтмәләр индерелде. Закон сығарыусылар иғтибарына "Башҡортостан Республикаһында өлкән йәштәге кешеләр һәм инвалидтар өсөн тәрбиәгә алыусы ғаиләләр тураһында"ғы закон проекты тәҡдим ителә. Көн тәртибендәге 18 мәсьәлә федераль закон проекттарына ҡағыла, 11-е республиканың айырым суд участкаларына мировой судья вазифаларына һайлау менән бәйле.

✓Башҡортостанда "Мотоцикл" иҫкәртеү операцияһы башланды. Был хаҡта республиканың баш дәүләт автоинспекторы Динар Ғилметдинов үҙенең блогында хәбәр итте. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: дөйөм талаптарға яуап бирмәгән транспорт махсус туҡталҡаға ҡуйыласаҡ.

✓Өфөнөң Дим районында балалар өсөн заманса уйын комплекстары төҙөләсәк. "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Реаль эштәр" проекты барышында халыҡ сходында майҙансыҡтар төҙөү мәсьәләһе киҫкен торған дүрт адрес билдәләнде, тип хәбәр иттеләр район хакимиәтенән.

✓Баш ҡалала рәсми теркәлгән эшһеҙлек кимәле 1,19 процент тәшкил итә. Мәшғүллек хеҙмәтендә бөтәһе яҡынса 7,8 мең өфөлө иҫәптә тора. Өфөләге Халыҡ мәшғүллеге үҙәгенән хәбәр итеүҙәренсә, әлеге мәлдә ҡаланың вакансиялар банкында 8,7 мең буш эш урыны иҫәпләнә.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА



# БАЛАНДЫ МАШИНАҒА БИКЛӘМӘ!

**РФ Президенты ҡарамағындағы бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Павел Астахов инициативаһы буйынса ошо девиз аҫтында мәғлүмәт кампанияһы үтә. Ул балаларҙың яңғыҙын ғына машинала ҡалдырыусы ата-әсәләрҙе иҫкәртеүгә йүнәлтелгән.**

Өфө өсөн был тема шулай уҡ мөһим: ошо арала ғына машинала балаларын ҡалдырып, үҙҙәренең эше менән мәшғүл булған әсәйҙәр ҡатнашлығында ике осраҡ күҙәтелде. Әлеге ваҡытта был ваҡиғалар буйынса тикшереү бара. Бындай осраҡтарҙа РФ Административ хоҡуҡ боҙоуҙар кодексының 5.35 статьяһына ярашлы, ата-әсәнең йәки балиғ булмағандарҙы ҡарау һәм тәрбиәләү буйынса законлы вәкилдәрҙең үҙ бурысын үтәмәгәне өсөн административ яуаплылыҡ ҡаралған, айырым осраҡтарҙа хатта РФ Енәйәт кодексының 125-се статьяһы буйынса (хәүефтә ҡалдырған өсөн) енәйәт яуаплылығы ла ҡулланылыуы ихтимал.

**Ни өсөн баланың яңғыҙын машинала ҡалдырырға ярамай?**

**1.** Балаға эҫе ҡабыуы йәки, киреһенсә, өшөүе мөмкин. Донъя тәжрибәһе күрһәтеүенсә, күпселек балалар машинала экстремаль температура йөғонтоһонда һәләк була. Бала тәне ололарҙыҡына ҡарағанда 5 тапҡырға тиҙерәк йылына. Эҫе һуғыуы - бик хәүефле, ул шок торошона индереүе, мейе эшмәкәрлеге боҙолоуға, ағзаларҙың эшмәкәрлеге туҡталыуына, хатта үлемгә килтереүе ихтимал.
**2.** Бала хәүефһеҙлек ҡайышына буталырға йәки быяланы күтәргес аҫтында ҡалырға мөмкин.
**3.** Машинала нимәләр янып китеүе бар.
**4.** Эвакуатор машина менән бергә баланы ла алып китеүҙәре мөмкин.
**5.** Автомобилдә берәйһе бәрҙереүе ихтимал.
**6.** Машинаны урлап алып китеүҙәре бар.
**7.** Бала үҙе машинаны ҡабыҙып, урынынан ҡуҙғалыуы мөмкин.

Бынан тыш, бикле, тар урында яңғыҙы ҡалған бала психологик имгәнеү алырға һәм артабан һөйләшмәҫкә, тотлоғорға, төндәрен иларға, йоҡлағанда аҫтын еүешләргә, нервы ҡуҙғанәктәре тартышырға, хатта ғүмерлеккә машинанан ҡурҡып ҡалырға һәм бөтөнләй транспортҡа ултырыуҙан баш тартырға мөмкин.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# БЕЛЕМДЕ ЯҘ-ЙӘЙ ҺЫНАЙҘАР...



**Быйыл баш ҡалала Берҙәм дәүләт имтиханын 5390 кеше: быйылғы сығарылыш уҡыусылары, элекке сығарылыштарҙа бирә алмаусылар һәм урта һөнәрселек мәғариф учреждениеларында белем алыусылар тапшырасаҡ.**

Уҡыусыларҙың күпселеге - 76 проценттан күберәге профиль фәненән математиканы һайлаған. Ҡала мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова белдереүенсә, теүәл фәндәргә иғтибар артҡан. Ысынлап та, БДИ тапшырыу өсөн популяр предметтар иҫәбенә информатика (22 процент), йәмғиәтте өйрәнеү (54 процент), физика (35,7 процент), тарих (22,1 процент) инә.

БДИ тапшырыу тәртибенә быйыл бер ни тиклем үҙгәрештәр индерелгән. Ул ҡайһы бер фәндәр буйынса яуап варианттарын һайлау мөмкинлеге булған имтихан материалдарының бер өлөшөнән баш тартыуға, имтихандың өҫтәмә тапшырыу этабы бөтөрөлөүенә ҡағыла. Өлгәргәнлек аттестаты алыу өсөн мотлаҡ тапшырылырға тейешле имтихан булып рус теле һәм математика ҡала. Башҡа фәндәр теләк буйынса тапшырыла. Юғары уҡыу йортона инеү өсөн БДИ-ның минималь мәрәйҙәр күләме билдәләнгән, ә быйыл 14 предмет буйынса тапшырыла. БДИ-ның алдан (21 март - 23 апрель) тапшырыу хоҡуғы менән 118 кеше файҙаланһа, шуларҙың 11-е быйылғы сығарылыш уҡыусылары. Улар - спортсылар, сәләмәтлек торошо буйынса дауаханаға ятырға тейешле балалар. БДИ-ның төп этабы, резерв көндәрен дә индереп, 27 майҙан 30 июнгә тиклем дауам итә. Әлеге ваҡытта мәктәптәрҙә мәғлүмәт-аңлатыу эштәре алып барыла, уҡыусыларҙы алда торған аттестацияға әҙерләүгә мәктәп психологтары ла ҡушылған. Быйыл имтихандар 26 мәктәп базаһында ҡабул ителәсәк. Улар кәрәкле ҡоралмалар менән йыһазландырылған. Хәүефһеҙлекте медицина, Йәмғиәт хәүефһеҙлеге үҙәге хеҙмәткәрҙәре һәм полиция тәьмин итәсәк.

9-сы синыфты тамамлаусы 8,5 мең уҡыусы рус теленән һәм математиканан, шулай уҡ ике фәндән дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы тапшырасаҡ.

# БЕР ТҮЛӘҮҘӘН...



**1 майҙан Башҡортостанда электр энергияһы өсөн дөйөм йорт ихтыяжы яңыса иҫәпләнәсәк. "Башҡортостандың энергия һатыу компанияһы" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте директоры Олег Козловтың матбуғат конференцияһында белдереүенсә, июндә граждандар фатирҙа электр энергияһын ҡулланған һәм дөйөм йорт ихтыяжы нормативы өсөн иҫәп аласаҡ. Айырманы иһә идара итеүсе компания түләйәсәк.**

Республикала күп фатирлы фондтың яртыһында дөйөм йорт ихтыяжы өсөн түләү алты проценттан артмай, тип билдәләне топ-менеджер. Улар өсөн бер ни ҙә үҙгәрмәйәсәк. Дөйөм йорт ихтыяжы дәүмәлә күберәк булған йорттарҙа йәшәгән кешеләргә түләү аҙыраҡ буласаҡ. Олег Козлов һөйләүенсә, дөйөм йорт ихтыяжы юғары булған йорттарҙың сығымдарын тикшереү барышында уларҙың щитпарына предприятие, сауҙа киосклары, йәиһә светофор, хатта полиция пунктының тоташтырылған булыуы асыҡланған. Хәҙер идара итеүсе компаниялар сығымдарҙы күҙәтеп барасаҡ, сөнки уларҙы йортта йәшәгән кешеләрҙең иҫәбенә яҙа алмаясаҡ.

"Дөйөм йорт ихтыяжы энергияны һаҡсыл ҡулланыуға бәйле. Был мәсьәләне бер йылда ғына хәл итеп булмаҫ, моғайын. Йорттарҙың күбеһендә лампочкалар тәүлек буйына янып тора. Энергия ҡулланыуҙы кәметеү буйынса программалар ҙа бар. Һуңғы йыл ярым эсендә беҙ дөйөм йорт ихтыяжының уртаса күләмен 22 проценттан 11-гә тиклем кәметә алдыҡ", - тип хәбәр итте Башҡортостан энергия һатыу компанияһының башҡарма директоры.

# УСТАВТА - ҮҘГӘРЕШТӘР



**Баш ҡала округы советының сираттағы ултырышында депутаттар уставҡа үҙгәрештәр индерҙе.**

Уларҙың иң әһәмиәтлеһе депутаттар корпусы мөҙҙәтенең дүрт йылдан биш йылғаса оҙайтылыуы. Шулай уҡ муниципаль һайлауҙарҙы ойоштороу тәртибе лә үҙгәрештәр кисерҙе. Йәғни кандидаттар исемлеге дөйөм өлөшкә һәм территориаль төркөмдәргә бүленеп, дөйөм өлөшкә һәр сәйәси партиянан өс кандидат инергә мөмкин. Бындай үҙгәрештәр һайлауҙарҙың асыҡ һәм демократик шарттарҙа үтеүенә, Советта төрлө сәйәси партияларҙың вәкәләттәре күбәйеүенә этәргес буласаҡ, тип билдәләнде. Яңы система быйыл уҡ ҡулланыласаҡ.

# НУҒАЙҘА - ЯҢЫ МӘКТӘП



**Социаль инфрастуктураны үҫтереү ҡала властары алдында торған өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙең береһе.**

Былтыр Нуғай ҡасабаһында 37-се балалар баҡсаһының икенсе корпусы асылһа, ноябрҙә бында 825 урынға иҫәпләнгән дөйөм белем биреү мәктәбе төҙөлә башланы. Ул бер нисә этапта барасаҡ. Проект буйынса дүрт ҡатлы тип күҙалланған белем усағында вестибюль, сисенеү бүлмәләре, аш-һыу блогы, уҡыу зонаһы, медицина һәм спорт блоктары, тантаналар залы буласаҡ. Бинаның беренсе ҡаты башланғыс синыф уҡыусыларына биреләсәк. 1-се кластар өсөн кабинет малайҙар һәм ҡыҙҙарҙың айырым йоҡо бүлмәләренә, уйын залына, малайҙар өсөн хеҙмәт кабинетына бүленәсәк.

Объекттың беренсе сираты ошо йылдың 4-се кварталында тапшырылырға тейеш.

# ӨЙҘӘН АЛЫҪ КИТМӘЙЕНСӘ...



**Өфө ҡала округы хакимиәте сәләмәт тормошто популярлаштырыуҙы, спортҡа ылыҡҡан йәш быуынды тәрбиәләүҙе төп урынға ҡуя.**

Был йәһәттән төрлө йәштәге кешеләр спорт менән өйөнән алыҫҡа китмәйенсә шөғөлләнә алһын өсөн күп нәмәләр эшләнә. Мәҫәлән, һуңғы 4 йылда ғына йорт ихаталарында 100 спорт ҡоролмаһы ҡуйылған. Заманса күп функциялы спорт майҙансыҡтары, хоккей ҡумталары, турник комплекстары төҙөлә. Был эшкә социаль йүнәлешле бизнес та үҙ өлөшөн индерә. Былтыр, мәҫәлән, бюджеттан тыш средстволар иҫәбенә 56 физкультура-спорт ҡоролмаһы файҙаланыуға тапшырылған, Волга буйы федераль округында ҡаяға үрләү үҙәге һәм скейт-паркы булған батут үҙәге асылған. Бөгөнгә баш ҡалала 85 хоккей ҡумтаһы иҫәпләнә. Дөйөм алғанда Өфөлә 1885 спорт ҡоролмаһы бар. Әммә был йүнәлештә эш туҡталып ҡалмайынса, артабан да дауам итә.

**З. ӘЙЛЕ әҙерләне.**

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Рәсәй Хөкүмәте ҡарамағындағы Финанс университеты 2016 йылда Рәсәйҙәге төбәк үҫеш корпорацияларының мәғлүмәт яғынан асыҡлығы рейтингын төҙөгән. Ундағы мәғлүмәттәргә ярашлы, Башҡортостан Үҫеш корпорацияһы Калининград өлкәһенән ҡала икенсе урын яуланы. Алдынғы бишәү иҫәбендә шулай уҡ Вологда, Омск һәм Ульяновск өлкәләре бар. Рейтингка 44 компания ингән.

✓Халыҡ-ара биатлонсылар союзы допингҡа ҡаршы төркөмдөң Рәсәй спортсыһы Эдуард Латиповтан ярыштарҙан ваҡытлыса сикләүҙе туҡтатыу тураһында ҡарарын баҫтырып сығарҙы. Унан алдараҡ Башҡортостан спортының ике тәрбиәләнеүсеһе - шорт-трексы Семен Елистратовтан һәм еңел атлет Гөлназ Фазлетдиновадан дисквалификация алынды.

✓Башҡортостандың Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты үҙенең бойороғо менән 2016 йылдың икенсе кварталына республиканың ҡала округтары һәм биләмәләрендә, шулай уҡ муниципаль райондарҙа дөйөм торлаҡ майҙанының бер квадрат метрына уртаса баҙар хаҡы күрһәткестәрен раҫланы. Өфө өсөн бер квадрат метрҙың уртаса баҙар хаҡы 34 724 һум тәшкил итә. Раҫланған күрһәткестәр торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж республика халҡы өсөн субсидиялар күләмен иҫәпләгәндә файҙаланыла, тиелә был документта.

✓Күмертауҙағы шәхси конструкторҙар бюроһында донъялағы иң бәләкәй вертолет эшләгәндәр - Р-30. Әйтеүҙәренсә, вертолет "ГАЗель" йөк машинаһына, мунса йәки гараж ҡыйығына ултыра ала. Донъялағы иң бәләкәй вертолет ике кешегә иҫәпләнгән. Әммә тиҙҙән унда өс урын буласаҡ. Р-30 вертолеты - бәләкәй генә түгел, тауышһыҙ һәм отошло ла. Уны Борис Поднебеснов уйлап тапҡан. Бер сәғәт эсендә ни бары 15 литр 95-се маркалы бензин тотонола. Бынан тыш, машина һауала үҙен яҡшы тота. Хатта секундына 15-20 метр тиҙлектә иҫкән ел дә идара итеүгә йоғонто яһамай тиерлек. Сит ил аналогтары бындай күрһәткестәр менән маҡтана алмай.

✓5 июндә Женевала (Швейцария) татар-башҡорт фестивале-һабантуйы уҙғарыла. Халыҡ байрамы иртәнге сәғәт 9-ҙан киске 6-ға тиклем "Silk Road" рестораны паркында үтә. Ойоштороусыһы - "Юлдаш" Швейцария татарҙары һәм башҡорттары ассоциацияһы. "Ошо сараға ҡушылыусылар өсөн 4 июндә Женева буйлап экскурсия һәм башҡорт көйҙәренә бишбармаҡ-party ойошторам!" тип хәбәр итте социаль селтәрҙә Швейцарияла йәшәүсе яҡташыбыҙ Айһылыу Йәнтүрина-Дарлес.

✓ *Башҡаларҙың унда күрһәтелгән сумманы түләүенә аптырайым. Мин 10 доллар торған әйбергә 2 доллар тәҡдим итәм. Бының һөҙөмтәһендә ҙур ташламалар алыу мөмкинлеген белһәләр, минең был ҡылығымдан бер кем дә көлмәҫ ине.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

# ТИК ЕГЕТТӘР ГЕНӘ УҠЫЙ ИНЕ...



**Республика башҡорт лицей-интернаты 1992 йылда 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының башҡорт-төрөк бүлеге булараҡ асылы. 1993 йылдың сентябренән Республика башҡорт-төрөк лицейы тип атала башлай. Әлеге көндә йөрөткән атамаһы белем усағына 2003 йылда бирелә.**

Беҙҙең лицейға республиканың алыҫ райондарынан, Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән балалар 7-11 синыфҡа уҡырға килә. Өфө ҡалаһындағы башҡа белем усаҡтарынан айырмабыҙ шунда: беҙ техник вуздарға уҡырға инәсәк егеттәрҙе әҙерләйбеҙ. Уҡыусылар физика, математика, информатика предметтарын тәрәндән өйрәнә. Башҡорт, рус һәм инглиз телдәрен уҡытыуға ла ҙур иғтибар бүленә. Физика, информатика, химия, математика кеүек предметтар буйынса айырым темалар инглиз телендә үткәрелә. Был уҡыусыларға халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән төрлө конкурстарҙа, олимпиадаларҙа, фәнни конференцияларҙа ҡатнашырға мөмкинлек бирә. Балалар инглиз телен яҡшы үҙләштерһен өсөн "Home reading competition" тип аталған проект астыҡ. Ҡатнашыусыларға инглизсә китаптар уҡырға, йөкмәткеһен ҡыҫҡаса һөйләргә һәм таныш булмаған һүҙҙәрҙе яҙып алып, ятларға кәрәк. Һуңынан иң күп китап уҡыусыларҙы билдәләйбеҙ. Әйтергә кәрәк, уҡыусылар инглиз телен бик теләп, сәмләнеп өйрәнә. Шуға күрә, беҙҙең балалар инглиз телендә үткән халыҡ-ара конкурстарҙа һәм конференцияларҙа әүҙем ҡатнаша.

Бөтә донъяға билдәле "TED" проектына эйәреп, лицейҙа "TEDxРБЛИ" тип аталған ораторлыҡ оҫталығы конкурсын даими үткәрәбеҙ. Конкурс инглиз һәм башҡорт телендә айырым ойоштороla, унда уҡыусылар донъяға таратырлыҡ лайыҡлы идеялары тураһында һөйләй. 2011 йылдан алып уҡыусыларҙы роботтар төҙөү, роботтар ярыштарына ылыҡтырыу буйынса эшләй башланыҡ. Республика башҡорт лицей-интернатында электрон белем биреү мәсьәләләре лә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Ғөмүмән, балаларҙы киләсәктә алдынғы уҡыу йорттарында уҡып, үҙ һөнәренең оҫтаһы булырҙай белемле шәхестәр итеп тәрбиәләү өсөн лицейҙа барлыҡ шарттар тыуҙырылған.

Республика башҡорт лицей-интернатында белемгә ынтылған, тырыш, рухлы, илһөйәр балалар уҡый. Уларҙың рухын байытыу, күңелдәрен үҫтереү өсөн бик күп башҡортса саралар ойоштороla. Уҡыусылар йыл да "Шаяниум" шаяндар һәм отҡорҙар конкурсында, башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса олимпиадала ҡатнаша. Үҙебеҙҙең тарихи шәхестәргә, милли йолаларға арналған матур байрамдар үткәрелә. Балаларға башҡа сит телдәрҙе юғары кимәлдә өйрәнеү өсөн тәү сиратта үҙендең туған телендә биш бармағың кеүек белергә кәрәк, тип өйрәтәбеҙ. Уҡыусыларға патриотик тәрбиә биреүгә ҙур иғтибар бүлеүҙең тағы бер сәбәбе бар. Киләсәктә улар техник вуздарҙа белем алып сығып, яҡшы белгестәр булып үҫеп еткәс, үҙебеҙҙән ил өсөн файҙа килтерергә тейеш. Ә халҡының тарихын, тамырҙарын белмәгән, туған телендә һөйләшмәгән кеше тыуған иле тураһында ла уйлап бармай...

Тик егеттәр генә уҡыуы менән Республика башҡорт лицей-интернаты башҡа белем усаҡтарынан айырылып тора ине. Киләһе уҡыу йылынан белем усағы "Инженерҙар лицейы" итеп үҙгәртеләргә тора, ул саҡта иһә ҡыҙҙарҙы ла уҡырға алыуыбыҙ ихтимал. Лицейға химик-техник, физика-математика, социаль-иктисади йүнәлештәр буйынса төплө белем алырға теләгән балалар ҡабул ителәсәк. Өфө дәүләт авиация техник университеты һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты менән технопарк, лабораториялар, төрлө уртаҡ проекттар буйынса килешеүҙәр төҙөргә йыйынабыҙ.

**Фәнил НУРИЕВ,**
**Республика башҡорт лицей-интернаты директоры.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

## БАЛАЛАР ҠӨРЪӘН ЯТЛАЙ

**29 майҙа Өфөлә республика Ҡөрьән уҡыусылар конкурсы үткәрелә. Сараны Мәрйәм Солтанова исемендәге Ислам колледжы, Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты ойоштора.**

Изге Ҡөрьән уҡыу оҫталығы буйынса ярыштарҙа төрлө номинациялар ҡаралған. Ете йәшкәсә балалар - "Фил", "Нәс", 7-12 йәшлектәр "Фәджр", "Ән-Нас" сүрәләрен белергә тейеш. Өсөнсө номинация - 12-16 йәшлек балалар. Бәйге теплоходта уҙғарыла.

Сығыштарҙы Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты етәкселеге, М. Солтанова исемендәге Ислам колледжы уҡытыусылары һәм ғәрәп илдәренән тәжрибәле профессионалдар составындағы жюри баһалаясаҡ. Эксперттар аяттарҙы белеүгә генә түгел, уларҙы дөрөҫ уҡыуға ла иғтибар итәсәк. Еңеүселәргә ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ, улар араһында ноутбук, һанлы техника, спорт инвентары бар. Ойоштороусылар билдәләүенсә, конкурс 10 йыл буйына ойошторола һәм унда Башҡортостандан, Силәбе, Ырымбур, Свердловск өлкәләренән, Пермь крайынан, Татарстандан йөҙҙәрсә бала ҡатнаша.

*КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ*

# ҺАТЫУЛАША БЕЛӘҺЕҢМЕ?



**Күп кеше һатыулашырға яратмай. Уларҙың фекеренсә, был ваҡсыл кешеләрҙең ғәҙәте. Донъяның иң бай кешеләренең береһе Дональд Трамп үҙенең "Һәр тинде нисек тәләфләмәҫкә" тигән мәҡәләһендә был мәсьәләгә үҙенең фекерен белдерә.**

"Ниндәй тауар һатып алыуығыҙға ҡарамайынса, һатыулашырға, килешеүҙе үҙегеҙҙең файҙаға хәл итергә тырышырға кәрәк. Донъяның иң бай кешеләренең береһе булыуыма ҡарамаҫтан, мин һәр ваҡыт шулай эшләйем. Мин ҡиммәтле магазиндарҙа ла үҙемдә шулай тотам. Логика ябай: иң ҙур хаҡты түләгәнсе, һатыусының һеҙгә мөмкин тиклем ҙур ташлама яһауы яҡшыраҡ. Хаҡтар белешмәһендә күрһәтелгән һандарҙы яратмайым һәм башҡаларҙың унда күрһәтелгән сумманы кеҫәһенән сығарып түләүенә аптырайым. Мин магазинға инәм дә, 10 доллар торған әйбергә 2 доллар тәҡдим итәм. Бының һөҙөмтәһендә ҙур ташламалар алыу мөмкинлеген белһәләр, минең был ҡылығымдан бер кем дә көлмәҫ ине".

**Шулай итеп, һатыулашыу серҙәре:**

- Һатыулашыу ғәҙәтегеҙгә инһен - баҙарҙа, магазинда, ҙур автосалонда... Йөҙ осраҡтың береһендә мотлаҡ һеҙҙең теләгеҙ үтәләсәк.
- Тәүҙә һатыусыла ышаныс уятырға кәрәк. Уны үҙ эшенең оҫтаһы икәнен таныуығыҙҙы белдерегеҙ. Шунһыҙ, ташламаға өмөт итмәгеҙ.
- Алдан уҡ ауыр һөйләшеүгә әҙерләнегеҙ. Һәр ваҡыт кире яуап алыуға ла әҙер булығыҙ.
- Баҙарҙағы хәлде аңлауығыҙҙы әйтһәгеҙ, ташлама алыу мөмкинлеге лә арта. Ошондай уҡ тауар һатҡан магазиндарҙағы хаҡтарҙы белеү ҡамасауламай.
- Һатыусы хаҡты үҙегеҙ әйтеүҙе һораһа, хаҡтар белешмәһендәгенән күпкә кәмерәк сумманы әйтегеҙ.
- Һатыусы менән түгел, магазиндың хужаһы менән һөйләшеү яҡшыраҡ.
- Ныҡ ҡиммәтле әйбер алғанда бөләкәй генә етешһеҙлек табырға тырышығыҙ һәм етәксене саҡырығыҙ. Һеҙгә был осраҡта ташлама яһауҙары бар.
- Бер үк һатыусынан әйбер алаһығыҙ икән, уға ла берәй хеҙмәт күрһәтергә тырышығыҙ. Шул саҡта ташлама һорауы ла еңелерәк буласаҡ.
- Ташлама һорауығыҙ тураһында бер кемдең дә ишетмәүе яҡшыраҡ.
- Әгәр ҙә һеҙгә шарттар оҡшамай икән, кире боролоп сыға алаһығыҙ. Хатта күрше магазинда был тауарҙы ошо уҡ хаҡҡа һатып алағасығыҙҙы белһәгеҙ ҙә. Һеҙҙе хәтерҙәрендә ҡалдырасаҡтар, киләһе юлы, бәлки, ташлама ла яһарҙар.
- Исем өсөн генә һатыулашмағыҙ. Бигерәк тә бер нәмә лә һатып алырға йыйынмаһағыҙ.
- Һеҙгә ниндәй тауар кәрәклеген анығ белегеҙ! Һатыусының мактауына бирелеп, тауар алмағыҙ, был осраҡта ҡайтып, тауарҙың ыңғай һәм кире яҡтарын үлсәп ҡарағыҙ.
- Һатыусы һеҙҙең тәҡдимегеҙҙе ҡабул итергәме, юҡмы икәнен хәл итергә ваҡыт ҡалдырығыҙ. Бушҡа көйәләнмәгеҙ. Аҡса уларға кәрәк.
- Һатыусы һеҙҙең тәҡдимегеҙ менән килешмәһә, әйләп ҡына сыға башлағыҙ, йөҙөгөҙгә ризаһыҙлыҡ тойғолары сығарығыҙ. Тик һатыусы кире саҡыра икән, барығыҙ.
- Һатыулашығыҙ! Был файҙалы ғәҙәтте үҙләштерһәгеҙ, күпме аҡса яныҡҙа ҡаласаҡ икәнен күрерһегеҙ. Уңыштар!

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Сәстәргә шифа

❖ Ара-тирә бер нисә тамсы лимон һуты һәм бер ҡалаҡ араҡы өҫтәлгән йомортҡа менән йыуығыҙ.

❖ Буялған сәсте ҡояштан һаҡлағыҙ. 1 литр һыуға 3 ҡалаҡ аш һеркәһе ҡушып сәсте сайҡатығыҙ. Лимон һуты ла файҙалы.

### Ҡоро йүтәл

❖ 40 грамм ҡарабойҙай сәскәһен 1 литр ҡайнар һыуҙа төнәтеп әсегеҙ. Ҡарабойҙай сәскәһенән ҡайнатма ла эшләп алырға була, сәйгә ҡушып эсәһең.

### Һуған

❖ Һуғандың файҙаһын барыбыҙ ҙа беләбеҙ. Эс ҡатҡанда, йыуан эсәк ауыртҡанда 2-3 баш һуғанды ваҡлап, 2 стакан йылы һыуҙа 7-8 сәғәт тоторға. Ашар алдынан яртышар стакан эсергә.

❖ Яман шеш ауырыуынан яңы ғына һығып алынған һуған һутына 1:2 күләмдә бал ҡушырға һәм ашарҙан 20 минут алда көнөнә 3-4 мәртәбә 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Тик шулай ҙа яңы ғына өлгөргән һуғанды һәм унан яһалған төнәтмәләрҙе бөйөрә, бауыры, ашҡаҙан аҫты биҙе, ашҡаҙаны, эсәктәре ауыртҡан кешеләргә ҡулланырға ярамай.

### Һалҡындан баш ауыртһа...

❖ Тышы менән бергә ваҡланған лимон менән маңлайҙы, сикәләрҙе ышҡырға. Әгәр температура юғары булһа, лимонды бер аҙ йылытырға кәрәк.

### Сөгөлдөр

❖ Ангина яфалағанда ҡырылған бер сөгөлдөргә бер ҡалаҡ аш һеркәһе ҡушып болғарға, тонғандан һуң һутын һығып алырға. Шуның менән ауыҙҙы, тамаҡ төбөн сайҡатырға, аҙ генә йотоrға ла ярай. Был дауа хатта хроник ангинанан да ҡотҡара.

### Йүткереү

❖ Ҡапыл йүткереү башланһа, йомортҡа һарыһын шәкәр ҡомо менән ағартҡансы болғатырға. Шуны ас ҡарынға эсһән, йүткереү туҡтай.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *"Нимә менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, быға бөтөн күңелегеҙҙе һалығыҙ". Шулай түгел икән, эшкә тотоноп та тормағыҙ. Уңышҡа өлгәшеү өсөн бөтөн изге сифаттарығыҙҙы эшкә егергә кәрәк, шул саҡта үкенестәрһеҙ йәшәйәсәкһегеҙ.*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*

# МАЛ ТОТТОРОУ

Кешегә мал һатҡанда, биреүсе ул малды салғыйы менән тотлора. Алыусы ла салғый менән тота. Бер ҡул менән мал тотаһың, икенсеһе менән аҡса алаһың. Мал тотҡанда:

- Һин дә уң, мин дә уң,

Алдың, артың ҡот булһын, - тиһең. Алыусы шулай тип әйтә:

- Һин аҡсаның изгелеген күр,

Мин малдыҡын күрәйем.

Малды кешегә биргәнгә тиклем мал эйәһе мал ҡотон алып ҡала, йәғни түбәһенән генә бер өлтөк йөнөн ҡырҡып алып, урап, аҙбарға ҡыҫтырып ҡуя. Ҡыҫтырғанда:

- Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит,

Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит,

Ҡотоң ҡалһын, үҙең кит, - тип һамаҡлайҙар (мал ҡотон алғанды һатып алыусы күрмәскә тейеш).

Ат һатҡанда, хужа һатып алыусыға уны йүгәне менән тоттора, һыйыр һатҡанда, хужа уның ҡаймағын, һөтөн алыусыға ауыҙ иттерә. Һатып алыусы иһә һыйыр өҫтөнә таҫтамал, күлдәк кеүек нәмәләр һалырға тейеш. Улар һыйыр хужаһына бирелә. Һыйыр муйынындағы бауы менән бергә һатыла. Һыйыр һатҡанда, ҡул бирешмәскә. Юҡһа, мал уңмай. Ә өй һатҡанда, ҡул бирешеү - шарт.

Мал һатҡанда, ҡото китмәһен тип, аҙбарҙан уны арты менән сығаралар. Һатҡан кеше лә, алғаны ла таҫтамал бирешә. Малды йомарт кешенән алһаң - уңа, һарандан - туна. Алған мал унмаһа, элекке хужаһына барып, күренмәй генә, малының алдынан ашап торған ризығын алып ҡайтып, аҙбарына һалаһың.

Мал һатып алғанда:

- Алды ла уңһын,

Арты ла уңһын,

Изгелекле мал булһын! - тиҙәр.

# МАЛ ҠОТО

Бер-берәүҙең ҡулы ауыр булһа, уға һатҡан мал киңгәй, мандымай. Кешегә мал бирмәй, мал һатмай, алыштырмай тороп булмай. Мал ҡотон, киткәне менән ҡото ла китмәһен, ҡурала мал өҙөлмәһен, тип кенә алырға кәрәк.

- Ҡотоңдо алам - тип өс тапҡыр һырт буйынан, мөгөҙ төбөнән берәр семтем йөнөн йолҡоп алаһың да ҡура егенә ҡыҫтырып ҡуяһың.

Кеше ҡулынан мал алғас, артҡа ҡарарға ярамай. Алған малың үрсемһеҙ, ҡотһоҙ була.

Бер һунарсының бик шәп эте булған. Муйынында ебәк бау, ҡолаҡтары тороҡ, күҙҙәре үткер, үҙе алғыр булған. Шуны бер ҡарт һорай, ти:

- Миңә бир этеңде. Мин һинә һайламһайлам йылҡы малы сығарып бирәм. Өйәр башының теҙгенен тотторормон. Һин артыңа әйләнеп ҡарама, кит тә кит. Тәкәт итмәҫһең, барыбер ҡарамаҫһың, - ти.

Һунарсы этен бирә тегегә. Бабай быға теҙген тоттора. Китә һунарсы. Артынан ер йөҙөн ябып өйөр-өйөр йылҡы килә, ти, йылҡылдашып, быны тапарҙай булып ажарланып, һунарсы тәкәт итә алмай, борола ла ҡарай. Күлдән сығып килгәне кире һыу төбөнә китә, ярға сыҡҡаны быға ҡала.

Шуға ла өлкәндәр:

- Мал алһағыҙ, артығыҙға ҡарамағыҙ, ти торғайны.

"Башҡорт халыҡ ижады"нан.

*АЙЫҒАЙЫҠ, ЙӘМҒӘТ!*

# БАЛАНЫҢ КҮҢЕЛЕН МАТУРЛАҺАҠ...

## унын ҡылыҡтары ла матур була



**Эскән кеше менән идара итеүе еңелдер шул. Шуға ла уны, батшалар уйлап тапҡан афәт, тип дөрөҫ әйтәләр инде. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, Рус дәүләтенә нигеҙ һалған кенәҙдәр походтар алдынан да, походтан ҡайтҡас та, үҙенең дружинаһы менән бергәләп, эске мәжлестәре ойошторған. Фарсы дәүләтенә нигеҙ һалыусы Кир тигән батша ла шулай эшләгән. Совет осоронда беҙҙә лә ауылдағы һәр сәсеүҙән, урып йыйыу эштәренән һуң механизаторҙарҙы араҡы менән һыйлау гәҙәткә инеп киткәйне. Ир-егеттәребеҙ шунан һуң ныҡлап эсергә өйрәнде лә инде...**

Хәҙер беҙ, халҡыбыҙҙың хәмер арҡаһында ниндәй хәлгә төшөүен күргән кешеләр, эскелектең ҡот осҡос яуызлыҡ икәнен ныҡлап аңланыҡ. Әммә, ниндәйҙер осраҡҡа, тип, "йәшел йылан" һалынған шешәләрҙе йорттарыбыҙҙа тотабыҙ әле. Ошо гәҙәтебеҙҙән арынһаҡ, йәғни анды томалаусы эсемлектәрҙән баш тартыуҙы һәр беребеҙ үҙенән башлаһа, был харамды йортона индермәһә, хәмер һатып, аҡса эшләү ҙә бөтәр ине. Уйлап ҡараһаң, хәмер һатып, аҡса эшләп тә, шул аҡсанан файҙа күргән бер кеше лә юҡ әле. Ундайҙарҙың йортона бер-бер артлы бәләләре килеп тороуына ла шаһитбыҙ бит. Әммә тыйылмай ҡайны берәүҙәр.

Эскән кеше башта: "Мин сама менән генә эсәм, байрамдарҙа, туйҙарҙа ғына, әммә артығын ҡулланмайым", - ти ҙә бит. Ләкин хәмерҙе бер йотҡас, уның һәр молекулаһы беҙҙең эстә үҙенең емергес эшен башлай. Артабан беҙҙең бар булмышты шайтан биләй. Ул беҙгә аҫтыртын йылмайып: "Һин кемдән кәм, әйҙә, күңел ас, һин бер ҡапҡандан ни була!" - ти. Шулай итеп, көндәр, айҙар, йылдар һиҙҙермәй үтә һәм беҙ үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән, хәмер ҡоллоғона эләгәбеҙ...

Шуға ла әсәйҙәргә, ҡатын-ҡыҙҙарға минең кәңәш: байрамдарҙа өҫтәлгә хәмер ултыртмайыҡ! Күмәкләшеп йыйылғанда барыбер һөйләшергә һүҙ күп була, йырлап та алаһың, бейеп тә китәһең. Ошондай матур айыҡ табындарҙы күреп үҫкән беҙҙең балалар ҙа аҙаҡ хәмерҙе ризыҡҡа һанамаҫ. Юҡһа, хәҙерге балалар: "Ҙурайғас та, ололар кеүек, араҡы эсеп күңел асам", - тип үҫә бит. Хәмерҙең файҙалы ризыҡ түгеллеген балаға әсә һөтө менән индерәйек!

Ижад кешеләренә - яҙыусыларға, кино төшөрөүселәргә лә кәңәшем бар. Беҙҙең әҙәби әҫәрҙәрҙә, спектаклдәрҙә, киноларыбыҙҙа тәртипһеҙ, тыңлауһыҙ Маша, Сашаларҙы түгел, йәки әҙерҙе ашап, күңелдәре нимә теләй, шуны эшләгән олигарх балаларын да түгел, ә ата-әсәһен тыңлап, тәртипкә өйрәнгән, үҙенә кәрәк булған бөтә һөнәрҙәргә эйә булған, үҙен һәм башҡаларҙы ихтирам иткән, кәрәкле эштәрҙе эшләгән, матур йәшәү рәүеше алып барып, бәхеткә өлгәшкән Гөлбикә, Азаматтарҙы һүрәтләү кәрәк. Хәмерҙең зыяны, уның хәрәм ризыҡ икәне тураһындағы йәнһүрәттәр ҡараған бала эскән кешегә ҡул бирмәҫ, ә хәмер һатыусыға кеше үлтереүсе тип ҡарар ине. Ошондай матур кинолар, йәнһүрәттәр, спектаклдәр, китаптар менән аралашыу һөҙөмтәһендә бала сабый сағынан уҡ айыҡ йәшәү рәүешен ҡәтғи һайлар ине. Баланың күңелен матурлаһаҡ ҡына, уның ҡылыҡтары ла, өҫ-башы ла матур була. Сөнки һәр әйберҙең эске төҙөлөшө, уның йөкмәткеһе әйберҙең формаһын билдәләгәненән онотмайыҡ.

Дилбәр ҒИЛМАНОВА.
Бөрйән районы.

*ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА*

# КОНФУЦИЙҘАН ТУҒЫҘ ҺАБАҠ



**Бер ҡасан да туктамағыҙ.**

"Бөтөнләй туктағанға тиклем һеҙҙең нисек яй барыуығыҙ мөһим түгел". Әгәр ҙә дөрөҫ юлдан барыуығыҙҙы дауам итһәгеҙ, ҡасан да булһа үҙегеҙҙең маҡсатығыҙға өлгәшәсәкһегеҙ. Ауыр хеҙмәт эҙмә-эҙлекле башҡарылырға тейеш. Уңышҡа өлгәшеүсе кеше аҙағынаса үҙенең идеяларына тоғро ҡала һәм бер нәмәгә лә ҡарамайынса маҡсатына табан бара.

**Дуҫ тип иҫәпләгән кешеләргә иғтибарлап ҡарағыҙ.**

"Бер ҡасан да үҙегеҙҙән яҡшыраҡ булмаған кеше менән дуҫлашмағыҙ". Дуҫтарығыҙ - һеҙҙең киләсәгегеҙҙең сағылышы. Һеҙ әле улар булған кимәлгә етәсәкһегеҙ. Һеҙҙең ҡараштарҙы уртаҡлашҡан, бер маҡсатҡа барған дуҫтар табыу ҙур бәхет. Шуға ла йөрәктәрендә ут янған кешеләр менән уратығыҙ үҙегеҙҙе!

**Бөтөн яҡшы нәмә өсөн тулырға кәрәк.**

"Нәфрәтләнеү еңел, яратыуы ауыр. Был тормоштағы күп нәмәләр ошоға нигеҙләнгән. Яҡшы нәмәгә өлгәшеүе ауыр, насарын алыуы еңелерәк". Был күп нәмәне аңларға ярҙам итә. Кешегә асыуланыуы, үҙенде аҡларға тырышыу ғына еңел. Яратыу, ғәфү итә белеү һәм миһырбанлылыҡ оло йөрәк, аҡыл ҡеүәһе, ҙур тырышлыҡ талап итә.

**Башта үҙегеҙгә кәрәкле ҡорамалдар әҙерләп алығыҙ.**

"Тормошта нимәгәләр өлгәшеү өсөн тырышлыҡ, ихласлыҡ кәрәк. Үҙенең эшен камиллаштырырға теләгән механик башта ҡорамалдар әҙерләргә тейеш". "Уңыш алдан әҙерлек талап итә, юғиһә, уңышһыҙлыҡ булыуын көт тә тор", - тигән Конфуций. Был тормошта нимә менән генә шөғөлләнһәгеҙ ҙә, алдан әҙерлек кәрәк.

**Яңылышыуҙа бер насарлыҡ та юҡ.**

Яңылышһағыҙ, бер туҡтауһыҙ был турала иҫкә төшөрөп тороу кәрәкмәй. Ваҡ нәмәләр өсөн көймәгеҙ. Хаталаныу - ҙур енәйәт түгел. Хаталар көнөгөҙҙө ҡара төнгә әүерелдермәһен. Хаталарығыҙҙы ла байрамға әйләндереп өйрәнегеҙ.

**Эҙемтәгә иғтибар итегеҙ.**

"Ныҡ асыулы сағыңда быныҡ ниндәй эҙемтәгә килтереүе тураһында уйла". "Сабыр кеше ҡыйыуҙан, үҙен ҡулда тота белгән кеше ҡалалар яулап йөрөүсенән яҡшыраҡ", тигән Соломон. Тойғоларға ирек бирмәгеҙ, гел үҙегеҙҙе ҡулда тотоғоҙ, уның эҙемтәһе тураһында алдан уйлағыҙ.

**Төҙәтеүҙәр индерегеҙ.**

"Әгәр ҙә маҡсатҡа өлгәшеү мөмкин түгеллеген күрәһегеҙ икән, уға төҙәтеүҙәр индерегеҙ". Әгәр ҙә быйыл маҡсатығыҙға ирешә алмауығыҙҙы күрһәгеҙ, уны тормошҡа ашырыу йәһәтенән уйҙарығыҙҙы үҙгәртеүҙе насар тип иҫәпләмәгеҙ. Уңышһыҙлыҡ - ул үҙе бер вариант, уныш елкәндәрен көйләп, артабан алға китегеҙ.

**Һәр бер кешенән нимәгәләр өйрәнеп була.**

"Әгәр мин ике кеше менән китеп барам икән, уларҙың һәр береһе миңә уҡытыусы. Мин уларҙың береһенең яҡшы һыҙаттарын үҙемә алаҫаҡмын, икенсеһенең кире яҡтарын үҙемдә төҙәтәсәкмен". Ул кеше изгеме, әлләә, киреһенсә, енәйәтсеме, һин унан ниндәйҙер һабаҡтар алаҫаҡһың. Һәр аҙымыш - һабаҡтар менән тулы тарих.

**Яҡшы итеп эшлә, йәки бөтөнләй тотонма.**

"Нимә менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә, быға бөтөн күңелегеҙҙе һалығыҙ". Шулай түгел икән, эшкә тотоноп та тормағыҙ. Уңышҡа өлгәшеү өсөн үҙегеҙҙә булған бөтөн изге сифаттарығыҙҙы эшкә егергә кәрәк, шул саҡта үкенестәрһеҙ йәшәйәсәкһегеҙ.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Гәзит уҡыусылар иғтибарына Санкт-Петербург архивында һаҡланған "Национальный вопрос во внутренней политике царизма. Конец 19-го начало 20 вв" тип аталған материалдар йыйынтығындағы башҡорттарға ҡағылған мәғлүмәттәрҙе тәҡдим итәбеҙ.**

# БАШҠОРТТАРҘА ЕР БИЛӘҮСЕЛЕК



***179. Ырымбур губернаһы присутствиеһының непременный ағзаһы М. М. Эверсмандың докладынан (1902 йыл).***

Губернаның 4 миллион десәтинә биләгән һәм 250 меңдән ашыуыраҡ кеше йәшәгән 28 башҡорт улысында Халыҡ мәғарифы министрлығының барлығы 16 урыҫ-башҡорт мәктәбе бар. Уларҙың береһе - ике класлы, ҡалғандары - бер класлы. Уларҙа 460 кеше уҡый. Ҡалғандары мәктәптәрҙә һәм мәҙрәсәләрҙә уҡый, ә уларының һаны хәҙер 151-гә етте.

***197-199. Өфө губернаторының эске эштәр министрына яҙған хатынан (1902 йыл).***

Губерналарҙа бик күп дворяндар ауылдарҙа йәшәй һәм крәҫтиәндәр кеүек, ер менән файҙалана. Фәҡәт дворяндар ғына йәшәгән ауылдар ҙа бар, әммә уларҙың дворянлыҡтары иҫбат ителмәгән. Дворяндарҙың ауыл йәмғиәттәрен ойоштороу тураһында мәсьәлә лә күтәрелә, сөнки улар ҡәҙимге дворян ойошмаһына инмәй, ер менән файҙаланыу күсеп килгән башҡорт припущенниктары хоҡуғында ғына, үҙҙәре урындағы ауыл властарының талабына буйһонмай һәм натуралата йөкләмәләрен үтәмәй.

***251-252. Эске эштәр министры өсөн А. С. Стишинский Өфө губернаторына яҙа (1903 йыл).***

Иң юғарынан төшкән бойороҡ буйынса, Себер юлы эргәһендәге Әҙерлек комиссияһы Европа Рәсәйе сиктәрендә аҙ ер биләгән крәҫтиәндәрҙе күсереү тураһындағы мәсьәләне ҡараны. Комиссия башҡорт ерҙәрен күҙ уңында тотто, сөнки башҡорт ерҙәрен межаларға тулыһынса бүлгеләп алғандан һуң, байтаҡ ерҙәр артып ҡала һәм унда башҡа яҡтарҙан кешеләрҙе урынлаштырып була, тип иҫәпләнеләр. Тәбиғи шарттары буйынса башҡорт ерҙәре беренсе булып күсенеүсе дала яғы кешеләре өсөн уңайлы буласаҡ. Күсеп килеүселәр һаны ишәйә барыу менән ергә хаҡ та күтәреләсәк, шуның өсөн был мәсьәләне хөкүмәт ҡарамағына ҡалдырып, ерҙең баһаһын ул билдәләйәсәк. Иң уңайлы юлы - Крәҫтиән банкының үҙ иҫәбенә ерҙәрҙе һатып алыуы булыр. Әлегә банк был эште бик аҡрын башҡара, ер һатып алыу буйынса алып барылған 7 йыл эсендә Өфө һәм Ырымбур губерналарынан бары тик 175 мең дисәтинә генә ер алған, ә фәҡәт башҡорт ерҙәре генә лә бик күп алына. Сәбәп шунда: ауылдарҙа ерҙәрҙе межаларға бүлеүҙең тамамланыуы тураһында банкка хәбәр ителмәй һәм шуға ла башҡорттар ерҙәрен үҙҙәре һата. Межаларға бүлеүҙе тамамлау тураһында Крәҫтиән банкына һәм Күсереп ултыртыу идаралығына хәбәр итеү үтенелә.

Межаларға бүлеү, ғөмүмән, бик аҡрын бара: Өфө, Ырымбур, Пермь губерналарында 1898 йылдан 1902 йылға тиклем башҡорт ерҙәренең 10,48 миллион дисәтинәһенән 327 мең дисәтинәһенә генә документ төҙөлгән. Көньяҡ-көнсығыш губерналарының ерҙәрен мохтаж булғандарға бүлеү тиған яңы ҡарарҙан сығып эш иткәндә, был эш бик һүлпән бара.

***268-362. Эске эштәр министрлығының Дәүләт советына "Крәҫтиәндәр тураһындағы дөйөм ҡарарҙың башҡорттарға ҡағылышы буйынса тәҡдиме". 31. 10. 1903 йыл (Министр өсөн П. Дурнов ҡул ҡуйған).***

Башҡорт риүәйәттәрендә уларҙың (башҡорттарҙың - **Ред.**) иң тәүге тыуған илдәре тураһында мәғлүмәт юҡ. Уларҙың Урал алды территорияһында йәшәүе VIII-X быуаттарҙа теркәлгән. Ҡазан батшалығы ҡолатылғандан һуң, 1556 йылда үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылалар һәм үҙҙәре биләгән ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғы алалар. 1579 йылда Башҡортостан уртаһында Өфө ҡалаһы һалына һәм был төбәктә айырым кешеләр тарафынан да, хеҙмәткәрҙәр яғынан да колонизациялау башлана, ул кешеләр артабан припущенник (башҡортса әйткәндә, әтәмбай, ерһеҙ - **Ред.**) тип атала башлайҙар. Ҡазан батшалығынан Башҡортостанға мишәрҙәр, татарҙар, сирмештәр, сыуаштар ҡаса, ә Рәсәйҙән хәрбиҙәр - стрелецтар, баяр балалары һәм башҡалар күсенә. Күсенеп килеүселәр, башҡорттарҙың тәжрибәһеҙлегенән файҙаланып, ерҙе һатып йәки ҡуртымға алыу тураһындағы килешеүҙе үҙ файҙаларына төҙөй, йәки бөтөнләй төҙөмәй. Завод төҙөүселәр үҙҙәрен айырыуса йыртҡыстарса тота, башҡорттарҙы тотош ғаиләләре менән юҡ итә.

Был хәлдәргә сик ҡуйыу өсөн хөкүмәт XVII быуатта уҡ башҡорттарға үҙ ерҙәрен һатыу хоҡуғын сикләй башлай, ә 1649 йылда һатыу йәки ҡуртымға биреү бөтөнләй тыйыла. Әммә башҡорттар баш күтәрә һәм мосолман руханиҙары башлаған ризаһыҙлыҡ күтәрелештәре ике быуат буйы дауам итә. Ихтилалдарҙы баҫтырыу барышында башҡорттарҙың күп өлөшө һәләк була, хужалыҡ итә белмәү арҡаһында ер юҡҡа сыға, шунлыҡтан, хөкүмәт уларҙың ерҙәрен тартып ала. 1735 йылда тағы күтәрелеш була.

1736 йылдың 11 феврале указы менән баш күтәреүсе башҡорттарҙың ерҙәре тартып алына һәм башҡорт фетнәләрен баҫтырыуҙа ярҙам иткән мишәрҙәргә ғүмерлеккә һалымһыҙ файҙаланыу өсөн бүлеп бирелә. Башҡа күскенселәр (типтәрҙәр, сыуаштар, сирмештәр, татарҙар) башҡорттар файҙаһына һалымдан азат ителә. Бер үк ваҡытта офицерҙарға, дворяндарға һәм мишәрҙәргә ер һатыу рөхсәт ителә. 1739 йылдың 20 августында ер мәсьәләһендә бәхәстәр килеп сыҡмаһын өсөн айырым ауыл булып ултырырға ҡушыла. Фетнәлә ҡатнашмаған башҡорттарға 1742 йылда ер биләү хоҡуғы кире ҡайтарыла, ә 1755 йылдың 1 сентябрендә фетнәлә ҡатнашып та үҙ ерҙәренә кире ҡайтҡан башҡорттар ғәфү ителә һәм элек биләгән ерҙәре кире ҡайтарыла.

Был хәлдәр ер биләүселек эшендә буталсыҡлыҡ барлыҡҡа килтерә һәм был эште яйға һалыу өсөн 1761 йылдың 15 марты указы менән шулай билдәләнә: башҡорт ерҙәрен һатыу өсөн аҫаба башҡорттарҙың ризалығы кәрәк, ә башҡорт ерҙәренә күсенеп ултырыу тейешле указ булмаһа, тыйыла...

1798 йылда Ырымбур крайы ерҙәренә генераль межа үткәреү башлана. Башҡорттар иррегуляр ғәскәрҙәргә алына, улар ил сиктәрен ҡырғыҙҙарҙан һаҡларға тейеш була, башҡорт ерҙәре кантонлыҡтарға - (тәүҙә - 12, аҙаҡ - 28) бүленә, уларға башҡорттарҙың үҙҙәренең араһынан начальниктар етәкселек итә, уларға полицейский хоҡуғы бирелә һәм улар көнкүрештең бөтөн өлкәләренә лә ҡыҫылыу хоҡуғы ала. Ҡайһы ваҡытта улар халыҡтың ихтыяжына ҡаршы булған эштәр ҙә эшләй, шунлыҡтан, халыҡтың иҡтисади хәле насарая.

1818 йылдан башлап 1823 йылға саҡлы башҡорт ерҙәрен һатыу тағы тыйыла. 1823 йылда Ырымбур губернаһында генераль межа үткәреү тамамлана, башҡорт ерҙәре тураһында эш Башҡорт ерҙәре буйынса комитетҡа тапшырыла. Комитет башҡорттарҙың ер биләү хоҡуғын таный, әммә 1736 йылдың 11 февралендәге хөкүмәт указы үҙ көсөндә ҡала, хөкүмәт ерҙе кире тартып алырға хоҡуҡлы, фәҡәт "мәрхәмәтлек күрһәтеп кенә" ул хоҡуҡ менән файҙаланмай, тип иҫкәртеп ҡуя.

**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Иван ЛЕПЕХИН

# XVIII БЫУАТҠА СӘЙӘХӘТ

...Ырымбур Уралы үҙәгендә беҙгә йәй уртаһында булырға тура килде, был башҡорттарҙың барса байлыҡтары арта барған саҡ була. Беҙҙең ябайыраҡ кешеләр араһында ҙурлап ҡунаҡ булышыу йыш ҡына, улар әйткәнсә, хаҡтар арзанайған саҡҡа ҡалдырылған кеүек, башҡорттар ҙа оло мәжлестәрҙе үҙҙәренең ҡымыҙға иң бай булған сағында йыя. Туй йолаһын атҡарғанда ҡорған мәжлестәре иң ололарынан һанала. Татарҙар менән бер диндә булғанлыҡтан, туй йолалары бар яҡтан да тиерлек уларҙыҡына оҡшаш була һәм ошолай башҡарыла.

Тәүҙә улар сит кешеләр аша ҡоҙалаша; ике яҡтың да аталары ризалашҡан хәлдә, балаларының, бигерәк тә ҡатынҡыҙ затының ихтыярын белеү мотлаҡ, тип һанала: шуға күрә кәләштең атаһы күп сит кешеләр алдында үҙенең ҡыҙына кейәүҙең уға оҡшау-оҡшамауы кеүегерәк һорау бирә. Риза булыу йөйһә кире яуап барыһын да хәл итә. Шунан һуң ҡалым тураһында килешеүгә күсәләр, уның күләме 200 һумға тиклем барып етә, кәләштең атаһы шул аҡсаға ҡыҙына кәрәк булған барса кейем-һалымды һатып ала.

Башҡорттарҙың кейеме татарҙарҙыҡынан айырылып тора. Байрам көндәрендә улар төрлө төҫтәге һәм сифаттағы, халатҡа оҡшатып тегелгән, типкән тип аталған буҫтау кафтан кейә, ул ситтәренән ике рәт сәйлән менән ҡаймалап алынған, ҡай сағында алғы яҡтан элмәктәре лә сәйлән ҡушып тегелгән була. Был уларҙың бар өҫкө һәм эске кейемдәрен тәшкил итә; татар ҡатындарының бишмәте кеүек эстән кейелә торған кейемдәре һирәк осрай. Туранан-тура тәндәре өҫтөнә кейгәндәре бер оҙон һәм ҡалын күлдәктән ғибәрәт. Баш кейемдәре, татар ҡатын-ҡыҙҙарыныҡы кеүек, ҡашмау тип атала (Лепехин "кашпау", тип яҙа. - **Ред. иҫк.**); айырма бары ҡашмау өҫтөнән кейелеп, алып-һалынып тороусы конус формаһындағы өҫлөктән хасил була. Ҡашмауҙан артҡа табан көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән ҡалаҡбаш төшөрөлә, ул Нуғай юлында йәшәүсе башҡорт ҡатынҡыҙҙарында бар яҡлап та татар ҡыҙ-ҡатындарыныҡына оҡшаш; Себер юлы буйлап күсеп йөрөгәндәренеке бер аҙ айырыла. Уларҙа ҡашмауҙың арт яғындағы ҡалаҡбаштан - ҡашмау ҡойроҡтан (кашпау кайрюк) башҡа, бөтә арҡа буйына төшөп тороусы, шулай уҡ көмөш тәңкә һәм сәйлән менән биҙәлгән, бәйләүес бауҙары күп булған, әмйән (амьян) тип аталған киң ҡалаҡбаштары була. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ла, ирҙәре лә бер ҡасан да сабата киймәй; Өфө әйәҙендә үҙ күндәренән тегелгән ситек, ә Исәт провинцияһында башы ғына күн, ҡалған яғы буҫтауҙан тегелгән бахила кейәләр.

**(Дауамы бар).**

*✓ Башҡаларҙың балалары кеүек арыған, ҡурҡҡан саҡтарында ташламалар биргем, йәлләгем килде. Тик барыбер тороп йүгерергә, ҡолайҙар икән, киренән аяғүрә баҫырға, ҡурҡҡан нәмәгә тура ҡарарға өйрәттем.*



(Башы 1-се биттә).

**▸ Егеттәр, ни өсөн тап ошо спорт төрөн һайланығыҙ? Ярай, "фехтование" тигәнен беләбеҙ, ә "рапира" тигәндең мәғәнәһен өйрәнеп алырға тура килде, был бит беҙҙең халыҡ өсөн ят шөғөл. Кем ылыҡтырҙы һеҙҙе был спортҡа?**

**Асҡар:** Рапира - ул фехтованиеның ҡорал төрө, мәсәлән, унда ҡылыс, шпага һәм рапира менән алышалар. Беҙ тап ана шул рапира менән ҡоралланыусылар булып сығабыҙ. Эйе, фехтование беҙҙең халыҡҡа хас спорт түгел, француз аристократтарының һуғыш сәнғәте. Әммә шул уҡ ваҡытта боронғо башҡорттарҙа ҡылыс һуғышы сәнғәтенең киң таралған булыуын да онотмайыҡ. Талап ителгән көс, таҫыл, аҡыл һәм етеҙлек был спорт төрөнә лә хөрмәт уятмай ҡалмайҙыр.

**Эрик:** Әсәйебеҙ әхирәтенең кәңәше менән беҙҙе 8 йәштә спорт мәктәбенең фехтование класына алып барҙы. Үҙҙәре эштә саҡта урамда бушты-бушҡа ауҙарып йөрөмәһендәр тигән араһында ла, спортсылар араһында ла бер башҡа үҫеп киткәндәй булдыҡ. Шул ваҡыттан инебеҙгә оло яуаплылыҡ ятҡанын да тойҙоҡ.

**▸ Был һорауҙы мин атай кешегә төбәйем: ошондай шәп спортсыларҙы тәрбиәләүҙең серҙәре бармы? Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн спортта беҙҙең башҡорт исемдәре һирәк яңғырай?**

**Хәлил Хәмзин:** Спортсыны һәр ғаилә үҫтерә, тәрбиәләй ала. Бары тик ныҡышмалылыҡ, талапсанлыҡ һәм сәләмәт балалар булыуы ғына бурыс. Профессиональ спортҡа ынтылыш - ул ҡаты, хатта бер аҙ яҡшы мәғәнәләге ҡанһыҙлыҡ, тип тә әйтергә була. Мин малайҙарымдың әле бәләкәй саҡтарында битлек аҫтында һыҡылып илап йөрөгәндәрен дә белә инем. Әммә бәләкәй генә саҡтарынан уҡ уларҙы күҙ йәше күрһәтеүҙән тыя килдем. Башҡаларҙың балалары кеүек, уларҙы ла төшәксә йөкләткм, арыған, ҡурҡҡан саҡтарында ташламалар биргем, йәлләгем килде. Тик тәртипкә күндерергә, ҡайҙалыр урынлаштырырға тырыша башлайбыҙ. Ә бит баланы әле бармаҡ башындай сағында уҡ әүәләргә кәрәк. Һин бит атай-әсәй, уның киләсәге, кем булыры һинең яуаплылыҡта. Спортсы итергә теләйһең икән, баланан алда үҙең ныҡышмал бул, уның рухын нығыт, дәртләндер, талап ит, алдына ҙур маҡсаттар ҡуй. Һәр хәлдә, миңә таныш тәрбиә алым-ысулдары ошолар.

**▸ Атайығыҙ әйткәндәр тураһында үҙегеҙ ни әйтерһегеҙ, егеттәр? Спортсы яһайым тип, һеҙҙең бала сағығыҙҙы "урламанылармы" икән?**

**Асҡар:** Беҙ бәләкәй саҡта үтә тиктормаҫ балалар булғанбыҙ. Етмәһә, икәүбеҙ. Бик ныҡ тәртипһеҙләнеп китһәк, ҡайыш атайҙан түгел, әсәйҙән эләгә торғайны. Атай ҡайыш тотманы, әммә ул асыуланһа, уның күҙ ҡарашы алдында әсәйҙең ҡайышы бүстәк кенә кеүек тойола ине. Беҙҙе спортҡа әүрәтеп, атай-әсәй барыбер ҙә дөрөҫ эшләгән, аҙмы тиҫтерҙәребеҙ маҡсаттан булғандыр инде был. Ата-әсәйебеҙ сәнғәт кешеләре булғанлыҡтан, бәләкәйҙән йыр һәм музыка тауышынан беҙ, нисектер, ялҡып киткәйнек. Шунлыҡтан, ҡылыс алышыу беҙҙең өсөн бөтөнләй икенсе донъя булып тойолдо һәм беҙ тиҙ генә ошо спортҡа әүрәнек тә киттек.

**Эрик:** Игеҙәк булһаҡ та, атай-әсәй беҙҙе ағалы-ҡустылы итеп үҫтерҙе. Мин Асҡарҙан бер нисә минутҡа ғына бәләкәй. Бала саҡта әсәй: "Һин - ағай, һин - ҡусты", - тигәндә һеңдергән, шунлыҡтан мин уға (Асҡарға инде) ағайыраҡ итеп ҡарайым. Ул үҙе лә һәр ҡайҙа миңе ҡурсаларға, яҡлашырға ғына тора. Бер-беребеҙҙән алыҫ булғанда беребеҙгә ҡыйын булһа, икенсебеҙ тоя, ауырыһаҡ йә бошонһаҡ та шунда уҡ күңелгә килә.

**Асҡар:** Бәләкәйҙән икебеҙ араһында ярышыу, сәмләнеү көслө булды. Бөтә нәмәлә лә уҙышмаҡта булдыҡ. Тренировкаларҙа үҙ-ара алышҡаныбыҙ етмәй, ҡайтырға сыҡҡас та, икебеҙ ике юлдан "кем алдараҡ" тип сабышып ҡайта торғайныҡ. Спорт ярышында бер-беребеҙгә ҡара-ҡаршы сығырға тура килһә лә, кәрәк саҡта беҙ берләшә беләбеҙ, беҙ бергә булғанда ҙур көс икәнебеҙҙе аңлағанбыҙ инде.

**Хәлил Хәмзин:** Тренерҙар "Иң ҡаты алыш ике Хәмзин араһында" тиһә лә, малайҙар араһында, Аллаға шөкөр, дошманлыҡ хистәре тойолғаны юҡ. Бер ниндәй дан-шөһрәт тә туғанлыҡтан өҫтөн була алмағанын күңелдәренә һеңдергәнмен, тип уйлайым. Ә шулай ҙа алышта бер-береһенә ташлама яһамайҙар. Бындай осраҡтарҙа мин уларҙың күҙ алдында булмаҫҡа тырышам, ситкә китәм. Ҡалайтаһың: еңгәнә лә, еңелгәнә лә үҙемдең бауыр. Тик спорт йомшаҡлыҡты һанламай.

**Асҡар:** Башта командалағы татар милләтле спортсыларға ҡушып, беҙҙе лә улар иҫәбенә индермәкселәр ине, беҙ шунда уҡ үҙебеҙҙең башҡорт милләтенән, Салауат тоҡомонан икәнебеҙҙе аңлаттыҡ. Мәсәлән, итальян тренерыбыҙ, "тартар"-ҙан (татарҙы шулай тип әйтә) нимә менән айырылаһығыҙ, тип һораны бер саҡ. Үҙебеҙҙең боронғо тарихлы, ҡурайлы, эпослы аҫаба халыҡ икәнебеҙҙе төшөндөрөргә тура килде. Үҙе лә аҙаҡтан характер һыҙаттарындағы айырманы аңғарыуын белдерҙе.

**Эрик:** Бер чемпионатта, сит илдә, башҡорт икәнлегемде айырып күрһәткем килде һәм халыҡ алдына кәрәҙ, С. Юлаевтың һәйкәле төшкән өҫ кейеме кейеп сыҡтым. Киләсәктә аренаға башҡорт көйөн яңғыратып, милли еләндә, ҡамсат бүректә сығырға хыялланам.

**Асҡар:** Ҙур спортта башҡорт милләтен дә таныһындар өсөн Башҡорт спорт үҙәге булдырырға, унда балаларҙың шәжәрәһен тикшереп кенә ҡабул итергә кәрәк. Был беҙҙең саф милли һыҙаттарыбыҙ һаҡланһын өсөн мөһим. Сөнки мин милли һыҙаттарыбыҙҙың ни хәтлем көслө икәнен, уларҙың спортта ла оло уңыштар, еңеүҙәр яуларға булышлыҡ итә алыуын белем. Башҡортҡа бокс, көрәш кеүек бер аҙ тупаҫыраҡ көс, таҫыллыҡ, ҡатылыҡ талап иткән спорт төрҙәре яҡыныраҡ. Башҡортта яугир рухы, русса әйткәндә, "дух воина" көслө, шуға ла ул алыштарҙа үҙ-үҙен аямай ташланған арыҫлан хәленә инә ала. Ә күп милләттәргә был хас түгел, ҡайһы берәүҙәргә "үҙ йәнен аяу" өҫтөнөрәк ҡуйыла. Башҡорт спорты фехтование ла, шахмат та түгел. Әлбиттә, уларға ла урын бирергә кәрәк, әммә милли потенциалды файҙаланып, уға хас спорт төрҙәрен, йәғни боксты, көрәште үҫтерергә кәрәк. Тау халҡы бокста ниндәй ҙур ҡаҙаныштарға өлгәшһә, беҙҙең мөмкинлектәр ҙә уларҙыҡынан бер ҙә кәм түгел.

# СПОРТСЫНЫ ҺӘР ҒАИЛӘ

## әммә балаңдан алда үҙең ныҡышмал бул, уның рухын нығыт, дәртләндер,

**▸ Ҡасандан алып һеҙ тиҫтерҙәрегеҙ араһында айырыла башланығыҙ? Тәүге уңыштарҙан, тәүге еңеүҙәрҙән һуңмы? Нисә йәштә тренерҙарҙың һеҙгә өмөт бағлауын тойҙоғоҙ?**

**Асҡар:** 17-18 йәштәрҙә һынылыш осоро булды. Беренсе еңеү ҙә шул 18-19 йәштәргә тура килә. Был уңыштарыбыҙ, беҙгә бирелгән мөмкинлектәр өсөн төрлө йылдарҙағы тренерҙарыбыҙ Рәшит Әйүпов, Лира Грушинина, Руслан Насибуллин, Ольга Шабаеваларға рәхмәтлебеҙ.

**Эрик:** Израилдың Иерусалим ҡалаһында Европа беренселегендә - 3-сө, Францияла Донъя кубогы этабында 1-се урындарға сығыу беҙҙең тәүге уңышлы һөҙөмтәләребеҙ булды. Ул саҡтағы кисерештәрҙе бөгөн һүҙ менән генә аңлатып булмайҙыр. Беҙ үҙебеҙҙең тиҫтерҙәр

барыбер тороп йүгерергә, ҡолайҙар икән, киренән аяғүрә баҫырға, ҡурҡҡан нәмәгә тура ҡарарға өйрәттем. Ысын ир булып үҫһендәр, тип, бына шулай бәләкәй генә саҡтарынан ныҡлы талап ҡуйҙым, унан һуң ошо тәртипкә үҙҙәре лә әйләнде. Балаларҙың бер ярышын да ҡалдырмайым. Мин генә түгел, уларҙың алыштарын бөтөн затырыу күҙәтә, ваҡытында 90 йәшлек олаталары ла районда килеп етә торғайны.

Беҙҙең халыҡта балаларға иғтибар етешмәй. Беҙ нишләптер баланы үҫеп еткәс кенә күҙгә эләбеҙ, шул ваҡытта ғына уны сатҡа илтер, киләсәктәге шөғөлгә нигеҙ һалыныр ваҡытты бушҡа үткәргән.

**Эрик:** Еңеүҙәребеҙҙе күп осраҡта беҙ үҙебеҙҙән бигерәк атай өсөн яулайбыҙ, тиһәм дә хата булмаҫ. Мин алыштар ваҡытында һәр саҡ күҙ күреме арауыҡта торған атайыма ҡарап-ҡарап алам. Ул яһый икән - еңеүгә тиклем алға, тигән сәм уяна.

**▸ Егеттәр, һеҙ бит ағайлы-ҡустылы ғына түгел, ә - игеҙәктәр! Был тормошоғоҙҙа, эшегеҙҙә, спортта сағылыш табамы? Бер-берегеҙгә ҡаршы алышҡа ла сығырға тура киләме?**

**▸ Асҡар, Эрик, Рәсәй йыйылма командаһында, сит илдәрҙә һеҙҙең башҡорт егеттәре икәнегеҙҙе беләләрме?**

**▸ Хәлил Ғәббәс улы, ғәҙәттә, баланы бер яҡлап ҡына үҫтерергә тура килгәндә, ул шул юҫыҡтағы белемдә нығыраҡ үҙләштерә, ә ҡалған белем өлкәһе бер аҙ иғтибарҙан ситтә ҡала. Беҙ был күренеште йыш ҡына спортсыларҙа күҙәтәбеҙ. Ә һеҙҙең уландарҙың физик күрһәткестәрҙән**



**АСҠАР ХӘМЗИН:**

*Башҡортҡа бокс, көрәш кеүек бер аҙ тупаҫыраҡ көс, таҫыллыҡ, ҡатылыҡ талап иткән спорт төрҙәре яҡыныраҡ. Башҡортта яугир рухы, русса әйткәндә, "дух воина" көслө.*

**ЭРИК ХӘМЗИН:**

*Профессиональ спортсы булыу өсөн генә түгел, ә сәләмәт, әүҙем булыу өсөн дә спорт менән дуҫ булырға кәңәш итәм. Эске тәртип һәм рух ныҡлығы тәрбиәләүҙән башлана ул ҙур спорт. Һин үҙ-үҙеңдә еңһәң, башҡалар һине еңә алмаясаҡ.*

✔ ***Беҙҙең спортсыларҙы Украина, Әзербайжан, Үзбәкстан кеүек илдәр командаһына саҡыралар. Тик беҙ икебеҙ ҙә һатылыу яҡлы түгел. Ситтә - Рәсәйҙең, Рәсәйҙә Башҡортостандың данын яҡлауҙы дауам итәбеҙ.***

**тыш, үҙаңы яҡшы үҫешкән, фекерләү, һөйләү телмәрҙәре юғары. Тимәк, ғаиләлә рухи тәрбиә лә күҙ уңынан ысҡындырылмаған, шулай бит?**

**Хәлил Хәмзин:** Мин үҙем тауурманлы Белорет ерлеге кешеһе. Беҙҙә фәлсәфәүи аң тәбиғәттең үҙенән - бынан бер нисек тә ҡасып булмай. Балалар, ҡала малайҙары булһалар ҙа, бәләкәй саҡтарын ауылда үткәрҙе. Олатай тәрбиәһен татып өлгөрҙөләр. Бабалары - минең бер туған ағайым, Башҡортостандың халыҡ артисы Ғәли Хәмзин башҡарыуында башҡорт халыҡ йырҙарын ишеттеләр, мин үҙем дә сәнғәт кешеһе, әсәләре лә йырсы. Былырҙың барыһы ла йоғонто яһамай ҡалмағандыр, әлбиттә. Әле һуңғы йылдарҙа Эриктың тырышып-тырышып үҙаллы гитарала уйнарға, йырларға өйрәнгәнен, китап уҡыуға бирелә барғанын күҙәтәм, Асҡарҙың сәйәсәт менән ҡыҙыҡһыныуын, ҡыйыу ғына ҡараштары шытып сығып килеүен аңғарам. Атай булараҡ, мин бик ризамын. Уларҙың уй-фекерһеҙ деләр, был тәҡдим менән мөрәжәғәт итмәйҙәр. Был тәңгәлдә йәмғиәт, кешеләр фекеренә бүйһонорға ярамай, ә уларға үҙ ҡарашыңды, позицияңды һеңдерергә, сәләмәт йәшәү рәүешенең өҫтөнлөктәрен үҙ өлгөңдә күрһәтергә кәрәк.

▶ **Шулай ҙа спорттың ваҡыты ҡыҫҡа икәнлекте беләһегеҙҙер, эйеме? Ул нисә йәшкәсә? Һәм һеҙ артабан ниндәй юлдар һайламаҡсыһығыҙ?**

**Асҡар:** Миңә журналистика оҡшай, сәйәсәт менән дә ҡыҙыҡһынам. Бая әйткәнемсә, башҡорт балалары өсөн спорт үҙәге булдырыу хыялы ла күңелдә йөрөй.

**Эрик:** Профессиональ спортта яҡынса 33 йәштәргә тиклем йөрөргә була. Артабан кеше организмында күҙгә күренмәһә, тойолмаһа ла, ҡартайыу процесы башлана һәм уның мөмкинлектәре кәмей төшә. Бигерәк тә үҙен физик яҡтан артыҡ "тотонған" спортсыларҙа. Беҙ быны яҡшы аңлайбыҙ, бөтә нәмәнең дә һәйбәт тамамланыуы яҡшы. Мин йәш спортсылар өйрәтеү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Минең, мәҫәлән, ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, ниндәй генә шәп ҡалалар күрһәк тә, үҙебеҙҙең Өфөнән яҡыныраҡ күргәнем юҡ. Былыраҡ, былырағын осратҡаным юҡ. Бәлки, тыуған йорт ошонда булғанғалыр, һәр саҡ һағынып, ашҡынып ҡайтабыҙ.

▶ **Хәлил Ғәббәс улы, егеттәргә 21-әр йәш, гүзәл зат күҙҙәренә салыналыр бит. Һеҙ уларға килен һайлауҙа берәй төрлө талаптар ҡуяһығыҙмы? Ниндәй килендәр көтөп ятаһығыҙ, мәҫәлән?**

**Хәлил Хәмзин:** Әлегә береһенең янында ла ҡыҙ-ҡырҡын аңғармайым. Әммә, ваҡыты еткәс, уларҙың булырына ышанам. Әлбиттә, әҙәпле, тәүфиҡле башҡорт ҡыҙҙарын килен итеп алып ҡайтырҙар, тип көтәбеҙ. Мин йәш ҡына уларға бөтә яҡтан да әсәләрен үрнәк итеп ҡуям. Тик егеттәрҙең ҡыҙҙарға ҡарата үҙ ҡараштары бар икәнде лә беләм.

**Эрик:** Был хаҡта артыҡ уйланғаным юҡ... Мотлаҡ, мосолман ҡыҙына өйләнәсәкмен, ул да спортсы йәки спорт менән шөғөлләнгән ҡыҙ булырға тейе-

# ҮҪТЕРӘ АЛА,

## талап ит, алдына оло маҡсаттар ҡуй

спорт машинаһы булыуҙарын теләмәйем, әлбиттә, беренсе урында - аң, рух торорға тейеш, шуларһыҙ бер һөнәр кешеһе лә үҫешә, алға китә, уңыштарға өлгәшә алмай.

**Асҡар:** Ошонда мин дә өҫтәп китәм: беҙгә атай менән әсәйҙән яҡшы гендар бирелгән, уларға рәхмәт!

▶ **Егеттәр, һеҙ Рәсәй йыйылма командаһы составында сит илдәрҙә ярыштарҙа ҡатнашаһығыҙ. Нисек ҡабул итәләр сит тарафтарҙа Рәсәй спортсыларын, ғөмүмән, рәсәйҙәрҙе?**

**Эрик:** Ул хәтлем шәптән түгел. Берҙән, бар урында ла рәсәйҙәрҙе көслө конкурент итеп ҡабул итәләр. Шуға ла уларҙың һәр аҙымы тиерлек күҙгә салынып бара. Икенсенән, Рәсәй туристарының сит илдә үҙҙәрен тота белмәүен күҙәтеп, ныҡ ҡына кәйеф ҡырылғаны бар. Беҙҙең спортсылар араһында ла бар ундайҙар. Әсеп алып кәмит ҡорорға ла аптырамайҙар. Улар өсөн ҡыҙарырға ла тура килә. Ә бына Кавказ спортсылары һәр ваҡыт әҙәпле, үҙ баһаларын белеп, башҡаларға хөрмәт менән ҡарай белә. Беҙ уларҙан үрнәк алабыҙ.

▶ **Эсеү-тартыу... һеҙгә хасмы?**

**Асҡар:** Тәмәкене бер тапҡыр ҙа ауыҙыма алып ҡарағаным да юҡ. Спиртлы эсемлектәрҙән шарап менән коньякты Италияла дегустация мәлендә тәмләп ҡараным. Һыраның да ни икәнен белмәйем. Былар, нисектер, ҡыҙыҡһындырмай ҙа.

**Эрик:** Спортсылар араһында беҙгә башта эсергә тәҡдим итәләр ине. "Йә, ярай, башҡаларҙан айырылмағыҙ", - тип өгөтләй торғайнылар. Хәҙер өйрән- өсөн тренерлыҡ юлын һайлайым.

▶ **Спортсы баланы "аҫырау" ҡиммәткә төшәме бөгөн?**

**Хәлил Хәмзин:** Арзан түгел. Күп осраҡта ана шул матди сығымдары ла биҙрәтә бит атаәсәләрҙе. Спорт өлкәһендә йәш спортсыларҙы яҡларҙай, үҫештәренә булышлыҡ итерҙәй йүнле программалар юҡ, булғандары ла эшләмәй. Тренерҙар тәрбиәләнеүселәрен ярыштарҙа ҡатнаштырырға теләй, йүнен таба алмай өҙгөләнә. Ата-әсәнең баланы спорт формаһы менән тәьмин итеү, юл хаҡтары кеүек сығымдарҙы күтәрә алмауы ла бар. Хатта былырҙы эшләргә тейеш түгел тип тә һанай күптәр.

Беҙ балаларҙың шөғөлөнә аҡса йәлләмәнек. Нимәләрҙәлер ҡыҫһаҡ ҡыҫтыҡ, әммә малайҙарҙы ҡайҙалыр ярышҡа алып барыуҙан баш тартманыҡ. Тренер тәҡдим итә икән, көн һораным да, йыйындым да, ике малайҙы ултыртып алдым да сыҡтым да киттем. Әммә былар һәр кемдең дә ҡулынан килмәй, шунлыҡтан, йәш спортсыларға хөкүмәт яҡлауы, иғтибары бик тә кәрәк. Улар быға мохтаж.

▶ **Көслө спортсыларҙы байыраҡ илдәр саҡырып, әүрәтеп, һатып алып та ҡуя икәнен беләбеҙ. Һеҙгә тәҡдимдәр булғаны бармы?**

**Эрик:** Бар. Беҙҙең спортсыларҙы Украина, Әзербайжан, Үзбәкстан кеүек илдәр командаһына саҡыралар. Тик беҙ икебеҙ ҙә һатылыу яҡлы түгел. Ситтә - Рәсәйҙең, Рәсәйҙә Башҡортостандың данын яҡлауҙы дауам итәбеҙ. Бәлки, был пафослыраҡ та килеп сығыр, әммә "тыуған ил" төшөнсәһе беҙҙең штер. Миңә һомғол буйлы, көслө характерлы ҡыҙҙар оҡшай.

**Асҡар:** Мин ҡыҙҙарҙың үҙе башлап танышырға теләк белдереүен яратмайым. Буласаҡ кәләшем өйҙә ултырырға теләһә - бигерәк тә яҡшы. Ғаиләне мин аҫырарға тейеш, ул, әйҙә, күберәк ваҡытын миңә, балаларға арнаһын...

▶ **Спорт донъяһына тәүге аҙымдарын яһаусы йәш спортсыларға, үҙ тәжрибәгеҙҙән сығып, ниндәй кәңәштәр бирер, теләктәр әйтер инегеҙ?**

**Асҡар:** Иң беренсе, спортсы була торған балаларҙың атаәсәләренә түҙемлек һәм һыҡышмалылыҡ теләйем. Бәләкәй спортсыларға, бер ваҡытта ла сигенмәскә, тигән девизды маҡсат итеп ҡуйырға кәңәш бирәм: туғыҙ тапҡыр уңышһыҙлыҡҡа осрағанда ла, унынсыһы мотлаҡ енеү килтерәсәк.

**Эрик:** Профессиональ спортсы булыу өсөн генә түгел, ә сәләмәт, әүҙем булыу өсөн дә спорт менән дуҫ булырға кәңәш итәм. Эске тәртип һәм рух ныҡлығы тәрбиәләүҙән башлана ул ҙур спорт. Һин үҙ-үҙеңде еңһәң, башҡалар һине еңә алмаясаҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Ошондай ихлас һөйләшеү булды аталы-уллы Хәмзиндар менән. Улдарының ярһып-ярһып үҙ фекерҙәрен белдереүен тыйнаҡ ҡына йылмайып тыңлап ултырған, уларҙы сикләмәй генә төҙәтмәләр индергән, ыңғайҙарына шаярыпкөлгән атай кешенең ғорурлығын да тоймау мөмкин түгел ине. Һәм ул хаҡлы. Балаларҙы өйрәтергә, талап итергә генә түгел, улар менән ғорурлана белергә лә кәрәк.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
*әңгәмә ҡорҙо.*

---

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ



# ГӘЗИТКӘ ҺӨЙӨҮЕМ...

## тәүге һандарынан уҡ

**"Киске Өфө" гәзитен сыға башлағандан бирле алдырам, һәр һанын көтөп алған уҡыусығыҙмын. Был гәзит тураһында тәү мәғлүмәтте кемдән, ҡайҙан ишеткәнмендер - әйтә алмайым. Әммә "Өфө ҡалаһында башҡорт телендә "Киске Өфө" тигән гәзит сыға башлаған икән", тигән һүҙҙе үҙ ҡолағым менән ишетеүем хәтеремдә. Исеме бүтән гәзиттең тәржемәһе булып та, есеме, эстәлеге үҙенә башҡа булған милли матбуғат баҫмаларын быяға күргәнебеҙ булмаған, "Киске Өфө"нө тәүҙә "Вечерняя Уфа"ның күсермәһе икән тип уйланыҡ. Бәхтиһәң, күсермә лә, тәржемә лә түгел икән...**

Шунда уҡ матбуғат менән дуҫ бер-ике танышыма шылтыратып, "Киске Өфө" тураһында уларҙан һораштырып алырға булдым. Тик улар әлегә хәбәрҙар булмай сыҡты. Әйткәндәй, үҙебеҙҙең күп фатирҙарҙы үҙ эсенә алған йортта ла ул йылдарҙы гәзиткә бер үҙем яҙылдым. Әлеге лә баяғы, бик шәп гәзит нәшер ителә башлаған, тигән һөйөнөслө яңылыҡты ишетеү менән, почта бүлексәһенә йүгергәйнем, унда мине һалҡын ғына ҡаршыланылар: "Был бит яңы гәзит түгел, ул бары тик тәржемә генә. Икенсенән, барлыҡ яңы нәмә һымаҡ уҡ, ул оҙаҡҡа бармаясаҡ, өсөнсөнән, беҙ был гәзиткә һеҙҙе техник сәбәптәр арҡаһында яҙҙыра алмайбыҙ (ниндәйҙер әйберҙәрҙе юҡлыҡҡа һылтандылар, ни икәнлеге хәтерҙә юҡ)", - тинеләр. Мин тот та, баш мөхәрриргә шылтырат. Гөлфиә Янбаеваға хәлде һөйләп биргәс, ул мәсьәләне шунда уҡ хәл итте. Почтаға уңышһыҙ сәфәр ҡылыуыма бер-ике көн үткәс, был "кәлгә"не икенсе мәртәбә яуларға тура килде. Был юлы йомошомдо бер һүҙһеҙ йомошланылар. Гәзиткә ярты йыл һайын яҙыла-яҙыла, әлеге "кәлгә"нең ҡаршылыҡлы урындарын өйрәнеп бөттөм. Гәзитте яратҡас, ниндәй генә ҡаршылыҡ килеп тыуһа ла, уны енеп сыға торҙом. Теге миҫалдағы кеүек, йыш ҡына редакция үҙе уларҙы хәл итешә килде.

Гәзиткә һөйөүөм тураһында әйтә биреп ҡуйған фекеремде дауам итәйем. Ысынлап та, гәзитте күңеленә яҡын күрмәһәң, тиҫтә йылдан артығыраҡ ваҡыт эсендә дуҫлыҡ өптәре, билдәле, үҙенән-үҙе йоҡара, хатта өҙөлә бит инде. Нимәһе өсөн яратаммы был гәзитте? Ә бына ни сәбәпле: ул, беренсенән, матур йәш ғаиләләр менән таныштырыуҙы үҙәккә ҡуя. Был юлды редакция бик белеп һайлаған. Ситтән ҡарағанда, иҫ китерлек башҡа матур күренештәр ҙә бихисап, әммә иң илаһи, иң изге эш ул - матур ғаилә ҡороу. Икенсенән, гәзиттә ил ағаларының, ил инәләренең, фекерле йәштәрҙең әйткән һүҙҙәре бик төплө итеп яҡтыртыла. Хеҙмәткәрҙәрҙең мәҡәләләрҙә матур итеп йомғаҡлап ҡуйыуы ла оҡшай. "Был тиклем төплө итеп яҙыр өсөн бик оҙаҡ уйланып йөрөргә кәрәктер", - тигән һығымтаға киләм. Өсөнсөнән, гәзит тәнҡитте лә, маҡтауҙы ла урынлы ғына тәҡдим итә. Уның тәнҡите үтә йомшаҡ та, үтә "бөлдөрөрлөк", "үлтерерлек" тә түгел - ул тәғәйен генә. Алғышы ла ҡоро маҡтау өсөн генә түгел, ә лайыҡлыларға ғына әләгә торған өлөш. Дин темаһын да бик белеп сағылдыра "Киске Өфө"ләр. Теге йәки был дини материалды уҡығандан һуң: "Моғайын да редакцияла диндар хеҙмәткәр эшләйҙер", - тигән уй килә. Үҙебеҙгә лә гәзит биттәрендә сығыш яһарға тура килгеләй. Бер тапҡыр ғаиләбеҙ тураһында мәҡәлә лә яҙҙылар. Үҙемдең ике улым бар, улар икеһе лә юғары белемле, үҙҙәре лә, ейәндәребеҙ ҙә беҙҙең һымаҡ уҡ тыуған телебеҙҙә аралаша. Хатымдың һуңында ҡала мөхитендә йәшәүсе башҡорт ғаиләләренә мөрәжәғәт иткем килә. Ниндәй генә урында, ҡайһы ғына илдә йәшәһәң дә, күңелеңдә теленә һөйөү бар икән, балаларыңды ла, ейәндәреңде лә туған теленә өйрәтеү, уларға рух орлоғо һалыу ауыр түгел. Ошо эштә ярҙам иткән милли баҫмаларыбыҙға рәхмәт яуһын.

**Рәйлә ҺАҒЫНБАЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

– Дөрөҫ, Илнур, - тип, Ырыҫйән уҙаман улының фекерен хупланы. Ысынлап та, "Йөрәк" шиғыры хис-тойғо, уй-фекерҙәр ташҡыны, яңғырашы йөнәтенән ифрат та оло дарманға эйә. Һүҙҙәре, зауыҡ менән затлы муйынсаға эҙмә-эҙлекле йыйылған аҫыл ынйылар кеүек, һәр ҡайһыһы үҙ урынында емелдәп, сағыу балҡып, күңелдәрҙе яулай, йәнһә "Урал батыр" эпосындағы ынйы башлы тылсымлы таяҡ һымаҡ, ҡойон-гәрәсәт тыуҙыра, йәнә лә доға һымаҡ Күккә ашып, илаһи көстәр менән бәйләнешкә инә. Иллә мәгәр шағирҙың: "Йыртып астым күкрәгемде, йолҡоп алдым йөрәгемде", - тигән аңғармай ысҡындырған, уҡтай осорған һүҙҙәре зәхмәт булып үҙенә ҡайта, алдына килә. Баяғы "Быйыл ғына сыҡҡан бала кәкүк саҡыра ла белмәй саҡыра тау-таштa" тип, бер ҙә юҡҡа ғына йырламаным бит. Был - күрәһенә булыу, ғәмәлгә ашыу ғәләмәте. Ғәләмәт сигеү иһә - ыҙа күреү, яуап тотоу, ғибрәт булыу... "Бар Йыһандың тынын тоя инем ун һигеҙҙә генә көйөмә" тигән Рәшиттең уй-хистәр зыяратында "Ер аҫтына мине аттылар, бығау һалып, хискә, аҡылыма... Һәм мин киттем, гүйә, донъянан... Ғазап сигәм... Бары ла бында үле... Тирә-яғым тулы тик таш һын..." тип өҙгөләнеүе бының асыҡ өлгөһө. "Ер аҫты упҡынына тартып индерҙе... Яҙмыш ауыр, асы, ай, асы!" тиеүе яҙаға дусарлығына ишара. Ә бит оло аҡыл менән тыуҙырылған халҡыбыҙҙың классик йырҙарында тән ағзаларына зарар ҡылыу сағылмай. Улар - олуғ үрнәк, фәһем!

Ырыҫйән уҙаман улдары менән бик ихлас әңгәмәләшә торһон, беҙ иһә ошо урында Изге Китап донъяһына сәфәр ҡылайыҡ. Дини ҡараш буйынса Аллаһы Тәғәлә әҙәмде үҙенең ҡиәфәт-сүрәте, йораты үә ишараты буйынса яралтҡан, уны башҡа бихисап заттарҙан юғары ҡуйған, уға күктәрҙәге һәм ерҙәге нәмәләрҙе буйһондорған. Әҙәмде бик камил яһап, ишетеү өсөн ҡолаҡтар, күреү өсөн күҙҙәр, ҡан йөрөшөн тәьмин итер мускуллы йөрәк биргән. Ишетеү һәләте һөҙөмтәһендә кеше асыш-яңылыҡтарҙы ишетә, тыңлай, күҙҙәре Илаһ күренештәрен һәм мөғжизәләрен, йәнә лә ғүмеренә хәүеф тыуҙырыусыларҙы күрә. Ә йөрәге, аҡылы Раббыбыҙ мәғлүм иткән сүрә-аяттарҙы аңларға, рөхсәт ҡылынғанды тыйылғандан айырырға, шөбһәләнән, шикләнән, нәфсенән һәм хәрәмдән ҡурсаларға ярҙам итә. Тәндең башҡа ағзалары ла кешегә Илаһҡа табынырға булышлыҡ ҡылыу өсөн яратылған. Кеше бөтә ағзалары һау булған осраҡта ғына тейешенсә Уға һыйына, бөтә күңелен бирә ала. Ғәрип кеше мотлаҡ булғанды атҡарырға һәләтһеҙ. Шуға ла Шәриғәт үҙенең тәненә зыян ҡылыуҙы, уны физик һәм әхлаҡи яҡтан да хәүефкә ҡуйыуҙы ҡәтғи тыя һәм бик аныҡ итеп "үҙегеҙҙе һәләкәткә дусар итмәгеҙ" ти. Кешенең ғүмеренә, тәненә, намыҫына һәм милкенә хасланыуҙы, ҡул һуҙыуҙы ла тыя. Аҡылына зарар итеү - бик ҙур гонаһ! Һаулығына зыян ҡылыусы ҡаты сирҙәргә тарый. Һәр нәмәнән юғары, һәр нәмәнән көҙрәтле Илаһ кешене золомдан ҡурсалап, үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙы, ғүмерендә хәүеф аҫтына ҡуйыуҙы, упҡын ярына баҫыуҙы тыйып, "үҙ-үҙегеҙҙе үлтермәгеҙ" ти. Тыйылғанды тыңламаусы, һанға һуҡмаусы Аллаһы Тәғәләнең нәфрәтен тыуҙыра һәм Уның яҙаһына дусар була, үҙенә тән һәм йән ғазабы килтерә. Төшөнөр-төшөнмәҫтән башҡаларҙы ла тыйылғанға, шайтан вәсвәсәһенә өндәүсене яфаға тарыта. Сәләмәтлегенә зарар итергә, үҙ-үҙен харап ҡылырға ынтылыусылар ҡаты ауырыуға һабыштырыла...

- Тимәк, атай, - тине Камил, - Бөйөк барлыҡҡа килтереүсе, Ижадсы алдында гонаһ һаналған ысул менән үҙенең тәненә, йөрәгенә зыян иткән, был хәтәрҙе башҡаларға ла ишеттергән шағир, үҙе лә аңғармаҫтан, бәләгә тарый, Юғары Аҡыл яҙаһына, йән ғазабына дусар ҡылына. Йөрәк бит - аҡыл. Йөрәгенде йолҡоу - аҡылыңды йолҡоу, зиһенеңдән яҙыу. Быны бит әле Рәшиттән байтаҡҡа өлкәндәр ҙә төптән уйламайынса, шиғри асыш, табыш итеп баһалап, өҙлөкһөҙ ҡабатлай, гонаһты арттырғандан-арттыра. Тән ағзаларына зыян ҡылыу асыш буламы һуң?..

- Ауырыған сағында тыуған йортонда иҫе ваҡытлыса асылып китеп, Хоҙай тарафынан аңының томаланыуын тойоп-мо, Рәшит: "Ошолар ғына башыма етте", - тип, яҙмаларын мейескә тыға, шиғырҙарын утҡа яға. Рауил Бикбаев һығымта яһағанса: "Беҙ быны бер ваҡытта ла аңлап бөтә алмаясаҡбыҙ. Ниндәй хазиналар көлгә әйләнде икән ул мейестә? Шағир ул ялҡында, бәлки, үҙенең һуңғы өмөттәрен, һуңғы хыялдарын яндырғандыр, мейестә ут һүнгәндә, бәлки, Рәшиттең бөйөк зиһенендәге һуңғы балҡыштар ҙа һүнә барғандыр. Тәҡдир тигәндәре бына шулай аяуһыҙ шул, йондоҙ кеүек шәхестәрҙе лә ҡыҙғанып тормай. Шағирҙың "Йәшен" исемле китабына инеш һүҙендә Риф Мифтахов: "Табиптар Рәшиткә ниндәй диагноз ҡуйғандарҙыр, ә мин уны йән яныуы тип атар инем", - тип, бик дөрөҫ әйтә. Ысынлап та, йән яныуы... Шиғриәт, ижад өсөн, матурлыҡ, гармония өсөн, тормоштоң бөйөклөгөн раҫлау өсөн шағир аҡылының туҡтауһыҙ титаник эшмәкәрлеге һәм шул юғары маҡсаттарға ынтылып, кешеләр менән генә түгел, илаһи көстәр менән, Йыһан менән һөйләшеп йәшәгәндә, иҫ китмәле көсөргәнешле рухи йәшәйештә зиһенең, күңелдең, йәндең яныуы... " "Йыртып астым күкрәгемде, йолҡоп алдым йөрәгемде" тигән һүҙҙәрҙең матдиләшеп, әйәһенең алдына килеү, уны мәңгелек яфаға һалыу сәбәбен Рауил Бикбаев асыҡтан-асыҡ төшөнөп бөтмәһә лә, быны ниндәйҙер кимәлдә, әйтәйек, "илаһи көстәр менән, Йыһан менән һөйләшеп йәшәгәндә" тигән фекере менән барыбер төҫмөрләй кеүек.




## "Аҙ бирһәң дә ғүмерҙе"

Илнур ниҙелер иҫенә төшөрөп, берсә йылмайып, берсә моңһоуланып ҡуйҙы. Атаһы улының йөҙө үҙгәреп, күңеленең шөбһәләнеүен дә шундуҡ шәйләне. Бәлки, хәтеренә килгәнен бигүк ишеттерергә лә алҡынмайҙыр...

- Улым, уйыңдағыңды әйт, ҡыйынһынма?

- Ҡөрьән шағир халҡын бигүк өнәп бөтмәй кеүек. "Шағирҙар" сүрәһенән аңлауымса, шағирҙарға аҙашҡан кешеләр эйәрә (Ҡөрьән - шиғыр, Бөйгәмбәр шағир түгел, сөнки Ҡөрьән Хаҡиҡәткә юл күрһәтә). Аныҡ әйтелеүенсә, "күрмәнеңме уларҙың (шағирҙарҙың) һәр үҙәндә йөрөгәндәрен (шиғыр сығарғандарын) һәм үҙҙәре ҡылмаған нәмәләр тураһында һөйләгәндәрен, иман килтергән һәм изге эштәр эшләгән, Алланы күп тапҡыр иҫкә алғандарҙан, яҡлағандарҙан (үҙҙәренең шиғырҙары менән) башҡа, һәм улар йәбер күргәндән һуң ярҙам алдылар, һәм золом ҡылыусылар (Хаҡ Дингә үә Бәйғәмбәргә) үҙҙәренең ниндәй боролош менән боролоуҙарын белерҙәр". Дин әһелдәренен: "Хаҡлыҡҡа ҡаршы булған шағирҙарға Ҡөрьән әһеле эйәрмәҫ, ахмаҡ үә аҙғын кешеләр генә эйәрер... Улар яҡшы эште эшләмәһәләр ҙә, беҙ яҡшы эште эшләйбеҙ, тип, ялған һөйләрҙәр... Исламды маҡтап шиғыр әйтеүселәр, кафырҙарҙан золом күргәндән һуң, Аллаһ ярҙамы менән өҫкә сыҡтылар, алға киттеләр... Золом ҡылыусы кафырҙар тиҙҙән белерҙәр ниндәй урынға ҡайтарыласаҡтарын" кеүек тәфсирҙәре лә бар.

- Тәрәндән төшөнгәнгә сүрәләге был аят бик ғибрәтле, беҙҙең әңгәмәбеҙ өсөн дә фәһемле. Рәми Ғариповса иһә, шағир - ел ул, донъя, заман еле, - ҡайҙа булһа, нейгә ҡағылһа, көйөн шунан ала... Минең уйымса ла, шағирҙар буш хыялдар диңгеҙендә генә йөҙмәй, туҙға яҙмаған, башҡа һыймаған, мәғәнәһеҙ нәмәләр менән мауыҡмай, һауаланмай, түбәнлеккә төшмәй, ике йөҙләнмәй, фәҡәт хәҡиҡәткә хеҙмәт итергә, яҡшылыҡты ғына ат итеп, күңелдәрҙә изге хистәр уятырға, ҡәрҙәштәрен нур, белем һәм моң менән һуғарырға, иманға, яҡтыға, хаҡлыҡҡа әйҙәргә, уларҙың зиһенен асырға, аҡылын арттырырға тейештәр. Әйткәндәй, донъяны, шиғриәтте бөтә тәрәнлеге, нескәлеге менән тойған, "Мин тағы ла бер яҙҙы күрһәм, тәгәрәһәм ҡыҙыл үләнгә, тын да алмай ятһам күккә ҡарап, иҫәпләмә мине үлгәнгә" тигән, күпте күргән Рәмиебеҙ иҫән-һау, шап сағында уҡ үҙенә йыш-йыш ҡына ҡыҫҡа ғүмер күҙаллай:

*Кәкүк, кәкүк! Үпкәләмәм,*
*Аҙ бирһәң дә ғүмерҙе:*
*Бар ҡайғыһын,*
*бар шатлығын*
*Татып китәм был ерҙең...*
*...Инәкәйем,*
*мин алдараҡ китһәм,*
*Ҡайғырма һис*
*минең киткәнгә...*
*...Мин төшемдә*
*үлгәнмен дә, имеш,*
*Һин өҫтөмә*
*тупраҡ ташлайһың...*
*...Мин дә булмам бер көн,*
*дуҫҡайҙарым,*
*Йәнем осоп*
*китер күктәргә...*

Тормош михнәте, яҙмыш зәһәрлеге, йәбер-золом фани донъянан биҙҙереп, төшөнкөлөккә, йәшәү нурының һүрелеүенә, күңеленең үлеүенә этәрҙеме икән Рәмиҙе?.. "Эй тәбиғәт! Бармы һиндәгеләй шундай оло сәнғәт донъяла?" тип һоҡланған шағирға ҡапыл да ул йәнһеҙ, өнһөҙ: "Мәғәнәһеҙ, ғәмһеҙ ярты ай... Нуры ла юҡ, йыры ла юҡ уның"... "Һөйөү үтте. Дуҫтар китте, ҡалды һағыш һәм яра. Тормош шулай яҙмыш менән аяу белмәй шаяра"...

Бынан һуң, һүнер алдынан, балаларына: "Бәләкәс ғазаптарыма тыбырсынһам да ололарына түҙерлек оло көс бар, бугай, миндә. Мине һындырыу әлегә мөмкин түгел..." - тигән Рәми 19 февралдә яҙған һуңғы "Февраль бураны" шиғырында йәнә үлемен көҫәй:

*... Был донъяла булыр*
*Барыһы ла,*
*Һинең менән бары*
*Мин булмам.*
*Бына ниндәй үкенестәр*
*Бар бит -*
*Ҡалай үлмәк кәрәк,*
*Күҙ алмам...*
*Түҙалмам мин ләкин,*
*Түҙалмам...*

Һәм, тәҡдире етеп, ҡырҡ биш йәшендә генә әйләнеп ҡайтмаҫ ергә юллана. Алла ҡушҡан күрәсәк, үлем сәғәте, тиһәк тә, барыбер шағир һүҙ магияһы менән әжәлен үҙе ашыҡтырған кеүек.

"Тарҡау уйҙар" шиғырында "Өҙ башымды, эй Хоҙайым, был миңә ысын баш түгел", "Йән"дә - "Сыҡ, йәнем, тән зинданынан, Күккә ос, йәмләп йәнә", "Йәш шағирҙың ҡәбер ташында" иһә - "Тар ҡәберҙең ҡуйынына керҙем - ҡотолдом донъянан, сөнки биҙҙем донъянан, артыҡ тораһым килмәне, йәшләй үк керҙем ләхеткә, киң түшәкте тарһынып, төп ятаҡ булғанға ләхетем, тарһынаһым килмәне", "Бәхетһеҙ мин"дә - "Ҡайҙа барһам да, ҡайҙа торһам да бәхетһеҙ кәүҙә мин" тип яҙған Шәйехзада Бабич егерме дүрт йәшендә генә ҡыҙылдар тарафынан тураҡлана. Был - тормош ысынбарлығы!

## "Ал мине, Күк"

– Ни өсөн һүҙ матдиләшә, бәғзе осраҡтарҙа алғыш-теләктәрҙе ғәмәлләштерә икән, Камил ағай?

- Һөйләшкәндә, тауышланғанда, һөрәнләгәндә, йырлағанда, музыка ҡоралында уйнағанда, тулҡын тәьҫире хасил булып, тирә-йүн тирбәлә башлай. Янрау, шаңдау, йәғни тауыштың яңғырап кире ҡайтыу күренешен дә беләбеҙ. Был мәлдә һауа, күк тә тирбәлә. Әйткәндең мәғәнәһенә бәйле кешенең хәл-торошо ла үҙгәрә, ул йә ҡыуана, йә көйөнә, сөнки һүҙҙәр уның зиһен-мейеһендә лә тирбәлеү хәрәкәте тыуҙыра, төрлө тойғолар уята. Ныҡ тулҡынланыуҙан тауыш та ҡалтырай. Көтөлмәгән хәбәрҙән хатта тамаҡ быуыла, иҫ юғала. Уй, һүҙ, моң күктә лә сағыла. Ғәжәп һымаҡ, әммә Йыһан да ишетә, яуап бирә, сөнки ул да тере йән кеүек. Быны етенсе тойғо менән тойоп, күккә баҡып, әҙәми зат Тәңренән, Илаһтан ярҙам һорай. Һиндтар дерелдәп әйтелгән хәрәфәти өн, һүҙ тылсымы менән ғүмерҙәренә көҙрәт йәлеп итә. Әпсен-төпсөндәр, үтенеүҙәр, ялбарыуҙар сихри мәлдә Йыһан менән тоташтырып, тәнде һәм йәнде таҙарта, аҡыл эшмәкәрлеген яҡшырта, камиллаштыра, һәләттәрҙе уята, сирҙәрҙән һәм яуыҙлыҡтарҙан ҡотҡара, теләктәрҙе бойомға ашыра. Әммә хәҡиҡәткә ҡаршы үтенестәр ҙә тыуҙыра, башҡа бәлә-ҡаза ла килтерә.

**(Дауамы. Башы 20-се һанда).**

✓ Әгәр ҙә һеҙҙә боронғо, ҡыҙыҡлы фотолар булһа, уның сифатлы копияһын редакцияға ебәрегеҙ. Бының менән һеҙ кейем тарихы ғилеменә, боронғо, әлегәсә аҙ билдәле булған кейем өлгөләрен ҡайтарыуға тос өлөш индерә алаһығыҙ.



ӘЙҘӘГЕҘ, ФЕКЕР ҠОРАЙЫҠ!

# МИЛЛИ КЕЙЕМДӘ - МИЛЛИ ХОЛОҠ

**Милли кейем, уны тергеҙеү тураһында матбуғат биттәрендә байтаҡ яҙылды. Бөгөнгө көндә был өлкәлә эшләүселәрҙең һаны ишәйә, милли стилдә тегелгән костюмдар етештереү менән шөғөлләнгән предприятиелар арта бара. Бигерәк тә бар районДарҙа ла эшләп килеүсе Ағинәйҙәр ҡорҙары ағзаларының үҙ ерлектәре, үҙ ырыуҙары үҙенсәлегенә яраштырып, милли кейемдәр тегеп алып кейеп йөрөүе оло маҡтауға лайыҡ.**



### Сығанаҡтарға таянайыҡ

Ҡасандыр милли кейемде сәхнә ихтыяждарына тап килтереп стилләштереүҙе Фәйзи Ғәскәров башлаған, һәм шул йылдарҙан алып сәхнә кейеме ижад итеүсе рәссамдар, милли элементтар ҡушып, күҙ яуын алырлыҡ костюмдар ижад итә. Театр һәм эстрада артистарының бындай кейем кейеп сығыш яһауы - бик хуп күренеш. Әммә бер нәмә эсте бошора. Башҡорт кейеме йылдан-йыл нығыраҡ стилләштерелә бара, һәм бөгөнгө көндә сәхнәлә, театрҙа ла саф башҡортса тегелгән традицион милли кейемде осратыуы бик ҡыйын. Ул ғына түгел, сәнғәт өлкәһендә эшләгән байтаҡ кешеләрҙең милли кейем тураһындағы белеме сәхнәлә күргән эстрада кейем өлгөләре менән сикләнә, шуға ла улар етди, тарихи темаларға төшөрөлгән нәфис фильмдарҙа, халыҡ йырҙарына клиптарҙа геройҙарына ошондай кейем кейҙерә, шунын менән тупаҫ дилетантлыҡҡа юл ҡуя.

Шунын өсөн терминдарҙы алдан уҡ асыҡлап үтергә кәрәк:

- Милли кейем - халыҡтың быуаттар буйы, бик аҙ ғына үҙгәрештәр кисереп, һаҡланып килгән ҡомартҡыны.

-Милли стилдәге сәхнә кейеме - теге йәки был милли элемент ҡушып тегелгән, дөйөм милли колоритты сағылдырған сәхнә кейеме.

Был ике йүнәлеш тә параллель рәүештә үҫешергә тейеш, һәм уларҙы бутауға юл ҡуйырға ярамай. Шулай уҡ айырым ваҡиғаға арналған сюжетлы әҫәрҙәрҙә стилләштерелгән кейем кейҙереү дөрөҫ түгел. Ғөмүмән, стилләштерелгән сәхнә кейеменең етди етешһеҙлеге - традицион милли кейем өлгөләре менән таныш булмау, яңы костюмдар ижад иткәндә уларға таянмау. Һөҙөмтәлә сәхнәләге ҡайһы бер кейемдәр бөтөнләй башҡорт үҙенсәлектәрен сағылдырмай, уларҙы төрөк йәки әзербайжан костюмдары тип тә атарға була. Ә тамашаһы һәм уларҙы ижад иткән рәссамдар был кейемдәрҙе "милли кейем" тип атай бирә, һәм был төптө яңылыш фекер матбуғат биттәрендә лә урын ала.

Әгәр ҙә рәссамдар үҙ эшмәкәрлегендә С.И. Руденконың "Башкиры" китабына йәки С.Н. Шитованың "Башкирская народная одежда" тигән китабына (һуңғыһы, әйтергә кәрәк, милли костюмға бағышланған берҙәнбер абруйлы хеҙмәт) мөрәжәғәт итһә, үҙ ижадтары өсөн ҙур материал туплар ҙа, яңынан-яңы сәхнә кейеме өлгөләре тыуҙырыр ине. Был китаптар уларҙың өҫтәленән төшмәҫкә тейеш. Сөнки милли кейем халыҡтың холоҡон сағылдыра, һәм заман рәссамдары, тарихи дөрөҫлөктө юҡҡа сығарып, милли кейемде үҙгәртеп, халыҡтың холоҡ-фиғеле тураһында ла яңылыш фекер тыуҙыра. Әйтәйек, һуңғы йылдарҙа сәхнәлә яугир ҡыҙҙарҙы көүҙәләндереү үҙенсәлекле бер модаға әйләнде. Уларға ҡыҫҡа өҫкө кейем, аяҡҡа һылашып торған үтә күренмәле ыштан кейҙерәләр. Хатта ир һуғышсылар ҙа киң, оҙон кейем, киң ыштан кейгән, шулай булғас, ни эшләп ҡатын-ҡыҙҙар ярым шәрә кейенһен, ти? Уларҙы бындай рәүештә һүрәтләү башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын әҙәпһеҙ итеп күрһәтә.

Ә милли кейемгә килгәндә, бөгөнгө көндә ул музейҙарҙа, ғаилә архивындағы фотоларҙа ғына һаҡланған тиерлек. Театрҙа ла уны осратып булмай. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа Башҡорт академия драма театры репертуарында милли кейем тик М. Буранғоловтың "Башҡорт туйы" спектаклендә генә ҡулланыла ине, ә башҡа тарихи темаға ҡуйылған "Һуңғы гәйнә", "Нәркәс" спектаклдәрендә актерҙар бик ныҡ стилләштерелгән кейем кейә.

Ә бит милли кейем - халыҡ ҡасандыр көн һайын кейгән, көндәлек ҡулланыуға, шулай уҡ яуҙа йөрөүгә яраҡлы итеп тегелгән кейем. Донъялағы бик күп илдәрҙә халыҡтар ауыл ерендә генә түгел, ҡалала ла милли кейем кейә. Һәм әле милләттәштәремдең милли кейем тектереп кейәйек, тип, матбуғат биттәрендә сығыш яһауы - айырым романтиктарҙың буш һүҙҙәре түгел, ә бөгөнгө көндә барған рухи күтәрелеш, үҙаң уяныу менән ауаздаш тәҡдим. Һәм нимәһе ҡыҙыҡ: халыҡтың ихласлап милли кейем кейә башлауы унын рухи яңырыуы менән туранан-тура бәйле. Бөтә континенттарҙа, бихисап илдәрҙә кешеләр, заманса бер иш кейемде сисеп, байрамдарға булһа ла милли кейем кейә, бының менән улар үҙ тамырҙарына яҡыная, асылына ҡайта. Сөнки кейеменә ҡарап, кешенең ниндәй милләттән икәнен әйтеп була, ул сит кешеләр өсөн визит карточкаһы, паспорт һымаҡ. Бындай "визит карточкаһы", әлбиттә, милли ғорурлыҡ та, шул уҡ ваҡытта яуаплылыҡ тойғоһо ла уята. Ләкин милли кейем тектерергә теләгән бик күптәр үҙ теләген тормошҡа ашыра алмай йә тегеүсеһе юҡ, йә кейем өлгөләре юҡ. Китаптарҙағы өлгөләр ни тиклем генә бай булмаһын, был өлкәлә асылмаған, өйрәнелмәгән урындар күп әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Боронғо фотолар - был мәсьәләне тәрәнерәк өйрәнер өсөн иҫ китмәле бай материал. Шәхси фотоальбомдарҙа һәм архивтарҙа һаҡланған фотоларҙа бөгөнгө көнгә тиклем онотолған кейем өлгөләре осрауы ихтимал. Шуға ла беҙ гәзит уҡыусыларға мөрәжәғәт итергә булдыҡ. Әгәр ҙә һеҙҙә боронғо, ҡыҙыҡлы фотолар булһа, уның сифатлы копияһын редакцияға ебәрегеҙ. Бының менән һеҙ кейем тарихы ғилеменә, боронғо, әлегәсә аҙ билдәле булған кейем өлгөләрен ҡайтарыу, уны өйрәнеү һәм көндәлек ҡулланылышҡа индереүгә тос өлөш индерә алаһығыҙ.**

**Таңсулпан БУРАҠАЕВА.**

ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ

# АҠЫҠ, БАШҠА АҪЫЛТАШТАР



**Ата-бабаларыбыҙ боронборондан Уралдың аҫылташтарын киң ҡулланған. Быны беҙ бөгөн башҡорт халҡының бай һәм зауыҡлы итеп биҙәлгән милли кейеменДә күрәбеҙ.**

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының кейеме бигерәк тә аҫылташтарға бай. Халҡыбыҙҙың иң яратҡан ташы аҡыҡ булған. Аҡыҡ ташын милли кейемдә, йөҙөк ҡашында, эйәрҙә күҙ тейеүҙән, төрлө яуызлыҡтарҙан һаҡлаусы әйбер булараҡ тағып йөрөткәндәр. Аҫылташтар, көмөш тәңкәләр матурлыҡ өсөн генә түгел, ә кешене һаҡлаусы ролен дә үтәгән, тип ышанған башҡорттар. Улар ҡулланған тағы бер ҡиммәтле таш, әлбиттә, гәүһәр (бриллиант). Ҡатын-ҡыҙҙарҙың сулпыларының ҡашында ошо аҫылташ ҡулланылған. Биҙәүес булараҡ гәлсәр ҙә (горный хрусталь) файҙаланылған. Гәлсәр - үҙенә бер төрлө итеп эшләнгән юғары сифатлы саф бияла, ҡырлы-ҡырлы булып кристаллашҡан үтә күренмәле тау тоҡомо. Башҡорттар уны эшкәртеп, йөҙөк, сулпыларға ҡаш яһағандар.

Урал тауы аҫылташтарға бик бай. Башҡорттар таштарҙың һәр береһенә айырым исем бирип тормаған. Уларҙы күп осраҡта төҫөнә ҡарап ҡына айырған. Мәҫәлән, аҡыҡ, тип бер нисә ташты атап йөрөткәндәр. Сердоликты - ҡыҙыл аҡыҡ, опалды - аҡ аҡыҡ тип атағандар. Агат, ониск таштары ла аҡыҡ исеме аҫтында йөрөгән. Шулай уҡ башҡорттар рубин, сапфир, топаз таштарын "яҡут" тигән дөйөм исем менән атап йөрөткән. Рубин - ҡыҙыл яҡут, топаз - һары яҡут, ә сапфир зәңгәр яҡут тип аталған.

Башҡорттоң милли биҙәнеү әйберҙәрендә зөбәрҙжәт (изумруд) һәм фирүзә (бирюза) таштары киң ҡулланылған. Зөбәрҙжәт - үтә күренеп торған асыҡ йәшел төҫтәге аҫыл таш. Был аҫылташты эшкәртеп, йөҙөк ҡашы итеп ҡулланғандар. Зәңгәр-йәшел төҫтәге фирүзә ташы ла башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡашмауҙарын, ир-егеттәрҙең ҡәмәрҙәрен (биҙәүле билбау) биҙәп торған. Милли кейемдәге биҙәүестәр урынына шулай уҡ гранат (ҡыҙыл төҫтәге таш) һәм аметист (миләүшә төҫөндәге таш) таштары файҙаланылған. Әммә был аҫылташтарҙың исемдәре башҡорт телендә һаҡланмаған. Бәлки, улар шулай уҡ яҡут тип аталғандыр?

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының киң билдәле милли кейем элементы - һаҡалды (уны селтәр тип тә атайҙар) көмөш тәңкә һәм мәрйендәрҙән (коралл) эшләгәндәр. Мәрйен - диңгеҙ хайуандарының эҙбиз ҡалдыҡтарынан барлыҡҡа килгән асыҡ ҡыҙыл, ал, аҡ таш. Башҡорттар янтарь, йәғни гәрәбәне лә биҙәүес булараҡ ҡулланған. Ул ылыҫлы ағастарҙың сайыры күп быуаттар билдәле бер шарттарҙа ятыуҙан барлыҡҡа килгән һары төҫтәге үтә күренмәле аҫылташ.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

ИНТЕРНЕТТАН



# СИРҘЕ ИҪКӘРТЕҮ... яҡшыраҡ

■ Виноград емеше генә түгел, һөйәге лә файҙалы. Ул Альцгеймер ауырыуына аҙырға мөмкинлек бирмәй. Баш мейеһе кластерҙарында олигомер тип йөрөтөлгән бета-аҡһымдар йыйылыуы һөҙөмтәһендә килеп тыуған был сир бик хәүефле, ул хәтер насарайыуына килтерә. Виноград экстракты ошоно булдырмай ҙа инде. Хатта оҙайлы рәүештә виноград һөйәге майы ҡабул итеү артыҡ бета-аҡһымды сығарыуға булышлыҡ итә. Көнөнә 150-250 мг виноград һөйәге экстракты ҡабул итергә йәки ҡыҙыл виноград ашарға кәрәк. Табиптар Альцгеймер сирен иҫкәртеү өсөн башҡа тәбиғи матдәләр, витамин һәм минералдар ҡабул итергә ҡуша. Күп кенә йәшелсәләр, емеш-еләк баш мейеһендә барған үҙгәрештәрҙе туҡтата ала. Куркумин, башҡа тәмләткестәр гомоцистеин кимәлен түбәнәйтә.

■ Тәүлегенә 60 грамм сәтләүек ашау рафинадланған углеводтарҙы алыштыра ала. Шулай уҡ сәтләүек диабеттан да файҙалы. Сәтләүек ҡандағы глюкоза һәм липид кимәлен түбәнәйтә. Ғалимдар миндаль, әстерхан сәтләүеге, пекан шәкәр диабетынан һаҡлай ти. Көнөнә 60 грамм сәтләүек ҡандағы шәкәр күрһәткесен яҡшырта. Һынауҙарҙа өс төркөм ҡатнашҡан, уларҙың тәүгеһе - углеводлы ризыҡтар, икенсеһе - сәтләүектәр, өсөнсөһө бер юлы татлы ризыҡтар ҙа, сәтләүектәр ҙә ашаған. Тик сәтләүектәр менән туҡланыусыларҙың күрһәткестәре яҡшырған, углевод ашаусыларҙың ҡандағы шәкәр кимәле шул килеш ҡалған, әммә углеводҡа сәтләүек ҡушып ашаусыларҙың "насар" холестерин кимәле түбәнәйгән.

■ Кофеиндың организм өсөн әллә ни файҙаһы булмаһа ла, иртән бер сынаяҡ ҡәһүә эсергә мөмкин. Депрессияны еңеүҙең иң яҡшы ысулы шул, ти белгестәр. 10 йыл дауамында барған тикшеренеүҙәрҙә 50 мең ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Был осорҙа уларҙың 2600-өндә депрессия теркәлгән, ҡағыҙә булараҡ, уларҙың береһе лә ҡәһүә ҡулланмаған. Кем көнөнә 1-2 сынаяҡ ҡәһүә эскән, улар депрессияға бирешеп бармаған. Киләсәктә кофеиндың баш мейеһенә тәьҫирен өйрәнергә йыйыналар. Әлегә шул ғына билдәле - кофеин мейенең нервы күҙәнәктәре әүҙемлеген яйлатыусы аденозинды юҡҡа сығара. Был продукт допамин бүленеп сығыуҙы әүҙемләштерә.

■ Кешенең тиреһе көн һайын төрлө тәьҫир кисерә, эҫе һауа торошо ла, һалҡындар ҙа унда сағылыш таба. Шуға ла тирене йәш, матур һаҡлау өсөн уға йыш ҡына балдан яһалған битлек эшләгеҙ, ти белгестәр. Тәү сиратта, бал тирене дымландыра. Һауалағы дымды тартыу һәләтенә эйә булыуы уға бында ярҙам итә. Тире ҡырҡылғанда, бешкәндә бал һөртөү унайлыраҡ, сөнки унда бактериялар үрсемәй. Әгәр ҙә балдың өҫтөн япмай ултыртып ҡуйһаң, унда бактерялар барлыҡҡа килмәйәсәк. Шуға ла ул тирене инфекциянан һаҡлай. Ниндәйҙер яра алғанда уға тәүҙә бал һөртөп, таҙа бинт менән урап ҡуйыу ҙа етә. 12 сәғәт һайын алыштыртып торорға кәрәк. Балдың составына үҙенсәлекле фермент инә, ул һыу менән ҡатнашҡанда водород перекисе барлыҡҡа килтерә. Ниһәйәт, бал антиоксидант сифаттарға эйә.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ

# ҺУҒЫШ ҮТКӘНМЕ НИ!..

*...Ут күбәләгендәй ғәйеп була*
*Имән ярҡаһындай ир-аттар...*
*(Рәйес Түләк. "Яныу" поэмаһы).*



Күптән түгел етмештең дүрте менән барған бер ағайҙан уның синыфташтары тураһында, уларҙың иҫәнлеге хаҡында ҡыҙыҡһындым.

- Ҡайҙан ғына иҫән булһындар, мәктәпте тамамлағаныбыҙға ла илле алты йыл була бит, - тине ағай. - Класташтарымдың өсәүһе гүр эйәһе инде. Уларҙың баҡыйлыҡҡа киткәненә лә ете-һигеҙ йылдар самаһы булалыр.

- Өсәүһе?.. - ишетһәм дә ҡабатлап һораным.

- Эйе. Ә ҡалғандарыбыҙ бар, әлхәмдүлилләһ, һирәк-һаяҡ ҡына булһа ла осрашып торабыҙ...

Минә ҡарағанда ун биш йәшкә олораҡ булған был ағайҙың ошо яуабын ишетеп, ғәжәпләнеүемдең сиге булманы. Бала саҡтары аслы-туҡлы үткән, ауыр һуғыш йылына тура килгән, күптәре атайһыҙ етем үҫкән уның синыфташтарының күпселегенең ошо көнгәсә тере булыуына хайран ҡалдым һәм ысын күңелдән һөйөндөм. Һәр күренешкә дөрөҫ баһа, башлыса, тик сағыштырыуҙар аша ғына биреү мөмкиндер. Иптәштәре хаҡында һорауымды был ағайға тигенгә генә бирмәгәйнем шул. Уға ҡарағанда тиҫтә ярым йәшкә кесерәк булған үҙемдең бергә уҡыған һабаҡташтарымды бер-бер артлы күҙ алдымдан үткәрҙем...

Мәктәпте тамамлағанда ун алты малай инек (һүҙҙе малайҙар хаҡында ғына алып барырға ниәтем). Һәммәбеҙҙең үҙенә күрә тормош пландары ла, әлбиттә, бар ине. Кемебеҙҙәр табип, уҡытыусы, инженер, агроном, йәиһә шофер, тракторист, комбайнер булырға хыялландыҡ. Барыбыҙ ҙа әрмеләребеҙҙе тамамлап ҡайтҡас, хыялдарыбыҙҙы томошҡа ашырырға ынтылдыҡ. Йәш саҡтар, әлбиттә, "һә" тигәнсе үтеп китә. Ғаиләле, бала-ғалы булдыҡ. Ғәйәт күп тармаҡлы, һикәлтәле, ҡатмарлы тормош һуҡмаҡтары буйлап, һәр төрлө һынауҙар, ауырлыҡтар аша артабан да алға барырға тырыша-килә, әле ҡайһы берҙәребеҙ пенсия йәшенә лә яҡынлашабыҙ. Эйе, ҡайһы берҙәребеҙ генә шул! Синыфташтарымды барлап ҡарайым. Берәү, икәү, өсәү... туғыҙ... Туғыҙ малай! Хөрмәтле уҡыусылар, һеҙ әле генә минең ун алты һабаҡташымдың туғыҙы тере икән, тип уйлаһағыҙ - хаталандығыҙ. Киреһенсә, мәктәп дуҫтарымдың туғыҙы был донъяны ташлап китеп тә өлгөргән. Ә тереләребеҙ - етәү генә... Күптәрҙең хатта утыҙға, ҡырҡҡа ла етмәй әрәм булыуы уйға һала. Әрме хеҙмәтен үтәп, һау-сәләмәт булып ҡайтҡан, типһә - тимер өҙәрҙәй егеттәребеҙ ни өсөн шулай иртә донъя ҡуйҙылар, тиғән һорау килеп тыуа. Һуғыш-маҙар ҙа булманы бит был дәүерҙә. Беребеҙ ҙә Афған, Чечня һуғыштарына эләкмәнек... Шул туғыҙ малайҙан тыш, һәр төрлө сирҙән ике ҡыҙыбыҙ ҙа арабыҙҙан китте. Әммә бөгөн һүҙ көслө заттарыбыҙ хаҡында.

Был хәлгә объектив күҙлектән сығып ҡына ҡарау кәрәктер тип уйлайым: бер-икеүһен генә һанамағанда, малайҙарыбыҙҙың шайтан хәсәтенә ҡаршы тора алмай, шул ләғнәтле эсемлектән тыйылырға үҙендә көс тапмай был донъяны бик иртә ташлап китеүе беребеҙ өсөн дә сер түгел. Ниндәй шәп егеттәр ине улар. Шат, көләс йөҙлө, юморға ла бай, кәрәк саҡта йомарт, эшлекле, кешелекле, айыу тотоп менерҙәй, бәғзеләре хатта ҡасандыр танылған спортсы булған малайҙар.

Был ергә беребеҙ ҙә мәңгелеккә килмәгәнбеҙ, әлбиттә. Барыбыҙ ҙа ҡасан да булһа фани донъяны ташлап китәсәкбеҙ. Әммә Аллаһы Тәғәлә тарафынан ҡәтғи тыйылған хәмер эсемлектән эсеүҙең үҙ-үҙенә ҡул һалыуға тиңләүен, шуның менән күптәрҙең әжәлдәрен тиҙләтеүгә сәбәп булыуын бәғзеләребеҙ һаман аңлап етмәгән һымаҡ тойола...

Уйлап ҡараһаң, ысынлап та, яҡташтарыбыҙҙың, милләттәштәребеҙҙең эскелек арҡаһында үлеү осраҡтары хәҙер ауылдарҙа ғәҙәти хәл һымаҡ булып киткән дә баһа! Кемдер берәү әрмелә осраҡлы үлеп ҡайтһа, "ах та ух" килеп, бар илгә һөрән һалабыҙ. Ә егеттәребеҙҙең илгә ҡайтҡас һуғыш яланындағылай ҡырылыуы, ни өсөндөр, тәбиғи хәлдәр рәтенә инә башлаған. Бына ошо хакта йыш ҡына баш ватам. Ни сәбәп менән күптәребеҙ хәмер упҡынына тайып төшөп китте һуң? Әллә ҡасандан борсоған ошо һорауға яуап эҙләп, хәтер ҡапсығында соҡсонам.

Мәктәпте тамамлау айҡанлы сығарылыш кисәһе... Юҡ, унан күпкә иртәрәк, бала саҡтан башлайыҡ. Бәләкәйҙән ололарҙың, атай-әсәйҙәрҙең йыш ҡына, һәр байрамда тиерлек, хатта бер ниндәй байрамһыҙ ҙа ҡунаҡ саҡырышып, мәжлестәрен мотлаҡ рәүештә хәмер ярҙамында "йәмләндереүҙәрен" күрмәй үҫтекме ни беҙ? Ҡайсаҡ бәғзе уҡытыусы ағайҙарыбыҙҙың да лаяҡлы булған саҡтарына күптәребеҙ шаһит. Оло кешеләрҙең йәшәү рәүеше фәҡәт ана шулай булырға тейеш, тиғән патологик ышаныс шул дәүерҙә үҫкән һәр баланың күңеленә инеп оялағанлығын һис кем инҡар итмәҫ, моғайын. Инде туғыҙ-унынсы синыфтарға еткән ҡайһы бер уҡыусыларҙың үҙҙәрен тап ана шул тормош өсөн өлгөргән тип хис итеп, яңы йыл, Октябрь байрамдарын "аулаҡ өйҙәрҙә" шарап, хатта араҡы менән билдәләү осраҡтары ла була торғайны бит. Дин тотҡан олатайҙарыбыҙҙың ахирәттәге тамуҡ уты менән ҡурҡытыуҙарын ҡолаҡҡа элеүсе лә булманы, сөнки беҙгә мәктәптәрҙә (хатта өйҙә лә!) динһеҙлек "тәрбиәһе" бирҙеләр.

Һуңғы ҡыңғырау тантанаһында класыбыҙ менән йырлаған йыр һаман ҡолағымда сыңлай, синыфташтарымдың шат йөҙҙәре бөгөнгөләй күҙ алдыма килеп баҫа.

*...Оянынан осҡан бөркөттәр беҙ,*
*Ҡанатыбыҙ ныҡый һауала.*
*Беҙ осабыҙ сикһеҙ киңлектәргә,*
*Уҡытыусы төүгә юл һала...*

Мәктәп ишек алдында радиоалғыс пластинкаһынан дәртле көй яңғырай. Шат һөйләшеү, көлөшөүҙәр ҡатыш шау-шыу әллә ҡайҙарға ишетелә. Аҡ күлдәкле малайҙар менән аҡ алъяпҡыслы ҡыҙҙар бер-береһенең йыр альбомдарына иҫтәлектәр, теләктәр яҙышып (ул заманда шундай ғөрөф-ғәҙәт бар ине) сыр-сыу килә. Дәүләт имтихандарын тапшырып, һәммәбеҙ ҡулыбыҙға өлгөргәнлек аттестаты алғас, мотлаҡ үткәрелә торған сығарылыш кисәһе лә килеп етә. Мәктәп тупһаһынан тәүге аҙым... Уҡыуҙы тамамлау айҡанлы үкәрелгән был сарала уҡытыусыларҙың тыйыуына ла ҡарамай, йәшеренеп, рюмкаларҙы өҫтәл аҫтында ғына сәкәштереп эҫеү, шулай ҙа, күпселегебеҙ өсөн ғүмерендә беренсе мәртәбә булғандыр, тип уйлайым. Бына шул мәлде анализлап, тағы ла тәрәнерәк фекерләп, ирекһеҙҙән һәр төрлө уйҙарға сумам. Тормошҡа баҫҡан тәүге аҙымыбыҙҙы хәмер менән билдәләп ҡуйыуыбыҙ ҡайсаҡ тимер юл сатындағы иҫерек стрелочниктың яңылыш яҡҡа поезды йүнәлтеп ебәреүен хәтерләткәндәй... Ана шул "иҫерек" ошо көнгәсә бәғзеләребеҙгә юл күрһәтеп торған һымаҡ. Оло үкенескә, балиғ булып етеүебеҙгә, алкоголь эсемлеге йәшәйештең айырып алғыһыҙ бер өлөшө булырға тейешлеләр, тигән фекер барыбыҙҙың аңыбыҙға ла һеңеп өлгөргән ине шул.

Ҡайҙа ғына йөрөһәк тә, илебеҙҙәге бихисап булған һәр төрлө байрамдар, тыуған көндәр, әрмегә оҙатыу һәм ҡаршы алыуҙар, яңы әйбер "йыуыу" кеүек, халҡыбыҙ рухы өсөн ифрат та ят булған йолалар аҙым һайын беҙҙе һағалап ҡына торған

✓ ***Башҡаларҙан үҙегеҙҙе яратыуҙы көтмәгеҙ. Әгәр үҙегеҙҙе яратыусы кешене эҙләһәгеҙ, күңелегеҙ ҡайтасаҡ. Мөхәббәт үҙеңдә яратыуҙан башлана. Әгәр үҙегеҙҙе ярата белмәһәгеҙ, икенсе нәмәлә мөхәббәт таба алмаясаҡһығыҙ.***



икән... Тап ана шундай сараларҙы мотлаҡ оҙата килгән шайтан эсемлеге утыҙ йәшкә лә етер-етмәҫтән күптәребеҙҙе "алкоголизм" тигән сир менән зарарлап та өлгөргән. Үҙебеҙ ҙә һиҙмәҫтән шул мәкерле сирҙе аҡса биреп һатып ала торҙоҡ. Харам эсемлек, йәшәү рәүешенә әйләнеп, бәғзеләребеҙҙе тиҙләтеп упҡынға һөйрәкләргә лә кереште. Ҡанаттары ныҡышып та өлгөрмәй ҡайырылып, "ояһынан осҡан бөркөттәр"ебеҙ бер-бер артлы ана шул төпһеҙ соҡорға йығылып, донъялыҡтан төшөп ҡала башланы. Ул алкоголь менән ағыуланып үлеү, йә иһә суицид булһынмы, йә булмаһа, башҡа берәй фажиғәгә юлыҡһындармы, һәр осраҡта әлеге шайтан менән дуҫлыҡ быға төп сәбәпсе булды. Юғарыла әйтелгән тәбиғи һорау һаман күңелде өйкәп тора: бына ошо заман афәтенә әйләнгән хәлгә кем ғәйепле? Бер нисә быуат элек илебеҙгә иҫерткес эсемлек алып килгән Иван ағай, тиер кемдер. Әммә мин, һис тә уйлап тормаҫтан, фәҡәт үҙебеҙ генә ғәйепле, тип әйтер инем. Ә беҙ "эш боҙоусы"ны һәр саҡ ҡайҙандыр ситтән эҙләп өйрәнгәнбеҙ. Күптәребеҙ Ивандарҙан арттырып та өлгәрәбеҙ бит! Өфө, йәиһә башҡа берәй ҙур ҡала урамы буйлап, һис бер иҫерек кешене осратмайынса ғына, бернисә саҡырым ара үтеү мөмкин. Әммә, хәҙерге, хатта ҙур булмаған ауылыбыҙҙың бер осонан икенсеһенә сыҡҡансы, ныҡ ҡына итеп "ҡырын тейгән" бер-ике кешенең мотлаҡ осрауы бик тә ғәҙәти күренеш...

Иң ҙур үкенес: үлгән яҡындарыбыҙҙы (бәғзеләребеҙ уларҙы хатта әлеге шарап менән иҫкә алып) оҙатабыҙ ҙа, ҡалғандарыбыҙ, йәғни, әлегә тереләребеҙ, бына шул шайтанды яҡын-тирәбеҙҙән бөтөнләйгә ҡыуып ебәреү урынына, һаман да "мәҙәни рәүештә" булһа ла уны түрҙән төшөрмәйбеҙ, киреһенсә, ҡәҙерләп алып йөрөйбөҙ. Балаларыбыҙҙың туйҙарында, тыуған көн мәжлестәрендә иң беренсе "бисмиллаһ" әйтеү урынына шул ҡәһәрле эсемлектән ауыҙ итеүебеҙҙе дауам итәбеҙ. Балаларыбыҙҙың, ейәнейәнсәрҙәребеҙҙең "зубок"тарын, аттестат, дипломдарын даими рәүештә билдәләүҙәр, ысынлап та, "изге" йолаларға әйләнеп киткән бит. Өҫтәлдәребеҙҙең иң түрендә һаман да ҡаҡайып "шампан", уның янында матур этикеткалы коньяк, һәр төрлө башҡа иблис эсемлектәре урын алғанын балаларыбыҙ, ейәндәребеҙ күреп үҫә, мәжлесте нисек кенә мәҙәни итеп үткәрергә тырышыуыбыҙға ла ҡарамаҫтан. Нәҡ беҙҙең бала саҡтағы һымаҡ уҡ! Ә балалар, ғәҙәттә, ата-әсәйҙәрҙең юлын дауам итеүсән...

Әлегерәк "ауылыбыҙҙан фәләнсә кеше һуғышҡа китеп, шуларҙың яртыһынан күбеһе яу ҡырында ятып ҡалды", тигән мәғүмәткә иҫебеҙ китә ине. Һуғышта һәләк булғандар ифрат та күп булып тойола ине. Эйе, ысынлап та, ғәйәт күп. Ә бына тыныс шарттарҙа кеше үлеү осраҡтары һуғыш мәленә ҡарағанда бер ҙә кәм булмауы уғата хәүефкә һала. Афғанстан һуғышында ун йыл буйына ун биш мең ир-егет башын һалды (Бөтә Советтар Союзы күләмендә!). Ә эскелектән илебеҙҙә һәр йыл һайын мәртәбәләргә күберәк үлеүҙәргә иғтибар итәбеҙме? Ҡайҙа тәгәрәйбеҙ беҙ, ҡәҙерле милләттәштәр? Хатта бер ғаиләнән генә бер нисә ағай-эне бер-бер артлы киткән осраҡтар әҙме? Әллә быға күнегеп тә барабыҙмы? Бәлки, мин юҡҡа ғына саң ҡағамдыр? "Тормош булғас, барыһы ла була торғандыр инде..." тип тынысланыу кәрәктер бәлки? Шулай ҙа һәр кемебеҙ тирә-йүнебеҙгә күҙ һалайыҡ. Алыҫҡа йөрөү кәрәкмәй. Үҙебеҙҙең ауылдаштарыбыҙ, күршеләребеҙ, туғандарыбыҙҙы иҫләйек. Әйтәйек, һуңғы ун-ун биш йыл эсендә һәммәләребеҙҙең нисә танышы хәмер арҡаһында был донъянан китте? Бәғзеләр әле булһа үҙҙәрен-үҙҙәре алдаштырып йыуатырға маташа, йәнәһе лә, тегеләй йәки был кеше "ҡатыны бахмурға аҡса бирергә йәлләүе" арҡаһында, йәиһә, фәлән әбейҙең көмөшкәһенең "сифатһыҙ булыуы" сәбәпле йәшләй генә яҡты донъяны ташлап китеп әрәм булды... "Ул эскелектән үлде", тип әйтеүселәр һирәк. Былар, әлбиттә, үлгән яҡындарын нисек тә булһа аҡларға тырышып, уйлап сығарылған һылтау ғына. Ысынында иһә, был бәлә-ҡазаларҙың сәбәбе күпкә һәм бик күпкә төптәрәк. Яҡташтарыбыҙға ифрат та етди уйланыу зарур. Араҡыға табыныуға ҡоролған йәшәү рәүешен ватып, "хәмерле ритуалдар күп осраҡта мотлаҡ атҡарылырға тейеш икән", тигән стереотипты һис кисекмәҫтән һындырып, ҡыйлыҡҡа ырғытырға ваҡыттыр, ҡәҙерле милләттәштәр.

Тере ҡалған синыфташтарымдың, башлыса, етеш, матур тормош ҡороп, бала-сағалар үҫтереп, бәхетле йәшәп ятыуын күреп һөйөнәм. Иманға килеп, Аллаһы Тәғәләнең бойороғон үтәп, Уның ризалығына өмөт итеп, Уға ғибәҙәт ҡылып йәшәгән бәғзеләренә айырыуса шатмын. Әммә бөгөнгө йән әрнеүе менән тулы һүҙем улар хаҡында түгел...

**Ҡыуандыҡ ЗӘБИХУЛЛИН.**

*ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!*

# ҺЫУ ЭСӘМ...

## витаминдар ашайым



**Сәләмәтлек хаҡында бер кәлимә һүҙ әйтеүемде һорағаҫығыҙ, тимәк, мине үҙ һаулығын ниндәйҙер кимәлдә һаҡлай алған кеше тип иҫәпләйһегеҙҙер. Эйе, ниндәйҙер кимәлдә, әммә тулыһынса түгел. Сөнки был мәсьәләгә мин ярайһы һуңлап иғтибар иттем, йәғни, быға, бик күптәр кеүек, организмымдың ресурстары иҫәбенә генә йәшәнем. Ә ул ресурстарҙы тулыландырып тороу кәрәклеге хаҡында уйлап та бирмәнем.**

Был турала уйланырға оҙон ғүмер йәшәгән атайым Фаяз Шәңгәрәй улы сәбәпсе булды. Ул түшәккә ятып сирләгәс, уны бәпәй кеүек ҡәҙерләп тәрбиәләгән Гөлсәсәк һеңлемә ярҙам итешеп, атай янына ҡайтып йөрөнөм. Уның эргәһендә ултырғанда башыма ошондай уйҙар килде: 1931 йылда үҫмер бала ғына килеш кулак яһап һөргөнгә ебәрелеүенә ҡарамаҫтан, унан ҡасып ҡайтҡас, Өфө моторҙар эшләү заводында тир түгеп йөрөгәнендә, арҡаһын бүрәнә баҫып, үпкәһе имгәнеүенә, Бөйөк Ватан һуғышының башынан алып аҙағынаса яу юлы үтеүенә, һуғыштан ҡайтҡас, операция яһап, бер үпкәһен алдырыуына, оҙаҡ йылдар асыҡ туберкулез менән сирләүенә, һуғыштан һуңғы бөлгөнлөккә төшкән илдә яуаплы вазифаларҙа ал-ял белмәй эшләп йөрөүенә ҡарамаҫтан, ул нисек шулай 95 йәшкә етә алды икән? Атайға ҡарап, мин оҙон ғүмер, тимәк, сәләмәтлек серҙәрен аңларға тырыштым. Иң тәүҙә шул иҫкә төштө: атай ауырығас, уны өләсәйем Миңлегәрифә сабый баланы ҡарағандай тәрбиәләй торғайны. Айырым тукланыу, айырым түшәк, көн дә кәзә ҡымыҙы, тәбиғи ризыҡтар...

Атайым ғүмере буйы балдан башҡа шәрбәтле нәмә ашаманы. Икенсенән, ул бик хәрәкәтсән кеше булды. Еләккә алып сыҡҡанында мин уның артынан көскә эйәрә инем. Ҡыштарын - һунарға, йәйҙәрен балыҡҡа йөрөнө. Әммә иң мөһиме - атай беҙҙең ғаиләлә иң ҙур мөхәббәт менән уратып алынғайны.

Уны беҙ, балалар, бөтәһенән дә ныҡыраҡ ярата инек. Хәҙер генә аңлайым, бит беҙ уны әсәйем, өләсәйем ныҡ яратҡан өсөн ятраҡанбыҙ. Ошо ятарыу ҙа, мөхәббәт солғанышында үҙен ҡәҙерле кеше итеп тойоу ҙа уға ғүмер өҫтәп торғандыр, тим. Мин был ғаиләлә бик бәхетле, бәлки, кәрәгенән артыҡ иркә бала булып үҫтем. Артабанғы тормош ауырлыҡтар менән үтте, яҙмыш байтаҡ ҡаҡҡыланы-һуҡҡыланы. Әммә бала саҡта алған һөйөү мине бирештермәй йәшәтте. Һуңлап булһа ла сәләмәтлек өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алырға кәрәклеген аңланым, буғай. Дөрөҫ тукланыуға иғтибар итә башланым. Минең режимымда бер ниндәй яңылыҡ та юҡ. Көнөнә ике литрҙан да кәм булмаған таҙа һыу эсәм. Иртән торғас та ас ҡарынға ике стакан, ашарҙан ярты сәғәт алда, ашағандан һуң ярты сәғәт үткәс тағы берәр стакан, йоҡларға ятыр алдынан тағы ла һыу эсәм. Витаминдарҙан өҙөлгәнем юҡ, сөнки ашаған ризыҡ менән генә мин ресурстарымды тулыландыра алмаҫ инем. Витаминдар ярҙамында артыҡ ауырлығымды ташланым. Физик күнекмәләр менән дә шөғөлләнергә кәрәк, әлегә тотонған юҡ. Әммә, сәләмәт ҡартайырға теләһәм, быныһы өсөн дә ваҡыт табырға тура киләсәк. Эмоциональ яҡтан да хис-тойғоларҙы контролдә тотоу зарур. Был яҡтан ижад менән шөғөлләнеүем бик ныҡ ярҙам итә. Мейене ҡартайтмаҫ өсөн кәрәк бит аҡыл эше! Әҙер рецептар юҡ, ҡыҫҡаһы, сәләмәт булайыҡ, рухи яҡтан да, физик яҡтан да!

**Таңһылыу ҠАРАМЫШЕВА,**
**шағирә, БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Алтынсы сер: мөхәббәттең ыңғай көсө

Һәр кем яратылырға теләй. Урамда осраған һәр кеше үҙ алдына: "Зинһар, мине яратығыҙ!" - тип ҡысҡыра. Ҡайһы бер ваҡытта быны беҙҙең ғәмәлдәребеҙ аша аңлауы ауыр; ҡайһы саҡта кешеләр шул тиклем мөхәббәткә һыуһауына үҙ-үҙенә отчет бирмәй. Күпселек үҙҙәрен етерлек яратмайҙар, тип иҫәпләй. Сөнки бала саҡтағыһа яратылмайҙар. Шуға ла тормош буйлап бала саҡтағы хис-тойғоларын кире ҡайтарырға тырышып, тышҡы сығанаҡтарға мөрәжәғәт итеп йәшәйҙәр.

Үҙегеҙҙең тормошоғоҙға ҡарағыҙ. Магазинға аҙыҡ-түлек алырға бараһығыҙ, университетҡа - белем артынан, табипҡа - дауаланырға, тәҙәүсегә - нимәлер төҙәтергә, универмагҡа - кейем алырға. Мөхәббәт эҙләп тә башҡаларға мөрәжәғәт итәһегеҙ.

Башҡаларҙан үҙегеҙҙе яратыуҙы көтмәгеҙ. Әгәр үҙегеҙҙе яратыусы кешене эҙләһәгеҙ, күңелегеҙ ҡайтасаҡ. Мөхәббәт үҙеңдә яратыуҙан башлана. Әгәр үҙегеҙҙе ярата белмәһәгеҙ, икенсе нәмәлә мөхәббәт таба алмаясаҡһығыҙ. Үҙегеҙ мөхәббәт сығанағы булып, уның менән тирә-яҡтағыларҙы йылытып йәшәгәндә генә һеҙҙе лә яратырҙар. Әммә иҫегеҙҙә тотоғоҙ, һеҙ мөхәббәтегеҙҙе икенсе кешегә бирә алмайһығыҙ. Һеҙ уны ярата ғына алаһығыҙ. Был үҙеңдең аңыңды, уйҙарыңды, тәнеңде, тормошто һәм илаһи эске көсөңдө яратыуҙы аңлата. Тирә-яҡтағы бөтөн нәмәне: ағастарҙы, сәскәләрҙе, хайуандарҙы, ҡояш нурын, күргән бөтөн тереклекте ятарығыҙ. Автомобилдәр менән дуҫ булмаған, һәр саҡ ниндәйҙер техник проблемалары сығып торған кешеләрҙе беләһегеҙме? Ә бәғзеләрҙең машиналары һин дә мин эшләй, хужалары улар менән бер телдә аңлаша. Шундай уй тыуа, күрәһең, тере булмаған предметтар ҙа мөхәббәтте тоя. Яратыу-яратылыу - кешенең иң көслө ихтыяжларының береһе. Күңел торошо ла шуға бәйле. Был тезис бөләкәй енәйәтселәр өсөн пансионат ойоштороусы кеше тарафынан ғәмәлдә раҫлана. Һәр яңы килгән тәрбиәләнеүсегә ниндәйҙер хайуанды ҡарарға ҡушалар. Йәйләп, ул был йән эйәһе тураһында хәстәрлек күрә, уны ярата башлай. Күпселек балалар өсөн был йәнлектәр улар яратҡан беренсе йән эйәһе була. Был реабилитация ысулының юғары һөҙөмтәлелеге бары тик кеше балаларҙы яратырға өйрәткәнә өсөн генә юғары була.

Башҡаларға ниндәй мөнәсәбәттә булырға? Үҙебеҙҙе яратырға өйрәнмәй тороп, башҡаларҙы ярата алмаясаҡбыҙ, тигән идея кемгәлер эгоцентрик булып күренер. Әммә был планеталағы барлыҡ кешеләр менән дә бәйле булыуыбыҙҙы аңлағанға тиклем генә. Баш - көүҙәгә, ҡул суҡтары - ҡулға бәйле булған кеүек, һәр кеше башҡаларҙың дауамы ул. Тәндең бер өлөшөнә ингән инфекция тотош тәндә зарарлай. Кемгәлер ҡарата психологик, эмоциональ, физик бәгерһеҙлек, тимәк, үҙ-үҙеңә шундай мөнәсәбәттә булыу ул. Шул сәбәпле беҙ: "Сәсрәп китһен донъяһы, үҙемдә генә уйлаясаҡмын", - тип әйтә алмайбыҙ. Киреһенсә, кешелектең аңын киңәйтергә тырышырға тейешбеҙ, сөнки ул, сынйыр кеүек үк, иң көсһөҙ звеноһы көслә булғанда ғына ҡеүәтле.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ЙӘШЕЛ ДАУАХАНА*

# КЕСЕРТКӘН



**Яҙғы кесерткән йомшаҡ та, файҙалы ла. Уны сәскә атҡанға тиклем йыйырға кәрәк. Борондан кесерткәнде яраны уңалтыусы, бәүел ҡыуыусы, организмды нығытыусы, эсте йомшартыусы, витаминлы, ҡорошҡаҡҡа ҡаршы, ҡаҡырыкты сығарыусы сара итеп файҙаланғандар.**

Кесерткән төрлө ҡан ағыуҙарҙа, геморрой, бөйөрҙә, үт ҡыуыгында таш булғанда, тын ҡыҫылғанда, бауыр һәм үт юлдары ауырыуҙарында, шешенгәндә, эс ҡатҡанда, йөрәк ауыртҡанда, туберкулезда, ҡурылдай астмаһында, ҡурылдай ауырыуында, аллергия ваҡытында ҡулланыла.

Шулай уҡ ул тире ауырыуҙары һәм сәсте нығытыу, үҫтереү өсөн да файҙалы.

Кесерткәндә аскорбин кислотаһы ҡара ҡарағатҡа һәм лимонға ҡарағанда 2 тапҡырға күберәк, каротин һырғанаҡ, кишер, ҡуҙғалаҡҡа ҡарағанда юғарыраҡ. Кесерткәндең 20 япрағы А витаминының көндәлек нормаһы менән тәьмин итә. Кесерткән К, Е, В витаминдарына һәм тимер, магний, баҡыр, кальций һәм башҡа микроэлементтарға бай.

Составында кремний һәм органик кислоталар булыуы һөҙөмтәһендә ул организмды дөйөм нығытыу һәләтенә эйә: организмдың бик күп бактерияларға, токсиндарға, радиация йоғонтоһона ҡаршы тороуы көсәйә, иммунитетты нығыта, кислород етешмәүҙән юғары кимәлдә һаҡлай.

Кесерткән углевод һәм аҡһым алмашыныуын көсәйтеүсе булараҡ, уны бик йыш хроник ауырыуҙар ваҡытында ҡулланырға кәңәш итәләр. Ҡанды туктатыусы булараҡ, уны эске - аналыҡтан, үпкәнән, бөйөрҙән, эсәктәрҙән һ.б. ҡан килгән ваҡытта ҡулланалар. Әммә тап ошо ҡанды ойоштороу көсө арҡаһында уны ҡан тамырҙарының варикозы, тромбофлебит һәм ҡан ҡуйы булғанда, шулай уҡ ҡан баҫымы юғары, атеросклероз, бөйөрҙәр ауыртҡанда ҡулланыу ярамай.

# БӘПЕМБӘ



**Быуындар һыҙлауы көндәлек тормошта шул тиклем нык ҡамасаулауы мөмкин, сөнки һыҙлау, ауыртыныу бөтөн иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә.**

Быуындар ауыртыуының, һыҙлауының сәбәбе төрлө булғанда ла, күп осраҡта ул быуын тирәһендәге туҡымаларҙың ялҡынһыныуы, елһенеүенән башлана. Быуындар ауыртыуынан ҡотолоу өсөн иң файҙалы үсемлектәрҙең береһе - бәпембә. Ул ябай сүп үләне генә түгел, унан әҙерләнгән сәй һыҙланыуығыҙҙы кәметеп кенә ҡалмаясаҡ, ә организмды тотошлайы менән нығытырға ярҙам итәсәк.

➔ Таҙа урында үҫкән, химик матдәләр менән ағыуланмаған, бысранмаған бәпембәләрҙе йыйығыҙ. Бер сынаяҡ сәй өсөн биш бәпембә сәскәһе етә. Уларҙы һалҡын һыуҙа йыуығыҙ.

➔ Сәскәләрҙе кәстрүлгә һалып, улар йөҙөп йөрөрлөк итеп һыу ҡойоғоҙ. Был күләмдән бер-ике сынаяҡ сәй сығырға тейеш.

➔ Кәстрүлде утҡа ҡуйып, сәскәләрҙе 20 минут ҡайнатығыҙ.

➔ Ҡайнатылған төнәтмәне һаркытығыҙ һәм сынаяҡтарға ҡойоғоҙ. Бер аҙ шәрбәт ҡушырға, тәм биреү өсөн лимон өҫтәргә мөмкин. Быуындарҙа ауыртыу тойған һайын ошолай сәй ҡайнатып эсегеҙ.

**Иҫкәрмәләр:**

- Әгәр бәпембәләрҙе үҙегеҙ йыйһағыҙ, бер сынаяҡ сәйгә күпме кәрәк, шунса ғына өҙөгөҙ. Яңы ғына йыйылған сәскәләрҙең файҙаһы күберәк.

- Әгәр сәйегеҙ күберәк килеп сыҡһа, ҡалғанын һыуытҡысҡа ҡуйып, һуңынан эсегеҙ.

- Бәпембә сәйен сәскәләренән генә түгел, тамырынан да эшләргә мөмкин.

- Әгәр ниндәйҙер дарыуҙар эсәһегеҙ икән, мотлаҡ табип менән кәңәшләшегеҙ, сөнки бындай сәй ҡайһы бер дарыуҙарҙың тәьсирен үҙгәртеүе бар.

# ҠАРАҒАТ ЯПРАҒЫ



**Ҡарағат япрағы һалынған сәйҙең файҙалы булыуы тураһында барыһы ла белә. Ҡарағат япрағында төрлө витаминдар (бигерәк тә "С" витамины), минераль тоҙҙар, фитонцидтар, флавоноидтар күп.**

Уны витамин етешмәүҙән яфаланғанда, иммунитет ҡаҡшағанда ҡайнатып эсеү файҙалы. Арығанда, оҙайлы ауырығандан һуң ҡулланғанда был сәй хәлегеҙҙе яҡшыртырға ярҙам итәсәк. Бынан тыш, "С" витамины бик көслө антиоксидант, яман шеш ауырыуы барлыҡҡа килеүенән һәм ваҡытынан алда ҡартайыуҙан һаҡлай.

Ҡарағат япрағы төнәтмәһе дезинфекциялай, елһенеүҙе бөтөрә. Шуға уны ашҡаҙан сей яраһы (язваһы) һәм гастрит ауырыуҙарын дауалау өсөн ҡулланырға тәҡдим итәләр. Ҡарағат ҡан тамырҙарына һәм ҡан барлыҡҡа килеүгә яҡшы тәьҫир итә - аҙ ҡанлылыҡтан һәм атеросклероздан һаҡлай. Быуынға тоҙ ултырыу, ревматизм ауырыуҙары менән яфаланғанда алыштырғыһыҙ дауа. Уның япрағы составына ингән фитонцидтар һалҡын тейеүҙән, грипп, бронхит, ангина, быума йүтәл сирҙәренән йүнәлергә ярҙам итә. Айырыуса ололарға йөрәк-ҡан тамырҙары, мейе эшмәкәрлеген яйға һалырға, күреү һәләтен һаҡларға мөмкинлек бирә. Ҡарағат япрағы дизентерия таяҡсаларын бөтөрә. Тибет медицинаһында ҡарағат япрағынан ҡайнатылған сәй лимфа биҙе туберкулезы, һыуыҡ тейгәндә, бәүел-енес системаһы ауырыуҙарынан дауаланғанда эсергә тәҡдим ителә. Бындай шифалы сәйҙе әҙерләү өсөн ике ҡалаҡ ваҡланған ҡарағат япрағына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 15-20 минут ултыртып ҡуйырға кәрәк. Ҡарағат һабаҡтары, төрлө емештәр, бөтнөк (мята), ҡурай еләге япрағы, ҡара бөрлөгән, йәсмин сәскәһе ҡушып һалырға мөмкин. Бындай сәй файҙалы ла, тәмле лә килеп сыға.

# ЯБЫҒЫРҒА ТЕЛӘҺӘҢ...

**Халыҡ табибы Сергей Макеев әйтеүенсә, биш көндә биш килограммға ябығыу - мөмкин хәл. Бик боронғо һәм күп тапҡыр һыналған рецепт бар.**

Бер ус самаһы йүкә сәскәһен термосҡа һалып, бер литр ҡайнар һыу ҡойоп, ауыҙын ябып ҡуйығыҙ. Ошо төнәтмәне көн дауамында, һыуһаған һайын эсергә кәрәк. Йүкә сәскәһе төнәтмәһенән башҡа бер нәмә лә эсергә ярамай, ә бына сама белеп кенә ашарға мөмкин.

Икенсе көндә тал омелаһынан (омела ивная) ябыҡтырғыс эсемлек әҙерләйбеҙ. Йүкә сәскәһе төнәтмәһен әҙерләгән кеүек, бер ус үләнгә бер литр ҡайнар һыу ҡойоп, термосты ябабыҙ. Омела организмды тарҡалған матдәләрҙән таҙарта, артыҡ майҙы яндыра. Унан әҙерләнгән сәйҙе эскәс, тейешенән артыҡты ашағы килмәй.

Ябығыуҙың өсөнсө көнөнә берәр ус йүкә сәскәһе һәм тал омелаһын бергә һалып, термосҡа ике литр ҡайнар һыу ҡойоп ултыртабыҙ. Дүртенсе көнөнә лә икеһен бергә һалып эсемлек әҙерләргә һәм бер агас ҡалаҡ бал ҡушырға. Бишенсе көндә йүкә, тал омелаһы, бал һәм лимондан эшләнгән эсемлекте көн дауамында эсеп йөрөргә. Бер лимон һутын тотош һығырға кәрәк. Борон, Рәсәйҙә лимондар булмаған заманда, тоҙланған кәбестәнең һутын ярты стакан күләмендә ҡушҡандар. Сама белеп туҡланып һәм үрҙә өйрәтелгән ысул буйынса әҙерләнгән эсемлекте эсеп, биш көндә биш килограмға ябығырға мөмкин.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1437 һижри йыл.*

| Май (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (16) дүшәмбе | 3:29 | 4:59 | 13:30 | 19:57 | 21:27 | 22:57 |
| 24 (17) шишәмбе | 3:27 | 4:57 | 13:30 | 19:59 | 21:29 | 22:59 |
| 25 (18) шаршамбы | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:00 | 21:30 | 23:00 |
| 26 (19) кесе йома | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:02 | 21:32 | 23:02 |
| 27 (20) йома | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:03 | 21:33 | 23:03 |
| 28 (21) шәмбе | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:05 | 21:35 | 23:05 |
| 29 (22) йәкшәмбе | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:06 | 21:36 | 23:06 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАҠСА*



# ТОМАТ

**Томатты асыҡ һауаға күсереүҙең дә ҡағиҙәләре бар, ти белгестәр. Иң тәүҙә томаттың сортын дөрөҫ һайларға кәрәк.**

Орлоҡтоң ҡабында "асыҡ грунт өсөн" тигән яҙыуы булһа, яҡшыраҡ. Үңыштың өлгөрөү осоро 100-105 көндән артыҡ булырға тейеш түгел. Был турала ла ҡапта мәғлүмәт була.

Томат үсентеләрен асыҡ һауаға июндә күсерәләр. Төптәрҙең аралары 30 см булһын. Алдан картуф үҫкән урында томат насар үҫә. Әсе тупрҡты ла үҙһенмәй, янған тиҙәк, эҙбиз, көл индерелгән урында яҡшы уңыш бирә.

Үсентенең тирәһендәге сүп үләнен йолҡоп тороғоҙ. Помидор йәйләп өлгөрә, шуға ла уға һыуҙы әҙләп кенә ҡойоп торалар. Тик үҫкән тупрағы ҡоро булмаһын, ул саҡта йәшел помидорҙар йәйләп серей башлай.

# МАЛЬВА

**Немецтар уны "Шток-роза" тип йөрөтә. Бейек һабаҡта үҫкән раузаны икенсе төрлө мальва тип тә атайҙар. Ул бик матур сәскәләре менән айырылып тора. Ышаныуҙар буйынса, был декоратив үсемлек йортто насар көстән һаҡлай. Бер тапҡыр үҫеп китһә, мальва орлоҡтарын ҡойоп, йыл һайын үҙенән-үҙе шытып сығасаҡ.**

Мальва - күп йыллыҡ үсемлек. Уны майҙың аҙағында, йәй башында сәсәләр. Бер-береһенең араһы 20 см тирәһе булһын. Үсентеләр 14 көндән шытып сыға, улар күсереп ултыртыуҙы насар кисерә, шуға ла уны асыҡ һауаға сәсәләр. Беренсе йылына сәскә атмай, был мәлдә уның тамыры нығына. Икенсе йылына йәйҙең уртаһында сәскә ата башлай, яҡынса ике ай тирәһе ултыра. Сағыу алһыу, ҡыҙыл, көрән, аҡ сәскәләре менән айырылып тора. Тик был гаммала күк, зәңгәр төҫтәр юҡ. Сәскә атып бөткәс, орлоҡтары тумалана. Улар 4 аҙна тирәһе өлгөрә.

Мальва - ҡояш яратыусы үсемлек. Күләгәле урында икенсе йылына ла сәскә атмауы ихтимал. Ә бына тупраҡты артыҡ "һайламай", ҡоро ерҙә лә яҡшы үҫә. Шулай ҙа уның азотҡа бай булыуы һәйбәт. Һыуҙы ла йыш һибергә кәрәкмәй, югиһә, үсемлектең тамыры серей башлай.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25, 27 май ПРЕМЬЕРА "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия

**26 май "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 май "77-се бәхетле билет"** ижад миҙгелен ябыу концерты

**24 май** Башҡортостандың халыҡ артисы **Зөлфиә Ҡудашеваның ижад кисәһе.** Нәзифә Ҡадирова, Флүрә Килдейәрова, Вәхит Хызыров, Роза Аккучукова, Ғәли Алтынбаев, Азат Айытҡолов, Азамат Тимеров, "Мираҫ" фольклор йыр һәм бейеү ансамбле, "Сибай" бейеү ансамбле ҡатнаша.

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**28 май "Гүзәл ҡалам, Стәрлетамаҡ"** XXV концерт миҙгелен ябыу концерты

*Телмәренең торошона ҡарап был телдә һөйләшкән халыҡтың нисек йәшәүе тураһында фекер йөрөтөп була.*

*(Хулио Кортасар).*



ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы




**Ниһайәт, "Киске Өфө" гәзитенең "Вконтакте" социаль селтәрендәге "Башстатус" төркөмө менән берлектә иғлан иткән "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһының тәүге ҡатнашыусылары төрлө әҫәрҙәрҙе уҡырға тәҡдим итә башланы.**

Улар "Вконтакте" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә үҙ фекерҙәрен белдереп, уҡыған әҫәрҙәре тураһында бик матур баһаламалар яҙып ҡалдырған. Башҡорт халҡының быуындан-быуынға күсереп, аманат итеп тапшырып барырлыҡ, бөтәһе лә уҡып белергә тейешле китаптары/әҫәрҙәре тупланған исемлекте төҙөүгә булышлыҡ иткән акцияға тәүгеләрҙән булып башҡорт Википедияһын ойоштороусыларҙың береһе Рөстәм Нуриев ҡушылды. Түбәндә уның шиғри юлдарға һалынған тәҡдимен һеҙҙең иғтибарға тәҡдим итәбеҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар.

*"Йыл дауамы бараһы*
*"Киске Өфө" сараһы.*
*Тура килһен шартына*
*Китап алып ҡулыма,*
*100 әҫәре башҡорттоң*
*Исемлеген башлаған*
*"Урал батыр" ҡобайырын*
*Уҡып сыҡтым яңынан.*
*Йәше-ҡарты, барыһы*
*Хәтерендә торһасы,*
*Урал батыр васыяты*
*Яҡты маяҡ булһасы:*

*"Ат итеп тик Яҡшыны*
*Яман юлын быуығыҙ!"*
*Иңгә изге бурысты*
*Һалған олуғ бабабыҙ".*

Киләсәк быуынды башҡорт халҡының рухи донъяһына ылыҡтырып үҫтереү тураһында уйланған һәр кем "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһында әүҙем ҡатнашыр, тигән өмөттә ҡалабыҙ. Бының өсөн ни бары "Вконтакте" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған "Башҡорт китабы топ-100+" акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекеренде яҙып ҡалдырыу кәрәк. Йә булмаһа, "Киске Өфө" гәзите редакцияһына хат ебәрергә мөмкин.

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ҺҮҘЛЕК



# БЫЛ ҮЛӘНДЕҢ АТАМАҺЫ НИСЕК?

**Ҡыҙыл ҡарағат** - смородина красная
**Ҡыҙыл ҡәнәфер, сәғәтут** - гвоздика травянка
**Ҡыҙыл яран** - герань кровянокрасная
**Ҡыҙыл әшәлсә** - ятрышник кровавый
**Ҡыҙыл тал** - ива пурпуровая
**Ҡыҙыл эт ҡарағаты** - паслен сладко-горький
**Ҡылған** - ковыль
**Ҡылъебәк** - повилика льняная
**Ҡылыс япраҡ, басағүлән** - сабельник болотный
**Ҡылыс үлән** - меч трава
**Ҡымыҙлыҡ** - горец альпийский
**Ҡына** - хна
**Ҡына гөлө** - бальзамин
**Ҡына үләне** - недотрога обыкновенная
**Ҡыңғырау сәскә** - колокольчик
**Ҡырағай торма** - дикая редька
**Ҡыр бөтнөгө** - мята полевая
**Ҡыр сейәһе** - вишня степная
**Ҡырлы ҡамыш** - камыш трехгранный
**Муйыл** - черемуха
**Мурза талы** - ива корзиночная
**Мүк** - мох
**Мүк еләге** - клюква болотная
**Мүктәк, айыутабан** - борец высокий
**Мүтәк** - лапчатка низкая
**Мүшмел** - кизил обыкновенный
**Мәк** - мак снотворный
**Мәрүәр ағасы** - бузина обыкновенная
**Мәрүәт үләне, бесәй табан, бесәй икмәге** - просвирник приземистый
**Мәтрүшкә** - душица
**Мәшкәк, бесәй тармаһы** - будра плющевидная
**Неслия, ваҡ бөргәнәк** - неслия
**Нигеҙут** - дескурайния Софии
**Ноҡот борсағы** - горох турецкий, нут бараний, нут
**Нәркәс** - нарцисс

**С. ЙӘНТҮРИН, Ғ. ХИСАМОВ.**
**"Русса-башҡортса, башҡортса-русса ботаника терминдары һүҙлеге".**

*ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ*

# ЙОЛОҠ ТУЙЫ ТУРАҺЫНДА...

## кем белә?



**Халҡыбыҙҙа элек-электән йола институты көслө булған, йәмғиәттәге, айырым кеше тормошондағы күренештәр ата-бабалар аҡылына таянып, йола ҡанундарына ярашлы хәл ителгән. Ваҡыттар үтеү менән, билдәле тарихи шарттар арҡаһында, ҡайһы бер йолалар онотолған, ҡайһы берҙәренең айырым элементтары ғына һаҡланып ҡалған. Шундай йолаларҙың береһе - йолоҡ туйы тураһында һүҙем.**

Ул йыл миҙгелдәренә бәйле йолаларҙың береһе, яҙғы йолалар циклына ҡарай. Был йоланы Хәйбулла районы Татыр-Үҙәк урта мәктәбендә уҡығанда башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыбыҙ Рәйфә Искәндәр ҡыҙы Түлебаева етәкселегендә сәхнәләштерә торғайныҡ. Әммә был йола тураһында башҡа бер мәғлүмәт тә тапҡаным юҡ.

Йолоҡ туйы март аҙаҡтары - апрель баштарында үткәрелгән һәм йылғаларҙа боҙ китеү менән бәйле булған. Йылғала (ә һәр ауыл ниндәй ҙә булһа йылға буйында урынлашҡан) боҙ ҡуҙғалыу менән бөтә ауыл халҡы йылға ярына йыйылған. Ҡарт-ҡоролар, йылдың имен килеүен, уңыштың мул булыуын теләп, доға ҡылған, ә йәш-елкенсәк ярҙа уйындар ҡорған. Йылғала ҡуҙғалған боҙ бөтә ауырыуҙарҙы, сир-зәхмәттәрҙе, бөтә бысраҡтарҙы алып китергә тейеш, тип ышанғандар. Йолоҡ туйы, шулай итеп, таҙарыныу, сафланыу мәғәнәһен йөрөткән.

Хәҙерге заманда был үҙенсәлекле йола йә булмаһа уның үтәлешенең айырым элементтары һаҡланып ҡалған төбәктәр бармы икән? Ҡайһы яҡта нисек үткәрелгән? Ололар араһында уны хәтерләүселәр бармы? Фольклорсы-ғалимдарҙың фекерен белеү ҙә ҡыҙыҡлы булыр ине.

**Гөлкәй СӘМЕРХАНОВА,**
**БДУ-ның Сибай институты уҡытыусыһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠУНАҒЫН ЯРАТМАҺА...

## хужа бесәйен әрләр

Бер генә ваҡиға ла беҙҙә өр-яңы кешене уятыуы мөмкин. Йәшәү, тимәк, һәр көндө яңынан тыуыу.

**(Антуан де Сент-Экзюпери).**

Беҙ булмаған урында яҡшы. Үткән тормошта беҙ юҡ, шуға ла ул беҙгә иң яҡшыһы булып тойола.

**(Антон Чехов).**

Бөтә донъя - театр. Ундағы ирҙәр ҙә, ҡыҙ-ҡатындар ҙа - актерҙар. Уларҙың һәр береһе йә сәхнәгә килеп сыға, йә сәхнәнән сығып китә. Һәр береһе төрлө роль уйнай...

**(Вильям Шекспир).**

Йәшәүҙең ҡәҙерен белмәгәндәр йәшәүгә лайыҡлы ла түгел.

**(Леонардо да Винчи).**

Телмәренең торошона ҡарап был телдә һөйләшкән халыҡтың нисек йәшәүе тураһында фекер йөрөтөп була.

**(Хулио Кортасар).**

**Тағы бер аҡыл: "Кеше иң күп эшләгән гонаһ ниндәй?" тип һораған уҡыусылары Уҡытыусынан.**

**- Кешеләр эшләгән иң киң таралған гонаһ - ул уларҙың үҙ-үҙенә хыянат итеүе, - тип яуаплаған Уҡытыусы. - Кешеләр быны меңәрләгән ысул менән тормошҡа ашыра. Улар үҙҙәренән үҙҙәре баш тарта һәм башҡалар тарафынан йотола. Был нисек шулай килеп сыға һуң? Кешеләр һәр ваҡыт көслөрәк, аҡыллыраҡ, ҡеүәтлерәк тип, кемделер алға сығара. Улар һәр ваҡыт ниндәйҙер абруйға Аллаға табынған кеүек табына, уның һәр һүҙен ысынбарлыҡ итеп ҡабул итә. Улар шулай үҙҙәренә кумир уйлап сығара ла, уларҙың аяғына йығыла. Улар ниндәйҙер сәйәси система, йәмәғәт ойошмалары төҙөй һәм уларға тоғро хеҙмәт итә. Улар сит идея өсөн һуғышырға, көрәшергә әҙер тора. Улар шулай итеп үҙҙәрен үлемгә ебәргән кеше уңышлыраҡ,байыраҡ йәшәһен өсөн ғүмерҙәрен бирергә лә әҙер тора. Ә бит меңәрләгән кешене үҙенә табындырған, төрлө көрәш һәм һуғыштарҙы уйлап сығарғандар ике маҡсатты ғына күҙ уңында тота: аҡса һәм власть. Бындай хыянаттың ҡурҡыныс шунда: үҙ-үҙенән баш тартҡан, үҙлеген ситкә ташлаған кеше шул тиклем алыҫ китеп өлгөрә, хатта әйләнеп ҡайтыу мөмкин дә булмай...**

**Һеҙ ҙә, уҡыусыларым, башҡалар кеүек, ҡасандыр сит әләм аҫтында хәрәкәт иттегеҙ. Әле бына үҙлегегеҙгә яңынан әйләнеп ҡайтыу юлындаһығыҙ. Үҙлегегеҙгә әйләнеп ҡайтҡас, башҡаларға ла үҙ-үҙҙәренә ҡайтырға ярҙам итегеҙ. Һәр гөл үҙ сәскәһен атырға, үҙенең генә хуш еҫен таратырға тейеш...**

**Ошо һүҙҙәрҙән һуң Уҡытыусы доға ҡылырға ултыра. Уҡыусылары уның ошо һүҙҙәрен генә ишетә: "Бар гөлдәр ҙә сәскә атһын берүк..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**

«ПечатниК» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450059, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Комсомол урамы, 27/1).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 май 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4877
Заказ 885/05